ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

23-29 июль (майай)

2022

№29 (1019)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ҡушыу ғәмәле ни күрһәтер?



2-3

Һаҡмар һыуы аға ҡибла табан...



6

Табип сер аса:

"Кемдәр улар - симулянттар?"



8-9

Мин көнләшмәйем, кенә ҡыумайым...

Күңел тыныслығы һаҡлай алыуымдың сере шундалыр



11

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыбыҙ! Шулай итеп, гәзит-журналдарға яҙылыуҙың бер миҙгеле тамамланды, икенсеһе башланды: июлдән алып 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 718 һум 98 тингә яҙыла башлай алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

**(Дауамын 15-се биттә уҡығыҙ).**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Үҙ баҡсаһында картуф-йәшелсә үҫтереп һатыусы ауыл халҡына, ҡала баҡсасыларына киләһе йылдан дәүләт ярҙамы программаһы - субсидия түләү ҡарала. Ошо хаҡта фекерегеҙ нindәй?

***Илшат ФӘЗРАХМАНОВ, БР Хөкүмәте вице-премьеры, ауыл хужалығы министры:*** Башҡортостанда үҙмәшғүлдәргә картуф һәм йәшелсә үҫтереү өсөн субсидия түләнә башлаясағы хаҡында матбуғат һәм киң мәғлүмәт сараларында хәбәр ителгәйне инде. Был турала Рәсәй Хөкүмәте ҡарары бар һәм ул 2023 йылдың 1 ғинуарынан көсөнә инәсәк. Үҙ участкаларында йәшелсә һәм орлоҡ үҫтереп һатырға теләгән баҡсасыларға дәүләт аҡсалата ярҙам күрһәтәсәк. Үҙмәшғүл граждандарға субсидияны ике йүнәлештә түләү ҡарала. Беренсеһе - йәшелсә һәм картуф орлоҡсолоғо менән маҡсатҡа ярашлы шөғөлләнеп, элиталы орлоҡ һатасаҡ кешеләр алдан иҫәпләүҙәр буйынса гектарына 60-70 мең һумға иҫәп тота ала. Асыҡ һауалағы участкала аҙыҡ-түлек маҡсатынан сығып картуф менән йәшелсә үҫтереүселәргә иһә тоннаһына 4 мең түләнәсәк. Бынан тыш, картуф һәм йәшелсә орлоғо һатып алыу маҡсатында аванс биреү ҙә ҡарала. Бының өсөн үҙмәшғүлдәр эшкәртеүсе менән килешеү төҙөргә тейеш була. Эшкәртеүсе үҙмәшғүлгә орлоҡ һатып алырға аҡса бүлә һәм уңыш йыйып алынғас, дәүләт һәр эшкәртеүсегә 5 млн һум иҫәбе менән уның сығымдарының 50 процентын ҡаплаясаҡ. Үҙмәшғүлдәр ауыл хужалығы ҡулланыусылар кооперативтары менән хеҙмәттәшлек итә йәки баҙар хаҡы менән уларға үҙ продукцияһын һата ала.

Бөгөн республикала 550 мең ғаиләнең шәхси хужалыҡ участкалары бар. Уларҙың күпмеһе үҙмәшғүл булып теркәлеүен район властары асыҡларға тейеш. Башҡортостанда картуф һәм йәшелсәнең 86 процентҡа яҡыны шәхси хужалыҡта үҫтерелә. Шул уҡ ваҡытта уның күпселек өлөшөн ғаилә һатмай, ә үҙ ихтыяжына файҙалана. Әлеге субсидия үҙмәшғүлдәрҙе баҙар шарттарында эшләргә, картуф һәм йәшелсәне һатыу өсөн дә етештереүгә дәртләндерер тигән ышаныс бар. Республика Хөкүмәте 2023 йылға тиклем баҡсасыларға субсидия бүлеү тәртибен эшләйәсәк, ә ошо йылдың авгусында РФ Ауыл хужалығы менән был хаҡта килешеүгә ҡул ҡуйыла.

## БАШ ҠАЛАМ

# ЙӘШЕЛ ҠАЛА ИСЕМЕН РАҪЛАП...

**Ошо көндәрҙә Marketing Logic аналитик компанияһы төҙөгән асыҡ мәғлүмәттәр һәм геомәғлүмәт технологиялары нигеҙендә Рәсәйҙең иң "йәшел" ҡалаларының рейтингы һөҙөмтәләре билдәле булды. Халҡы миллиондан ашҡан ҡалалар араһында Өфө ТОП-5 исемлегенә инә һәм Пермь, Краснодарҙан ҡала өсөнсө урында тора. Бер нисә йыл элек ул дүртенсе урында ине. Хәйер, Башҡортостандың баш ҡалаһы "йәшел"-миллионсылар исемлегендә даими лидерҙар рәтендә бара.**



**(Дауамы 2-се биттә).**

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# МЕДИЦИНА МӨҒЖИЗӘ ТЫУҘЫРА



**Өфөлә хирургтар бауырҙың рак күҙәнәктәрен "үлтерергә" һәм туңдырырға өйрәнде. Түбән температуранан һуң яман шеш үҫеүҙән туҡтай. Был процедура "криоабляция" тип атала.**

БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы сайтында хәбәр ителеүенсә, бауырға өс энә - зонд - ҡаҙайҙар, улар туңдырыу ярҙамында рак күҙәнәген үлтерә. Шеште алмайҙар, организм унан үҙе ҡотола, тоташтырыуҙы туҡыма менән алмаштыра. Энә осондағы температура - минус 250 градус. Процедура ваҡытында инструмент боҙ менән ҡаплана. Операция урындағы анестезия менән эшләнә һәм ауыртмауы билдәләнгән. Уны рак менән өс йыл көрәшкән ҡатынға эшләнеләр. Ағзаның өлөшөн алыу буйынса операция ваҡытлыса ғына еңеллек биргән, һуңынан яңы үҙәк барлыҡҡа килгән. Яңынан бысаҡ аҫтына ятыу хәүефле, сөнки организм көсһөҙ. Ошондай пациенттар өсөн яңы дауалау ысулы һауығыуға өмөт бирә. Хирург Павел Балахнин әйтеүенсә, "үлтерелгән" рак күҙәнәктәренең аҡһымы организмды яман шешкә ҡаршы уҙаллы көрәшергә өйрәтә, йәғни улар вакцина һымаҡ эшләй башлай.

Дауалауҙың был алымы Башҡорт дәүләт медицина университеты клиникаһының яңы онкология операция бүлексәһе эшмәкәрлеге арҡаһында барлыҡҡа килде. Уның үҙәгендә роботлаштырылған ангиография ҡорамалы урынлашҡан. Бындай заманса ҡорамал әлегә Рәсәйҙә өсәү генә. Технология бөтә шештәрҙе тиерлек дауаларға булышлыҡ итә. Криоабляция бөгөн иң уңышлы, ә иң мөһиме, ракты дауалауҙа хәүефһеҙ алым иҫәпләнә.

**Дарья СУББОТИНА.**

12+

БАШ ҠАЛАМ

# ЙӘШЕЛ ҠАЛА ИСЕМЕН РАҪЛАП...

**(Башы 1-се биттә).**

Ысынлап та, Өфөгә килеүселәрҙең һәр ҡайһыһы уның йәшеллеккә төрөнгән булыуына таң ҡала. Ошо үҙенсәлекте һаҡлап ҡалыу өсөн урбанист-архитекторҙар "Парк эсендәге ҡала" программаһын уйлап таба һәм был идея ул ваҡыттағы ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың да күңеленә хуш килә. 2014 йылда беренсе тапҡыр Urban-Байрам форумында тәҡдим ителгән концепцияға ярашлы, ҡала тау башында ултырғанлыҡтан, уның битләүҙәре берҙәм паркка әүерелергә, ә һәр өфөлөнөң 2 километр радиуста иң ҙур паркка барып эләгеү мөмкинлеге булырға тейеш, тип ҡарала. Шулай уҡ концепция баш ҡалалағы һыу объекттарын үҫтереүҙе лә, парктарҙы һәм скверҙарҙы бергә бәйләр өсөн уларҙың береһенән икенсеһенә йәшел һуҡмаҡтар эшләүҙе лә күҙ уңында тота.

Ошонан алып был идея ҡаланың айырым парктарын һәм скверҙарын төҙөкләндереү, яңыларын булдырыу аша тормошҡа ашырыла бара. Мәҫәлән, 2011-2018 йылдарҙа 28 ял зонаһы төҙөкләндерелә һәм 19 яңы зона булдырыла. Изге башланғыс уңышлы дауам ителеп, һуңғы йылдарҙа Черниковка, Затон, Нижегородкаға ла етди иғтибар бүленә.

Ошо көндәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Һупайлы бисҭәһендә Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим шиғыры хөрмәтенә "...Ҡоштар осорам" тип аталған скверҙы төҙөкләндереү барышы менән танышты. Бындай үҙенсәлекле "әҙәби" проект идеяһы 2019 йылда тыуа һәм йәмәғәтселек тарафынан хуплана, сөнки сквер эргәһендә генә 130-сы мәктәп, балалар баҡсалары, музыка мәктәбе һәм "Созвездие" балалар ижады үҙәге урынлашҡан. Әммә эштәр былтыр июндә генә башлана һәм бөгөн скверҙың барлыҡ элементтары ла берҙәм концепцияға буйһона: тротуарҙар һары, көрән, ҡара һәм һоро, йәғни ҡош ҡанаты төҫтәренән тора. Территорияла йүгереү юлдары һәм тротуарҙар, махсус велотрасса - памп-трек бар. Шунда уҡ хоккей ҡумтаһы, футбол ҡыры, теннис һәм баскетбол майҙансыҡтары, күнекмәләр урыны эшләнгән. Скверға видеокүҙәтеү, яҡтылыҡ сығанаҡтары ҡуйылған, ағастар һәм ҡыуаҡтар ултыртылған, бәләкәй архитектура формалары урынлаштырылған. Радий Хәбиров белдереүенсә, сиратта Нефтехимиктар паркы, Дим районындағы Үҙәк парк, Йылы күл, Дан бульвары һәм башҡа территориялар тора.

Әйткәндәй, баш ҡалала йылға яры буйлап һәм урмандар аша үткән "ҡырағай" маршруттар бик күп. Әлеге ваҡытта улар бер-береһе менән тоташмаған. Баш ҡала әүҙемселәре уларҙың барыһын бергә тоташтырып, оҙонлоғо 70 километр булған "Өфө мунсағы" маршрутын тормошҡа ашырырға ниәтләй һәм был йүнәлештә эш бара ла инде. Әлеге ваҡытта нисек итеп Дим районын ошо маршрутҡа тоташтырыу мәсьәләһе уйланыла.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# ҠУШЫУ ҒӘМӘЛЕ НИ КҮРҺӘТЕР?

**Ҡушыу ғәмәленең аксиомаһы беҙгә бала саҡтан таныш: дәүмәлдәрҙең урынын алыштырыуҙан һөҙөмтә (сумма) үҙгәрмәй. Тормош арифметика түгел-түгелен, тик шулай ҙа йыш ҡына бында ла хас әлегесә килеп сыҡҡылай, айырыуса аҡсаға бәйле ғәмәлдәрҙә: алалар, ҡушалар, ҡабатлайҙар, бүләләр...**



Нисәмә йылдар инде хәҙер пенсия мәсьәләһе дәүләт сәйәсәтенең иң ауыр, ҡатмарлы бер өлкәһе - күҙгә сүп булып ҡала килә. Реформа артынан реформалар үткәрелеп тороу ҙа ярҙам итә алмай. 2019-2021 йылдарҙа Рәсәйҙә пенсионерҙар һанының 1 млн 300 кешегә кәмеүе лә дәүләт елкәһенә еңеллек килтергәне һиҙелмәй... Был, әлбиттә, теүәл бер йыл элекке мәғлүмәт. Үҙен социаль мәсьәләләрҙе сәйәсәткә бәйләмәй генә яҡтыртыусы һәм фәҡәт тикшерелгән мәғлүмәттәр биреүсе тип күрһәтеүсе GOGOY.ru сайты, мәҫәлән, әлеге өс йылда граждан пенсионерҙар һанының 1 млн 800 кешегә кәмеүе хаҡында яҙып сыҡты. Быға ышанғы ла килмәй хатта. Ә унан һуңғы ваҡыт эсендә тағы күпме пенсионерҙың йөрәге тибеүҙән туҡтағандыр - әйтеүе ҡыйын, сөнки был хаҡта аныҡ ҡына рәсми статистика юҡ.

Һәр хәлдә, һуңғы йылдарҙа пенсионерҙар һанының рекорд күләмдә кәмеүгә йөҙ тотоуы былай ҙа билдәле: хәйерсе пенсия арҡаһында фәҡирлектә көнкүреш - тейешенсә туҡлана алмау, пандемия, дарыуҙарға хаҡтар артыуы ҡарттарҙың күпләп ҡырылыуына килтерә. Пенсияға, әйтәйек, 100 тәңкә өҫтәлһә, хаҡтар 5-6 тапҡырға ҡыя һикерә. Шул уҡ ваҡытта Пенсия фондының ябай ғына хеҙмәткәре лә ( ә уларҙың һаны 100 меңдән күпкә ашыу, тиҙәр) 46 - 50 меңдән дә кәм эш хаҡы алмай. Ә тотош Пенсия фондын "аҫрау" Рәсәй һалым түләүселәренә уғата ҡиммәткә төшә, сөнки ул күркәләй ҡабарған персоналдар штаты буйынса донъяла беренсе урында тора. Уларға эш хаҡы түләү, ултырған биналарын тотоу, ремонтлау, техник саралар һатып алыу һәм

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

*Рәсәй Президенты ике фондты ҡушып, илдә Пенсия һәм социаль страховкалау фондын булдырыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Ул 2023 йылдың 1 ғинуарынан эшләй башлай. Граждандарға бөтә тәғәйен түләүҙәр ваҡытында түләнәсәк, ә борсоған һорауҙар менән шул уҡ адрестар буйынса, әммә берҙәм клиент хеҙмәттәренә мөрәжәғәт итергә буласаҡ. 2023 йылда пенсия, социаль һәм медицина мотлаҡ страховкалауҙың страховка түләүҙәре берҙәм тарифҡа күсереләсәк. Был әсәлеккә бәйле һәм ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ осрағында страховка аҡсаһының максималь күләмен күтәрергә булышлыҡ итәсәк. Ул 2025 йылға 1,5 тапҡыр артасаҡ. Оптималләштергәндән һуң артҡан аҡса пенсияларҙы күтәреүгә йүнәлтеләсәк.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

## *Үҙ баҡсаһында картуф-йәшелсә үҫтереп һатыусы ауыл халҡына, ҡала баҡсасыларына киләһе йылдан дәүләт ярҙамы программаһы - субсидия түләү ҡарала. Ошо хаҡта фекерегеҙ ниндәй?*

***Юлай ВАФИН, Күгәрсен районы "Япар" крәҫтиән хужалығы етәксеһе:*** Халыҡты баҡсасылыҡ шөғөлөнә киңерәк йәлеп итеү маҡсатында картуф һәм йәшелсәне үҙҙәре өсөн генә түгел, ә уңышын һатып, килем алыуға ҡыҙыҡһындырыу дөрөҫ, әлбиттә. Юғиһә, һуңғы йылдарҙа ҡайһы берәүҙәр картуф үҫтерергә лә онотоп бара. Бер яҡтан, үҫтереүгә ҡарағанда, һатып алыу хәйерлерәк, тип фекер йөрөтөүселәр ҙә бар. Эшемәшәҡәте лә күп: ҡыйын утайһың, күмәһең, ул арала ҡуңыҙы баҫып алып бара. Өҫтәүенә, йыл ҡоро килеп, уңышың ырамаһа... Ә инде тәрбиәләп, мул уңыш алһаң, уны ҡайҙа итергә, нисек һатырға белмәйһең. Икенсе яҡтан, "Барҙың тарлығы юҡ", "Барҙың ҡәҙере юҡта беленә", тип тә әйтә халыҡ. Юғиһә бит, ҡоролоҡ йәки, киреһенсә, ямғырлы йылдарҙа, шулай уҡ башҡа төр тәбиғәт стихиялары арҡаһында картуф уңышы һәләк булған ҡытлыҡ йылдарҙы ла онотторға ярамаҫ ине. Үҙең үҫтергәнгә етәме һуң инде! Айырыуса ҙур ғаиләле кешеләргә картуф сәсмәй йәшәү бер ҙә төҫ түгел. Берҙән, балалар ҙа хеҙмәт тәмен белеп үҫәсәк; икенсенән, ғаилә башлыҡтары әлегесә субсидия алып, картуф үҫтереп һатып, өҫтәмә килем эшләй аласаҡ. Балалы ғаиләнән аҡса артамы инде? Бары тик һатып алыусыһы ғына булһын. Ә инде дәүләт тарафынан был тәңгәлдә ярҙам вәғәҙә ителә икән, буш һүҙ булып ҡалмаҫ, тип, был программаның киләсәгенә бик тә ышанғы килә

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандың РФ Президенты ҡарамағындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиллегендә республиканың беренсе Тулы хоҡуҡлы вәкиле, был вазифаны 1991-1995 йылдарҙа биләгән Абрар Ярлыҡаповты 80 йәшлек юбилейы айҡанлы тәбрикләнеләр. Уға күп йыллыҡ фиҙаҡәр хеҙмәте, һөҙөмтәле дәүләт һәм фәнни эшмәкәрлеге өсөн Салауат Юлаев ордены тапшырылды. "Беҙҙең кесе Ватаныбыҙҙа тыуған һәм уның мәнфәғәтенә хеҙмәт иткән һәр кеше иңенә Салауат Юлаев ордены оло яуаплылыҡ һала", - тине Абрар Бәҙретдин улы һәм Башҡортостан Башлығына рәхмәтен белдерҙе.

✓Абхазия президенты Аслан Бжания Өфөләге эшлекле сәфәре барышында Башҡортостанға диңгеҙ ярында балалар һауыҡтырыу лагерын төҙөргә тәҡдим итте. Быны республика етәксеһе Радий Хәбиров ыңғай баһаланы һәм, БР Төҙөлөш, Мәғариф министрлыҡтары Абхазия вәкилдәре тәҡдимен ҡарар, тине. Быға тиклем Башҡортостан балаларының йәйге ялын Ҡырым Республикаһы менән берлектә ойоштороу тәжрибәһе барлығын да телгә алды.

✓Башҡортостан Хөкүмәте быйыл тұҡыу һәм тегеү сәнәғәтендә, күн һәм күндән әйберҙәр эшләгән ойошмаларға еңел сәнәғәт өлкәһендә килем килтергән проекттарҙы тормошҡа ашырыуға тотонолған аҡсаның бер өлөшөнә республика бюджетынан субсидия бүлеү тәртибен раҫланы. "Субсидия күләме бер кешегә 5 млн һумдан артмаҫҡа тейеш, әммә килемле проектҡа сарыф ителгән аҡсаның 90 процентынан да күп түгел", - тиелгән ҡарарҙа.

✓Рәсәйҙә балалы ғаиләләргә ипотеканы Әсәлек капиталы ярҙамында ҡаплауҙы еңелләштереү тураһында ҡарарға Михаил Мишустин ҡул ҡуйҙы. Үҙгәрештәр Пенсия фондына тапшырылырға тейешле документтар исемлегенә инделде: унан рефинанслаусы банктан аҡсалар түүге кредитты ҡаплауға йүнәлтелеүе тураһындағы белешмә алып ташланды. Хәҙер башлап ипотека бүлгән банктан документ тапшырыу ҙа етә.

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров Урман хужалығы министрлығына бөтә профиль дәүләт хеҙмәттәрен цифрлаштырыуҙы 2022 йыл аҙағынаса тамамларға ҡушты. Бөгөн министрлыҡтың 16 дәүләт хеҙмәтенең унауһы менән онлайн-порталдар аша ҡулланырға була. Электрон рәүештә бирелгән күсермәләр буйынса Рәсәй төбәктәре араһында Башҡортостан икенсе урында килә.

***✓ Ике фондты ҡушыуҙан күпме аҡса экономияланыр һәм ысынлап та нимәлер экономияланырмы - был беҙгә ҡараңғы. Әллә ике фондты берләштереү фонында пенсионерҙар аҡсаһы социаль тишектәрҙе ямауға китеп торормо?***



башҡа сығымдар өсөн Фондҡа йылына йөҙәр млрд һум аҡса бүленә. Былтыр, мәҫәлән, был сумма 124,3 млрд тәшкил иткән.

Шуға күрә лә ошо юҫыҡта Пенсия фонды аппаратын "аҫрау"ҙың һалым түләүселәр елкәһенә тос ҡына йөк булып ятыуы хаҡында электән дә һүҙ сыҡҡылап ала ине. Бынан бер нисә йыл элек РФ Иҫәп палатаһы Пенсия фонды эшендә пенсия аҡсаларының түләп еткерелмәүе, бер кеше исеменә ике йә унан күберәк иҫәп асылыуы, бер кешегә бер нисә СНИЛС бирелеү һәм кешеләргә стаж яҙып еткерелмәү кеүек факттарҙы, етди хаталар ебәрелеүен, өҫтәүенә, мәрхүмдәр исеменән кемдәрҙеңдер аҡса алып ятыуын асыҡлағандан һуң, Пенсия фонды адресына дәғүәләр ишетелә, Фондтың кәрәкмәгән аралашсы ролен генә үтәүсе булыуына ишаралар һәм ризаһыҙлыҡ белдерелә башланы. Ә быуына Дәүләт Думаһы депутаты, "Ғәҙел Рәсәй - Хәҡиҡәт хаҡына" партияһы етәксеһе Сергей Миронов Пенсия фондын, ғөмүмән, бөтөрөргә һәм пенсияны бюджеттан түләй башларға саҡырҙы. "Пенсия реформаһы үҙен аҡламаны, хатта пенсия йәшен 5 йылға оҙайтыу ҙа хәлде ҡотҡара алманы, - тине ул. - Ил буйынса уртаса страховкалы пенсия йәшәү минимумынан саҡ ҡына артыҡ - был аҡсаға йәшәү мөмкин түгел... Илдә "кеше ашаусы" пенсия страховкалау системаһы булдырылды - ул күпселек рәсәйҙәр килеменең 22 процентын һурып тора (шул уҡ ваҡытта байҙар өсөн - ни бары 10 процент), ләкин был да лайыҡлы пенсия менән тәьмин итә алмай".

Ошондай бәхәстәрҙән һуң ... Пенсия фонды эшмәкәрлеге тағы ла киңәйтелә төштө. Дәрәҫәргә, һүҙ башында телгә алыныусы баяғы "ҡушыу ғәмәле акси-омаһы" буйынса ике фондты (Пенсия фонды менән Социаль страховкалау) бергә ҡушыу тураһында указ һәм закон ҡабул ителде. Хәҙер был яңы ойошма Рәсәй Социаль фонды (СФР) тип йөрөтөләсәк.

Был пенсионерҙарға ни бирәсәк һуң? 2025 йылдан социаль түләүҙәр артасаҡ, ти РФ Хеҙмәт министрлығы. Йәғни, бала ҡараған өсөн айлыҡ пособиеның максималь күләме 57 меңгә тиклем; йөклөлөк һәм бала табыу буйынса 140 көн өсөн максималь пособие 660 меңгә; хеҙмәткә ваҡытлыса яраҡһыҙлыҡ - больничныйға түләүҙәрҙең дә артасағы аныҡ һандар менән раҫлана Хеҙмәт министрлығы вәғәҙәһендә. Пенсионерҙарҙы, үкенескә, аныҡ һандар менән ҡыуандырыусы юҡ. Ике фондты ҡушыуҙан күпме аҡса экономияланыр һәм ысынлап та нимәлер экономияланырмы - был беҙгә ҡараңғы. Әллә ике фондты берләштереү фонында пенсионерҙар аҡсаһы социаль тишектәрҙе ямауға китеп торормо? Берләштерелгән фонд дәүләттән айырылған коммерция структураһына әүерелмәҫтер бит, юғиһә һәр төрлө коррупция хәүефенә юл асылыуы ихтимал, тип тә борсола "Ғәҙел Рәсәй" лидеры.

Нисек кенә булмаһын, Конституция тарафынан дәүләткә граждандарының лайыҡлы ҡартлығын тәьмин итеү бурысы йөкмәтелгән икән, тимәк, яңы Фонд ана шул дәүләттең бер өлөшөн тәшкил итергә тейештер инде ул...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ФАТИРЫҢДЫ ЙӘШЕЛЛӘНДЕР



**Аҡсаһыҙ булмаҫ өсөн кешене ҡыҙыҡһындырған һәм ҙур һорау менән ҡулланылған әйбер, хеҙмәт тәҡдим итергә кәрәк. Шул саҡта ғына эшмәкәрлек алға барасаҡ, аҡса ла буласаҡ. Мин, мәҫәлән, рәссам һәм ландшафт дизайнеры һөнәрҙәренә эйәмен. Ҡулымда ике диплом булһа ла, Мәскәү кеүек ҙур ҡалала ла был өлкәлә етерлек аҡса килтергән даими эш урыны табыу ауыр булды. Шуға күрә бөтә фантазиямды һәм белемемде эшкә егеп, миңә рухи һәм матди ҡәнәғәтләнеү килтергән шөғөл таптым. Баш ҡалала өс йыл ошо эш менән шөғөлләнгәндән һуң, Өфөгә ҡайттым. Бөгөнгө һүҙем - фатир-йорттарҙы, офис һәм тотош ойошмаларҙы үҫемлектәр менән биҙәү алымы - вертикаль йәшелләндереү тураһында.**

Өйҙә йәки эш урынында гөл үҫтерергә яратыусылар күп. Был, беҙҙән, матур, икенсенән, һауаны таҙартыу өсөн дә яҡшы сара. Ләкин айырым һауыттарҙа күпләп гөлдәр ултыртыу фатирҙа йәки офиста урынды күп ала, шуға күрә вертикаль йәшелләндереү уртаҡ килешеү табырға ярҙам итә. Бындай йәшелләндереүҙең ыңғай яҡтары күп. Мәҫәлән, ул бүлмәләге микроклиматты яҡшырта, шулай уҡ артыҡ тауышты ла баҫырға ярҙам итә. Вертикаль йәшелләндереү бүлмә майҙанын һаҡлай, дөрөҫ һайланған үҫемлектәр эҫе көндә бүлмәгә һалҡынлыҡ бирә һәм, иң мөһиме, матурлыҡ өҫтәй.

Ләкин кире яҡтарын да әйтеп үтергә кәрәк: вертикаль йәшелләндереү артыҡ дымлылыҡҡа сәбәпсе булыуы мөмкин, шулай уҡ ҡайһы бер үрмә гөлдәр диуарға уҡ йәбешеп үҫеүсән һәм уларҙы тәрбиәләү ҙә еңел түгел. Шулай ҙа бөтә был кире яҡтарҙың барыһын да "еңеп", матурлыҡ булдырырға мөмкин.

Ғәҙәттә, вертикаль йәшелләндереү өсөн фитомодуль, фитопанно һәм балаҫ һымаҡ йәшелләндереү ысулдары ҡулланыла. Шулай уҡ йәшеллекте ҡулланып, диуарҙа хатта картиналар эшләргә мөмкин. Фитомодуль үҙе ике төргә - күсереп йөрөтөлә торған конструкцияға һәм диуарға эшләнгән кеҫәле панелгә - бүленә. Хәҙер күп фатирҙарҙа тҡланыу һәм ҡунаҡ бүлмәләре бергә эшләнә, уларҙы зоналарға бүлеү өсөн күсереп йөрөтмәле фитомодуль киң ҡулланылыш ала башланы, сөнки ул матур, еңел һәм үҙенсәлекле. Ә диван һәм карауат өҫтөнә кеҫәле панель фитомодуле ҡуйыу уңайлы. Фитопанноны иһә тупраҡһыҙ ҙа эшләргә була, шуға күрә ул бысраҡ булмауы менән уңайлы. Ә балаҫ һымаҡ вертикаль йәшелләндереүҙе эшләүе лә ҡатмарлы, тәрбиәләүе лә еңелдән түгел, ләкин ул бик матур күренә.

Вертикаль йәшелләндереү менән үҫемлек, сәскәләр яратҡан, ландшафт дизайнер һөнәренә эйә булған, ғөмүмән, теләге бар һәр кем шөғөлләнә ала. Эштең бөтә нескәлектәрен интернет селтәрендә ҡарап белергә мөмкин. Хаҡын ҡуйыу ҙа һәр кемдең үҙ мәйелендә. Мин шәхсән вертикаль йәшелләндереү өсөн ҡулланылған үҫентеләрҙе интернет аша алдырам һәм, тәбиғи, хаҡын эшемдең суммаһына ҡушам. Әгәр ҙә балаҫ һымаҡ йәшелләндереү эшләнһә, хаҡ квадрат метрҙар менән иҫәпләнә.

Был килемле эш менән төп хеҙмәт урынынан буш ваҡыттарҙа ла шөғөлләнергә, шулай уҡ уны төп аҡса сығанағы итергә лә була. Кеше хәҙер үҙенең һаулығын нығ ҡайғырта, йортон йәки офис бүлмәләрен дә үҙенсәлекле итеп биҙәү юлдарын эҙләй, шуға күрә клиенттар етерлек.

**Аделина ЙӘРМУЛЛИНА.**
**Өфө ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ?

***Үҙ баҡсаһында картуф-йәшелсә үҫтереп һатыусы ауыл халҡына, ҡала баҡсасыларына киләһе йылдан дәүләт ярҙамы программаһы - субсидия түләү ҡарала. Ошо хаҡта фекерегеҙ нимдәй?***

***Айгөл БАЙРАМҒОЛОВА, Баймаҡ районы Темәс ауыл хакимиәте башлығы:*** Эйе, бик матур, кәрәкле программа булмаҡсы был. Һәр хәлдә, халыҡтың үҙ мәнфәғәте өсөн эшләйәсәк бит ул, юғиһә, йылдар буйына ишетелә килде: картуф емерелеп уңды, ә уны ҡайҙа итергә белеп булмай, тигән урынлы зарланыуҙарҙы. Уйлап ҡараһаң, шул ит мәсьәләһе менән бәрәбәр ине бит был да: кеше үҙ ихтыяжынан артып ҡалғанды һата алмай йонсоно. Мал көсө менән йәшәүселәр, шунлыҡтан, һуңғы йылдарҙа ит һатыу проблемаһынан ҡасып, малдарын кәметкеләй башланы. Улар өсөн дә шулай ит етештереп һатыу мәсьәләһен еңеләйтеүҙең берәй юлы табылыр әле, бәлки.

Ә картуф-йәшелсәне беҙҙә йылдың-йылы сәсәләр, буш ятҡан ерҙәр юҡ тиерлек. Халыҡ күпләп ер ала башланы, уны кәртәләп алалар һәм сабынлыҡ итеп файҙаланалар, башҡа төр мал аҙығы культуралары, картуф сәсәләр. Әйткәндәй, быйыл бер егетебеҙ уңышын үҫтереп һатыу маҡсатында райондан ссуда алып, күп итеп картуф сәсте. Шөкөр, йыл һәйбәт килде, картуфы уңып, ниәттәре бойомға ашыр, тип теләйек. Тәүге тәжрибә киләһе йыл күптәргә өлгө булһын ине. Ауылда тыуып-үҫеп, нимдәйен ундырышлы ерҙәребеҙҙе файҙаланмай, ҡәҙерен белмәй йәшәү еңәйәт менән бәрәбәр булыр. Эшләйем, тигән кешегә, иң мөһиме, ер бар - йыбанмай ана шул еребеҙгә эйәлергә генә кәрәк, әйтеүҙәренсә, аҡса - аяҡ аҫтында: сәс, үҫтер, һат - бер кем дә тыймай, киреһенсә, хәҙер дәүләт бындай унған хеҙмәт эйәләренә аҡсалата ярҙам да тәҡдим итә ана. Теләгән кеше эшҡыуар, фермер, үҙмәшғүл булып та теркәлә ала.

Һаҡмарҙағы бер унғанлыбыҙ шулай байтактан йәшелсәселек менән шөғөлләнә, уңышын Баймаҡ магазиндарына алып барып һата. Быйыл ул ҡыяр үҫтерә. Темәстәр был йәһәттән, ғөмүмән, унған халыҡ, элек-электән шәхси хужалыҡында картуф ҡына түгел, башҡа төр йәшелсәләр ҙә үҫтерә. Былтыр, үҙегеҙгә мәғлүм, ҡолорҡ арҡаһында картуф уңманы, кеше ҡыш буйына һатып алып ашаны. Шуға ла, күрәһең, кафтуф ҡәҙерен белде, аңланы һәр кем: быйыл уңыштары шәп булмаҡсы, бирһен Хоҙай. Һатмаған сүрәттә лә, үҙ ғаиләңде тәьмин итеп тороу ҙа ҙур эш бит! Мал-тыуарына ла өҫтәмә ем, бер тигәс тә. Киләһе уңышҡа орлоҡ хәстәрләү ҙә кәрәк. Шуға күрә лә ярҙамсы хужалығында картуф-йәшелсә үҫтереү шөғөлөн аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге йәһәтенән дә бик мөһим дәүләт кимәлендәге бурыс тип аңларға кәрәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республиканың транспорт һәм юл хужалығы министры Александр Булушев Өфө - Бөрө - Яңауыл трассаһында юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген арттырыу саралары тураһында һөйләне. Юл-транспорт ваҡиғаларының күбеһенең төп сәбәбе - водителдәрҙең билдәләнгән тиҙлек режимын боҙоуы. 2022 йылдың 15 августына тиклем трассала яңы юл билдәләрен, шулай уҡ юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы автоматик теркәү, шул иҫәптән "Уҙыу тыйыла" тигән билдәләр ғәмәлдәге зонала ҡаршы һыҙатка сығыу комплекстарын ҡуйыу күҙаллана.

✓Үлән баҫҡан урындарға халыҡ йыш зарлана, үткән аҙнала ғына "Инцидент менеджмент"ҡа теҙәкләндереүгә ҡағылышлы 677 ялыу килгән, тип хәбәр итте БР Башлығының социаль коммуникациялар буйынса идаралығы етәксеһе Елена Прочаковская. Быға бәйле Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Алан Марзаевҡа республика буйынса газондар торошон ҡаты контролгә алырға ҡушты.

✓"Алға" берҙәм транспорт картаһы проектын үҫтереү тураһында Башҡортостан дәүләт идаралығын һанлы үҫтереү министры Геннадий Разумикин хәбәр итте. Республикала бөтәһе 670 мең транспорт картаһы сығарылған. "Уҡыусы картаһы"н һәм "Социаль транспорт картаһы"н иҫәпкә алып, төбәктә проектта ҡатнашыусылар һаны 1,48 миллион кешегә еткән. Бынан тыш, министрлыҡ төбәктең Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы менән берлектә Башҡортостанда йәшәүселәрҙең социаль яҡтан яҡланмаған категориялары өсөн бушлай тауарҙар һәм хеҙмәттәр алыуға электрон сертификаттар индерергә ниәтләй.

✓Быйыл Башҡортостанда 6 меңгә яҡын кеше яңынан укып сыға ала, "Демография" милли проектының "Мәшғүллеккә булышлыҡ итеү" проектына маҡсатлы юллама ике тапҡырға тиклем тиерлек арттырылған, тип хәбәр иттеләр республика Хеҙмәт министрлығынан. Башҡортостан халҡына бөтәһе 1500 белем биреү программаһы булдырылған. Унда 50 йәштән өлкәндәр, декрет ялындағылар, эшһеҙҙәр, мәктәп йәшенә тиклемге балаһы булған эшһеҙ ҡатындар, эштән бушатылыу янаған һәм 35 йәшкә тиклемгеләр ҡатнаша ала. Бының өсөн "Работа в России" порталында теркәлеп, теләгән йүнәлешкә ғариза бирергә, йәки республиканың халыҡ мәшғүллеге үҙәктәренә мөрәжәғәт итергә була.

✓ *Өфөнән иң күп рейстар - Мәскәүгә һәм Санкт-Петербургка. Бынан тыш, тура осоштар географияһы Екатеринбургты, Татарстанды, Түбәнге Новгородты, Һамарҙы, Красноярскиҙы, Новосибирскиҙы, Волгоградты уҙ эсенә ала.*



*ҠЫҪҠАСА*

# МӘКТӘП БУЛАСАҠ!

**Республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров Баймаҡ районының Иҫке Сибай ауылында 375 урынға тәғәйенләнгән дөйөм белем биреү мәктәбен төҙөү барышы менән танышты.** Бинала кирбес һалыу тамамланған тиерлек, икенсе ҡаттың диуарының 85 проценты төҙөлгән, өсөнсө ҡаттың - 20 проценты. Мәктәптең яртыһына тәҙрә ҡуйылған, биҙәү эштәре башланған. "Был объект Урал аръяғы өсөн бик мөһим. Күренеп тора, эш тиҙлеге арткан, графикка үҙгәрештәр индерелгән. Быйылғы яңы уҡыу йылына объектты тапшырыу өсөн тейешле күрһәтмәләр бирелде", - тип билдәләне Андрей Назаров. Шулай уҡ уҡыу учреждениеһы өсөн ҡорамалдарҙың һәм техниканың бер өлөшө һатып алынған. Иҫке Сибайҙағы мәктәп төҙөлөшө - Рәсәй Президенты Владимир Путиндың май указдарына ярашлы ҡабул ителгән "Мәғариф" милли проектын республикала ғәмәлгә ашырыуҙың бер өлөшө.

✓ **Быйыл 1 августа тиклем республика Өфөлә донъя кимәлендәге Евразия ғилми-белем биреү үҙәге кампусын төҙөүгә федераль аҡса алыуға ғариза тапшыра.** Был турала Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә республика Башлығының фән мәсьәләләре буйынса кәңәшсеһе Руслан Ҡаҙыханов һөйләне. Уның әйтеүенсә, Рәсәйҙең Төҙөләш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы ҡарары менән республика өсөн торлаҡтың бер квадрат метрының уртаса хаҡы артты, шуға ярашлы, федераль бюджеттан капиталь грант ҡайтанан иҫәпләнде. Радий Хәбиров ғилми-белем биреү үҙәге аспиранттарының һәм ғалимдарының торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға айырым иғтибар бирергә ҡушты. Ул юғары мәктәп хеҙмәткәрҙәре өсөн мәсьәләне йылдам хәл итеү тәртибе тураһында уйларға ҡушты. Әле Башҡортостанда мәктәпте тамамлаусыларҙы юғары уҡыу йорттарында бюджет урындары менән тәьмин итеү кимәле 87,9 процент тәшкил итә.

✓ **Аҫҡын районы хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, районда Сарыс йылғаһы буйлап ағып төшөүҙәр башланды. Уны урындағы йүнсел Зинфир Тәкиуллин ойоштора.** Быйыл яҙ ул Рәсәй Президенты Владимир Путиндың май указы менән расланған "Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ һәм шәхси эшҡыуарлыҡ башланғысына булышлыҡ итеү" милли проектына ярашлы уҙғарылған "Эшҡыуарлыҡ сәғәте"ндә ҡатнашҡайны. Зинфир Фәрзәт улы катамарандар, туристик кәрәк-яраҡ һатып алған. Тәүге сәйәхәт май айында ойошторолдо. Маршрут Өршәҙе ауылынан Солтанбәккә тиклем дауам итте. Юлдың дөйөм оҙонлоғо 30 километр самаһы. Туктап ял итеү, туҡланыу менән бергә юлға 12 сәғәт самаһы ваҡыт китә. Сәйәхәттә туристар яр буйындағы үҫемлектәр, хайуандар донъяһы менән таныша. Зинфир Тәкиуллин киләсәктә ике көнлөк сәйәхәт ойошторорға ниәтләй. Унда яр буйында төндә ҡуныу өсөн махсус урындар асмаҡсы. Бының өсөн ул ҡуртымға алынған ер биләмәһендә йәйге йорт төҙөргә хыяллана.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ОСОУСЫЛАР АРТА



**18 июлдә Мостай Кәрим исемендәге "Өфө" халыҡ-ара аэропортында пассажирҙар ағымы ике миллион кешегә етте. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә ошо хаҡта белдерҙе.**

"2022 йылдың тәүге ярты йыллығында аэропорт 1,74 миллион кешене хеҙмәтләндергән. Был уҙған йылдың ошо уҡ осорондағы күрһәткестән алты процентҡа күберәк, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Бөгөн беҙ ике миллионынсы пассажирҙы көтәбеҙ. Ә аэропорт коллективы йыл аҙағына тиклем был күрһәткесте 3,7 миллион кешегә еткерергә иҫәп тота".

Билдәләнеүенсә, Өфөнән иң күп рейстар - Мәскәүгә һәм Санкт-Петербургка. Бынан тыш, тура осоштар географияһы Екатеринбургты, Татарстанды, Түбәнге Новгородты, Һамарҙы, Красноярскиҙы, Новосибирскиҙы, Волгоградты уҙ эсенә ала. "Эшлекле һәм туристик сәфәрҙәр дауам итә, халыҡтың әүҙемлеге арта. Эске йүнәлеш бик яҡшы үҫешә - Өфө самолеттары Рәсәйҙең 29 ҡалаһына оса. Шуныһы мөһим: халыҡ-ара рейстар асыла, был минең йөкләмәм. Беҙҙең делегацияларҙың Астанаға һәм Үзбәкстанға сәфәре барышында һөйләшелгәнсә, Нур-Солтанға, Ташкентҡа осоштар асылды. Өфөнән бөтәһе 13 халыҡ-ара йүнәлеш бар. Әле беҙҙең аэропорт Хургадаға, Алматыға рейстар асыу, Төркиәгә, Әрмәнстанға, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренә рейстар һанын арттырыу буйынса эшләй", -тип билдәләне Башҡортостан Башлығы һәм "Өфө" халыҡ-ара аэропорты етәкселегенә һөҙөмтәле эшләгәндәре өсөн рәхмәт әйтте: "Авиация тармағы өсөн ҡатмарлы хәлгә ҡарамаҫтан, беҙҙең аэропортта пассажирҙар ағымы ярайһы уҡ арта. Йүнәлештәр географияһы бик яҡшы үҫешә, - тине Радий Хәбиров. - Коллективтың яңы рейстар асыу буйынса эшләүе мөһим. Беҙ кешеләрҙең сит илгә, шулай уҡ бик күп Рәсәй төбәктәренә сығыу мөмкинлектәрен киңәйтәбеҙ".

# ТРАНСПОРТ ХӘЛЕ...




**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Транспорт сәғәте" форматында тематик кәңәшмә үткәрҙе. Көн тәртибендә - юл хеҙмәттәрен көҙгө-ҡышҡы миҙгелгә әҙерләү, хәрәкәттә ҡатнашыусыларҙың хәүефһеҙлеген арттырыу, шулай уҡ "Алға" берҙәм транспорт картаһы проектын үҫтереү.**

"Башкиравтодор" акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Илдар Юланов ойошма филиалдарының юлдар төҙөү һәм ремонтлау буйынса эше, шулай уҡ техник паркты көҙгө-ҡышҡы осорға әҙерләү тураһында һөйләне. Йәмғиәт ҡарамағына төбәк, муниципаль-ара һәм урындағы әһәмиәттәге 23,8 мең саҡрым юл инә. 2022 йылда улар 35,2 саҡрым туҙған асфальт ҡатламын тергеҙгән, дөйөм оҙонлоғо 82,1 саҡрымлыҡ участкаларҙа ремонт үткәргән, шулай уҡ 92 мең етешһеҙлекте бөтөргән. Ойошма белгестәре боҙлауыҡҡа ҡаршы реагенттар һатып алыуға һәм ҡом базалары әҙерләүгә тотонған. Предприятиеның техник паркы 3,2 мең төрлө махсус машина тәшкил итә, шуларҙың 1,5 меңен ҡыш юлдарҙы тәртиптә тотоуға йәлеп итергә ниәтләйҙәр. Илдар Юланов хәбәр итеүенсә, "Башкиравтодор" эшмәкәрлегенең һөҙөмтәлелеген күтәреү өсөн 12 территориаль идаралыҡҡа 45 юл ремонт-төҙөләш идаралығын берләштереү буйынса юл картаһы әҙерләнгән. Был техниканың тәьмин ителешен арттырырға, төҙөләш материалдарының һәм ҡорамалдарҙың логистикаһын оптималләштерергә мөмкинлек бирәсәк.

Башҡортостан Башлығы предприятие етәкселегенең башланғысын хупланы, был эштең яҡынса һөҙөмтәләре тураһында хәбәр итергә ҡушты. Радий Хәбиров шулай уҡ алдағы "Транспорт сәғәте" ултырыштарының береһендә республика биләмәһендә федераль трассаларҙы тәртиптә тотоу мәсьәләһен ҡарарға ҡушты.

# АҒИҘЕЛ ҺЫУҘАРЫ ТӘРӘН...



**Социаль селтәрҙәрҙә Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров Ағиҙел йылғаһының тәрәнәйтелеүе тураһында хәбәр итә.**

"Беләһегеҙме, бынан алдағы йылдарҙа беҙ төп һыу артерияһының төбөн тәрәнәйтеү буйынса ҙур эш башҡарҙыҡ, ул республикала суднолар йөрөүен тергеҙергә ярҙам итте - тип яҙа Радий Фәрит улы. - Йының өсөн Эске һыу юлдарының Кама бассейны хакимиәтенә рәхмәт. Хәҙер суднолар йөрөү тәрәнлеге 2 метр кимәлендә тотола, был былтырғыға ҡарағанда 10 сантиметрға тәрәнерәк. Шуға грунтты ла 1,5 тапҡырға күберәк сығарырға кәрәк.

Көн һайын махсус теплоходтар суднолар йөрөгән юлдың тәрәнлеген һәм таҙалығын тикшерә, кәрәк урындарҙы тәрәнәйтә. Мәҫәлән, хәҙер Ағиҙел һыу юлы һәм суднолар йөрөүе районының техник флоты Кушнаренко районында һәм Бөрө ҡалаһынан түбәнерәк, Ляпустин шаршыһында эшләй".

Республика Башлығы белдереүенсә, тиҙҙән "Экология" милли проектына ярашлы, Шишмә районында Яңы Михайловканан алып Өфө районында Нижегородкаға тиклемге участкала Дим үҙәне таҙартыла башлаясаҡ. 35 километр ара йығылған, батҡан ағастарҙан, тамырҙарҙан һәм ләмдән таҙартыласаҡ. Был йылға үҙәненең үткәреү һәләтен, уның санитар торошон һәм сифатын яҡшыртасаҡ.

# БАЛЫҠ ТОТОРҒА ЯРАТАҺЫҢМЫ?



**БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай "Башҡортостан Республикаһында балыҡсылыҡ һәм һыу биологик ресурстарын һаҡлау тураһында" БР Законына үҙгәрештәр индереү хаҡында" Закон ҡабул итте. Документ Республика Башлығына ҡултамғаға ебәрелде.**

"Унда балыҡсылыҡ хужалығын һаҡлау зонаһы тигән төшөнсә индерелгән, - ти Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. - Был статус эшмәкәрлектең билдәле төрҙәрен алып барыуға ҡайны бер сикләүҙәрҙе индерә. Закон һыу ресурстарын һаҡлауға, аҡваәҙәниәтте һәм балыҡсылыҡты үҫтереүгә йүнәлтелгән".

Балыҡсылыҡ хужалығын һаҡлау зонаһы тип балыҡсылыҡ хужалығы әһәмиәтендәге йәки һыу ресурсын һаҡлау өсөн мөһим булған уға яҡын биләмә өлөшөндәге һыу объекты иғлан ителә. Унда даими рәүештә йәки ваҡытлыса разведкалау эштәре, файҙалы ҡаҙылма сығарыу, йыйылған һыуҙы түгеү, ағас киҫеү, сәнәғәт объекттары төҙөү, транспорт ҡуйыу һәм уның хәрәкәте сикләнә. Һаҡлау зоналарын ҡуйыу тәртибен Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте билдәләй. Быға тиклем эшләгән хоҡуҡи режим закон менән туҡтатыла.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓2021 йылда сифат өлкәһендә РФ Хөкүмәте премияһына дәғүә итеп, Республика балалар клиник дауаханаһы һәм Республика бала йорто дипломант исеменә (икенсе призлы урын) лайыҡ булды. Конкурста бөтәһе 500-гә яҡын ойошма ғариза ебәргән, финалға шуларҙың 50-һе сыҡҡан.

✓Тиҙҙән Башҡортостанда ике яңы "Ласточка" электр поезы йөрөй башлаясаҡ. Был турала БР транспорт һәм юл хужалығы министры Александр Булушев белдерҙе. Улар көнбайыш маршруттарына сығарыласаҡ. Әлегә "Ласточка" электр поезы "Көнбайыш экспресс" Өфө - Приют маршруты буйынса йөрөй.

✓Өфөлә һәм илдең тағы 14 төбәгенең баш ҡалаһында беренсе тапҡыр 23 июлдә "Бөтә Рәсәй ҡысҡырып уҡыу көнө" акцияһы үткәрелә. Уны "Тере классика" фонды ойоштора, ә республикала уны Ә.-З. Вәлиди исемендәге Милли китапхана уҙғара. Мәғрифәтселек сараһы китап уҡыусылар мөхитен һәм уларҙың иңғай образын тыуҙырыуға йүнәлтелгән.

✓Башҡортостанда Өфө - Аҫҡар пассажир маршрутының эше тергеҙелде, тип хәбәр иттеләр Республикаға идара итеү үҙәгенән. Республиканың баш ҡалаһынан ул дүшәмбе, шаршамбы, йома, шәмбе һәм йәкшәмбе көндәрендә Көньяҡ автовокзалдан - көндөҙгө сәғәт 4 тула 20 минутта, Аҫҡарҙан иртәнге 7-лә ҡуҙғала. "Аҫҡарға барған юлда республиканың иң матур шифаханаларының береһе - "Яктыкүл" урынлашҡан. Ошо уҡ автобус менән унда ла барып етергә мөмкин", - тип белдерҙеләр Республикаға идара итеү үҙәгендә.

✓Өфөнән Шереметьево (Мәскәү) халыҡ-ара аэропортына Smartavia авиакомпанияһының яңы даими рейстары асылды. Рейстар аҙнаһына биш тапҡыр башҡарыла. Өфө аэропортының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, осоштар дүшәмбе, шаршамбы, кесаҙна, йома һәм йәкшәмбе көндәрендә планлаштырыла. Билет хаҡы 2 320 һумдан башлана. Бынан тыш, йәйгеһен Smartavia пассажирҙары "Өфө" аэропортынан Санкт-Петербургка һәм Сочиға осорға мөмкин. Төньяҡ баш ҡалаға осоштар - көн һайын, ә Ҡара диңгеҙ курортына - аҙнаһына ике тапҡыр, һәр шаршамбы һәм йома башҡарыла.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# СТАТИСТИКА МЕНӘН БӘХӘСЛӘШЕП БУЛМАЙ...



**Сираттағы оператив кәңәшмә матур яңылыҡтарҙан башланды: Өфө халҡы миллиондан ашҡан "йәшел" ҡалалар араһында өсөнсө урынды биләй. Был рейтингта Пермь беҙҙән алдараҡ бара. Әйткәндәй, ошо көндәрҙә хакимиәт делегацияһы унда булып, үҙ-ара хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөп ҡайтты. Хакимиәт башлығы урынбаҫары Денис Ғәниев белдереүенсә, беҙгә уларҙан өйрәнәһе мәлдәр ҙә юҡ түгел. Шул уҡ ваҡытта, киләһе йыл Пермь үҙенең 300 йыллығын билдәләргә йыйынһа, Өфө 450 йыллыҡҡа әҙерләнә.**

450 йыллыҡ тигәндән, тап ошо датаға бәйле ремонтланырға тейешле объекттар исемлегенә ингән Пугачев урамында әҙерлек эштәре башланған. Төҙөлөш, юлдарҙы һәм яһалма ҡоролмаларҙы ремонтлау буйынса идаралыҡ начальнигы Константин Паппе белдереүенсә, әлеге ваҡытта ҡоймалар һәм тимер-бетон плиталар алына, подрядсы ҡомташ ташый башлаған. Был этапта юлдар ябылмай. Икенсе этапта иһә транспорт 3,2 километр оҙонлоғондағы урау юлдан йөрөй башлаясаҡ. 23-24 июлдә ул һыналасаҡ, ә дүшәмбенән инде Пугачев урамы Геофизиктар урамынан Бородино урамына тиклем ябыласаҡ. Йәй һуңында Ағиҙел һәм Мәғрифәт урамдарында эштәр тамамланасаҡ, уларҙы ла урау юл сифатында ҡулланырға мөмкин буласаҡ. Өфө ҡалаһы мэры Ратмир Мәүлиев Константин Паппеға һәм Киров районы хакимиәте башлығы Илвир Нурдәүләтовҡа был объектты шәхси контролдәргә ҡушып: "Йә Кузнецов затонына күсенегеҙ, йә унда палатка ҡуйығыҙ", - тип белдерҙе.

Юбилей датаһына ҡарата төҙөкләндерелергә тейешле объекттарҙың тағы береһе - Дан бульвары. Ул шулай уҡ ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевтың тыуыуына 100 йыл тулыуға ла бағышлана, сәнки ошондағы скверҙа уға һәйкәл ҡуйылған. Хакимиәттең архитектура һәм ҡала төҙөлөшө баш идаралығы начальнигы Айнур Фәтҡуллин сығышынан күренеүенсә, яңыртылған бульварҙа йәйәүлеләр майҙаны, тротуарҙар, йәйәүлеләр өсөн киңәйтелгән юлдар, балалар бәүелсәге, спорт зонаһы, стритфуд кибеттәре, ике яҡтан да йорт ихаталарында балалар һәм спорт майҙансыҡтары буласаҡ. 10 йүкә, 2900 ҡыуаҡ ултыртыласаҡ, 4,5 мең квадрат метрҙа газон эшләнәсәк. Дан бульварын төҙөкләндереү менән бер рәттән, тирә-яҡтағы территорияларҙы объекттар ҙа икенсе һулыш ала.

Юбилей объекттарына шулай уҡ ишеү слаломы өсөн ҡоролма комплексын төҙөү ҙә инә. Ул Йылы күлдең көньяғында буласаҡ. Комплексҡа старт, финиш бассейндары, ярыш-күнекмә каналы инә. Шулай уҡ ярҙамсы биналар төҙөү ҙә ҡаралған. Ишеү каналы Йылы күлдә Ҡариҙел йылғаһы менән тоташтырасаҡ һәм ул йыл әйләнәһенә эшләйәсәк. Нисекме? Уныһын ваҡыт еткәс, үҙебеҙ күрербеҙ һәм шаһит булырбыҙ. Әлегә түҙемле генә киләһе йыл һуңын көтәйек - был объекттың тапшырыу ваҡыты тап шулай билдәләнгән.

Ә бына йылдың тәүге кварталы йомғаҡтарын көтөп тораһы түгел: дәүләт статистикаһы бүлеге начальнигы Оксана Даянова кәңәшмәлә Өфө ҡалаһының ошо арауыҡтағы социаль-иҡтисади күрһәткестәрен бәйән итте. Уның билдәләүенсә, Башҡортостандың баш ҡалаһы халҡы миллиондан ашҡан ҡалалар араһында алтынсы урында тора. Ғинуар-мартта Өфө 1558 кешегә артҡан һәм был Новосибирсктан ҡала икенсе күрһәткес. Ыңғай миграция бары тик 5 кенә миллионлы ҡалала күҙәтелгән. Тәбиғи тыуым буйынса икенсе урындабыҙ: тыуым коэффициенты буйынса алтынсы урын биләһәк, үлем коэффициенты буйынса беренсе, йәғни иң түбән күрһәткес Өфөлә. Эш хаҡтарына килгәндә, беренсе кварталда уның уртаса күләме 57836 һум булған.

Статистика ошондай һандар килтерә. Былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда һиҙелерлек үҫеш тә бар һымаҡ, әммә ни өсөндөр яуапһыҙ ҡалған һорауҙар ғына арта бара...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

## УРМАНДАРҒА КЕРҺӘҢ...



**Урмандарҙа янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙған өсөн административ штрафтың минималь күләме 10 тапҡырға - 15 мең һумға тиклем артты. Иң юғары хаҡ - 30 мең һум (РФ Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодекстың 8.32-се статьяһының 1-се өлөшө).**

2022 йылдың 1 майынан Башҡортостан биләмәһендә янғынға ҡаршы махсус режим индерелде - янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙған өсөн штрафтар бик юғары (РФ Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодекстың 8.32-се статьяһының 3-сө өлөшө):

- физик шәхестәр өсөн - 40-50 мең һум;
- вазифалы кешеләр өсөн - 60-90 мең һум;
- юридик берәмектәр өсөн - 600-ҙән 1 миллион һумға тиклем.

Урмандарҙа янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙған өсөн (РФ Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодекстың 8.32-се статьяһының 4-се өлөшө);

- физик шәхестәргә - 50-60 мең һум;
- вазифалы кешеләргә - 100-110 мең һум;
- юридик берәмектәргә 1-2 миллион һум штраф билдәләнә.

Шәхси эшҡыуарҙар, РФ Административ хоҡуҡ боҙоуҙар кодексының 8.32-се статьяһына ярашлы, юридик шәхестәргә тиңләштерелә.

Иҫегеҙҙә тотоғоҙ! Әгәр һеҙ янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙһағыҙ һәм һеҙҙең гәйебегеҙ менән урманда янғын сыҡһа, эшегеҙҙе кешеләрҙең ғүмеренә һәм һаулығына ауыр зыян килтереү, тәбиғи һәм (йәки) техноген характерҙағы ғәҙәттән тыш хәлдәр килеп тыуыу хәүефе тип баһаларға мөмкин.

Әгәр һеҙ урман янғынын йәки уның эргә-тирәһендә янғын сығыуын күрһәгеҙ, Башҡортостан Урман хужалығы министрлығының Төбәк диспетчер хеҙмәтенә: 8 (347) 218-14-14 йәки Урман һағының берҙәм бушлай номерына: 8 (800) 100-94-00 шылтыратығыҙ.

*ҠЫҪҠАСА*

## ХАҠТАР...

**Башҡортостанда күпселек социаль әһәмиәтле аҙыҡ-түлеккә хаҡтар төшкән, тип хәбәр итте республика статистары.** Башстаттың аҙналыҡ күҙәтеүҙәре һөҙөмтәләренә ярашлы, 8 июлгә республикала яңы кәбеҫтәнең хаҡы 14,7 процентҡа төшкән. Уның килограмын хәҙер 28 һумға һатып алырға мөмкин. Картуфтың хаҡы 8,4 процентҡа кәмеп, килограмы 48 һум, ә 7,1 процентҡа осһоҙланған кишерҙең уртаса хаҡы 52 һум тәшкил иткән. Шулай уҡ помидор, алма, һыйыр ите, дөгө, ҡара сәй, икмәк, маргарин, бешкән колбаса, балалар өсөн емеш-еләктән консервалар, сырҙар, аҡ май, йомортҡа, көнбағыш майы, шәкәр, туңдырылған балыҡ, ҡарабойҙай, банан, вермишель, шоколад кәнфит, сөгөлдөр һәм макаронға хаҡтар 0,05-3,4 процентҡа кәмегән. Ә бына сосиски һәм сарделькалар хаҡы 3 процентҡа артып, килограмы 416 һумға тиклем менгән. Ҡыяр 82 һумға, һуған 45 һумға тиклем ҡимммәтләнгән. Шулай уҡ хаҡтары күтәрелгән аҙыҡ-түлек исемлегенә тары ярмаһы, һөт, ярым ыҫланған һәм бешереп ыҫланған колбаса, печенье, балалар өсөн киптерелгән һөт ҡатышмалары, эремсек, он, ҡаймаҡ, балалар өсөн йәшелсә һәм ит консервалары, тоҙ, суска һәм һарыҡ ите ингән. Аҙна эсендә улар 0,1-1,8 процентҡа ҡимммәтләнгән.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары 30 июндәге пленар ултырышта санкциялар шарттарында республикала эшлекле әүҙемлекте дәртләндереүгә йүнәлтелгән көрсөккә ҡаршы закондар пакетын ҡабул итте.** Закон проекттары ҡулланыусылар кооперацияһы системаһына, сауҙа комплексына, IT-компанияларға, йылдам социаль-иҡтисади үҫеш биләмәләренә һәм һалым һалыуҙың патент системаһын ҡулланған эшҡыуарҙарға ҡағыла. Атап әйткәндә, сауҙа комплексына һәм ҡулланыусылар йәмғиәттәренә мөлкәт өсөн һалымды кәметергә тәҡдим ителә. Һалым һалыуҙың ябайлаштырылған системаһын ҡулланған резиденттар өсөн һалым ставкаларын кәметеү йылдам социаль-иҡтисади үҫеш биләмәһен үҫтереүгә булышлыҡ итергә тейеш. Бынан тыш, республиканың урындағы бюджеттарға биргән бюджет кредиттары ваҡытын оҙайтыу өсөн Хөкүмәт бюджет-ара мөнәсәбәттәр тураһындағы ҡануниәткә үҙгәрештәр индерергә тәҡдим итте.

✓ **Суд приставтары отпускыға һәм сит илгә сығыр алдынан бер аҙна алдан бурысың бармы-юҡмылығын асыҡларға һәм түләргә кәңәш итә.** Федераль суд приставтары хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса суд приставы 30 меңдән ашыу бурысы булған граждандарға ҡарата илдән сығыуға хоҡуҡын ваҡытлыса сикләү тураһында ҡарар сығара. Ҡарар алимент, һаулыҡҡа, мөлкәткә һәм әхлаҡи зыян килтергән өсөн 10 меңгә яҡын бурысын ике айҙан ашыу түләмәгән осраҡта ҡабул ителә. Йыл башынан 601 006 ҡарар сығарылды. Был сара ҡулланыла башлағас, граждандар 16 миллион һумлыҡ бурысын түләне. Әлеге ваҡытта сит илгә сығыуҙы сикләгән 308 768 башҡарыу эше иҫәпләнә. Сикләү бурысты тулыһынса түләгән осраҡта ғына алына. Суд приставтары отпускыға һәм сит илгә сығыр алдынан бер аҙна алдан бурысың бармы-юҡмылығын асыҡларға һәм түләргә кәңәш итә.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Радикулит

❖ 8-10 бөртөк ҡомалаҡ сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Һыҙланыу баҫыласаҡ. Ҡомалаҡ менән дауаланғанда ул сағыу йәшел (өлгөрөп етмәгән), йәки һарғайған йә һоро төҫтә булырға тейеш түгел. Шулай уҡ саманы белеп кенә дауаланырға, сөнки ҡомалаҡ ағыулы үҫемлек һәм күп ҡулланғанда тын ҡыҫылыуы, йөрәк ауыртыуы, күңел болғаныуы, баш ауырыуы ихтимал.

### Геморрой

❖ 3 ҡалаҡ ваҡлап киптерелгән меңьяпраҡҡа 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға. Төнәтмәнең ауыҙын ҡапҡас һәм салфетка менән ҡапларға. 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Теләк буйынса төнәтмәгә 2 балғалаҡ шәкәр ҡушырға мөмкин. Өс көн дауамында берәр стакан эсергә - иртәнге аштан бер сәғәт алда һәм йоҡлар алдынан. Кәрәк булғанда, дауаланыуҙы йылына 3-4 тапҡыр ҡабатларға була. Шулай уҡ меңьяпраҡты ит турағыстан үткәреп һутын һығырға һәм шуға 1:1 нисбәтендә бал ҡушып, көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эсергә мөмкин. Был рәүешле 1 ай дауаланырға кәрәк. Был осорҙа тоҙло, әсе һәм әсегән ризыҡтарҙы ашамаҫҡа.

### Аллергия

❖ Ялан туҡранбашынан сәй аллергияны дауалауҙа бик файҙалы. Ул иммунитетты күтәрә, елһенеүҙәрҙе бөтөрә һәм тынысландыра. Ялан туҡранбашының ваҡланған япраҡтарына йәки сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә. Шунан һөҙөргә һәм ашарҙан алда көнөнә 4 тапҡыр балаларға 1-әр ҡалаҡ, өлкәндәргә сирек стакан эсергә. Шулай уҡ үләнде сәйгә, компотҡа, кәһүәгә, хатта йәшелсә аштарына ҡушырға мөмкин.

❖ Халыҡ дауаһында туңдырылған йәшел алмалар ярҙамында аллергияны дауалау осраҡтары билдәле. Нәҡ йәшел алма сортын ғына ҡулланырға кәрәк, бешмәгән емеште түгел. Уларҙы туңдырырға һәм күпме теләйһең, шул тиклем ашарға була. Көнөнә бер туң алма булһа ла ашарға һәм ике аҙнанан ашыу шулай дауаланырға. Тамаҡҡа теймәһен өсөн алманы һыуыҡтыстан алып һыу ҡойолған һауытҡа һалырға һәм ул бүлмә температураһында йылынғас, ашарға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

**✓ Атамаһың бер вариантында башҡорт казактарының Һаҡмар йылғаһы буйлап һаҡ (сик һаҡлау) хеҙмәте үтәгән ваҡытта бер-береһенә "Һаҡ бар!" тип шартлы тауыш биреүенән килеп сыҡҡан тигән фараз бар.**



ЙОЛАҺЫНДАН ЙӨН ТАП!



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Бал тәпәндәре байрамса ҡымыҙ көрәгәләренә ҡарағанда бик семәрләп биҙәлмәгән. Һауыттың өҫкө өлөшөндә ситтән генә биҙәк һыҙаты төшөрөлгән, ә йышыраҡ тик ҡапҡасы ғына һырланған. Был һауыттарҙа ҡояшты йыш ҡына түңәрәк тирәләй "тештәр" рәүешле һынландырғандар. Ҡапҡасының йәки һауыттың ҡырҙарында ике һыҙыҡ араһына эшләнгән контурлы көкерсәктәр традицион өсмөйөш-бетеү теҙмәһе кеүек. Кешеләр күҙаллауынса, бындай биҙәктәр, әйләнәләр үҫҙәре лә, курсалау көсөнә эйә булған һәм солоҡ балын йыйыуға бәйле әйберҙә осраҡлы рәүештә генә һырылмаған: улар солоҡсолоҡта уңыш килтерергә ярҙам иткән.



Бал батманы (күнәк тә тиҙәр). РЭМ фондынан. Рәссамы И.Ф. Кибальник

Батмандарҙа йыш эшләнгән контурлы орнамент осло тура өңгәс ярҙамында эшләнгән. Ҡайһы бер бөрйән тәпәндәрендә соляр биҙәк ҡапҡасҡа ҡабарынҡы итеп һырылған. Бынан айырмалы рәүештә, Ейәнсура районында бал тәпәндәре ҡымыҙ көрәгәләре кеүек үк, өс ҡырлы-уйымлы һырлау менән биҙәлгән. Ике-өс рәт бәләкәй өсмөйөш уйымдар шахмат тәртибендә үрҙәре эскә ҡарай урынлашҡан.

Өңөп эшләнгән башҡа төр һауыттар һирәк семәрләнгән. Ғәҙәттә, уларҙың үҙенсәлекле тотҡаһы биҙәк сифатында килгән. Үҙ ғаиләһе ҡулланыуға тейешле һауытты балта оҫталары үҙенсәлекле орнаменталь билдә - ғаилә-ырыу тамғаһы менән биҙәгән. Бейә һауғыс һәм башҡа һауыттарҙа ҡайһы саҡта өсмөйөш бетеүҙәр теҙмәһе һырланған. Һырлы бейә һауғыстары тураһында Һаҡмар йылғаһы буйында йәшәгән оло кешеләр хәтерләп һөйләгән. Археология һәм этнология музейында XIX быуатта Ейәнсура районында эшләнгән ҡымыҙ бешкес көбө һаҡлана. Уның өҫкө ситенән 2,5 сантиметр ара ҡалдырып, батырып мөйөштәр һыҙаты эшләнгән.



Көбөләге һырлы биҙәк. МАЭ фондынан (Өфө ҡалаһы). Т.К. Сурина фотоһы

XX быуат башында шулай уҡ киң ҡатлам кешеләре өсөн тәғәйенләнгән традицияларға бәйле булмаған һауыт-һаба ла эшләп һатҡандар: мискәгә оҡшаш формалағы май, бал, тоҙ һауыттарының өҫкө һәм аҫҡы яҡтарын орнамент һыҙаты менән биҙәгәндәр. Уларҙы башҡорттар ғына түгел, татарҙар, урыҫтар һәм башҡа милләт вәкилдәре лә һатып алған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ

**Кешелек тарихында тәүге дәүләттәр, ҡала, ауыл ҡайҙа ғына барлыҡҡа килмәһен, улар һыу (йылға-күл) янында урынлашып булған. Нил, Тигр һәм Евфрат буйҙарында - Мысыр дәүләтенең, Һинд һәм Ганг буйҙарында шулай уҡ боронғо дәүләттәрҙең, йә булмаһа, Ҡама йылғаһы буйында Бөйөк Болғар иленең барлыҡҡа килеүе ошо тарихи фаразға асыҡ миҫал.**

# ҺАҠМАР ҺЫУЫ АҒА ҠИБЛА ТАБАН...



Башҡорт иленең дә барлыҡҡа килеүе һәм төрлө ырыуҙарҙың берҙәм халыҡ булып ойошоуы ла йылға-күлдәргә бәйле. Һүҙемде Көньяҡ Урал төбәгенең йөҙөк ҡашы булған Һаҡмар йылғаһынан башлағым килә. Ысынлап та, йырҙарҙа данланған гүзәл Һаҡмар йылғаһын республикабыҙҙа белмәгән кеше юҡтыр. Шулай ҙа йылғаның атамаһы тураһында тәғәйен генә аңлатма юҡ. Атаманың бер вариантында башҡорт казактарының Һаҡмар йылғаһы буйлап һаҡ (сик һаҡлау) хеҙмәте үтәгән ваҡытта бер-береһенә "Һаҡ бар!" тип шартлы тауыш биреүенән килеп сыҡҡан тигән фараз бар. Дон казактарының да ошондай мәғәнәләге "Нечай!" тип һөрәнләүҙәренә шаһитмын. Әйткәндәй, беҙҙең төбәктә аҡҡан Сырҙан йылғаһын казак олатайҙар Урта Азия походынан һуң Һырьдарья (Сырдарья) йылғаһы хөрмәтенә ҡушыуҙарын атап үткем килә.

Ошоларҙан сығып, Һаҡмар атамаһын өлөштәргә бүлеп тикшерһәк, һаҡ (һаҡсы), ар (ир) аңлатмаһы килеп сыға. Мәҡәләмдең төп мәғәнәһенән ситкә китеп, башҡорттарҙың ут күршеләре булған болғар халҡын миҫалға килтерәм. Татарстандың Нурлат ҡалаһында йәшәгән Яҡуп бажам үҙен һәр ваҡыт татар тип түгел, ә болғар тип таныта. IX-XIII быуаттарҙа Ҡаманың Волгаға ҡушылған урынында ҡеүәтле Болғар дәүләте булыуын һәр кем беләләр. Монгол яуына тиклем Болғар, Сеүәр, Биләр ҡалаларының таш түшәлгән урамдары, фонтандар бәреп торған майҙандары булыуы илселәрҙе, сауҙагәрҙәрҙе үҙенә йәлеп итеп торған. Урындағы болғар халҡының төп шөғөлө йылға сауҙаһы булған, халыҡтың атамаһы болға (һыу), ар (ир) һыу кешеләре, йәғни һыу буйлап сауҙа итеүсе кеше (сауҙагәр) атамаһын аңлата. Хәҙер ҙә бит болғаҡ, болғансыҡ тип һыуға ҡарата сағыштырыу ҡулланабыҙ. Волга борондан Болға тип аталған. Сауҙагәр - сыуҙа (һыуҙа) һатыу итеүсе ар-ир атамаһын булдырған. Сауҙа итеү өсөн иҫәп-хисап белеме талап ителгән, был йәһәттән болғарҙар мәҙәниәте беренсел урында торған. Бына ни өсөн башҡорт әкиәттәре геройы булып - батырҙар, ә болғар-татар әкиәттәрендә шайтан-шүрәлене лә төп башына ултыртыусы аҙ булыуы сәбәпле, ҡасып ҡаласы ла ғына ҡуймаған, сауҙагәр ҙә акыллы герой (болғар) образдарын күрергә була.

Һаҡмар атамаһының киләһе вариантында, ул йылға ярҙарының үтә лә текә, кисеүҙәре аҙ булыуы сәбәпле, һаҡ атларға, һаҡ барырға кисәтеүҙән килеп сыҡҡан, тигән фараз бар.

Башҡорт ерҙәрендә заводтар төҙөлөп, ҡара төтөн бөркә башлау менән, ҙур йылғалар менән бер рәттән, кесерәк йылғалар ҙа һал ағыҙыу хеҙмәтен үтәгән. Ауыл ҡарттары элегерәк, Өмөтбайҙа йылға ике мәртәбә таша, тәүгеһе - ҡар ирегәс, икенсеһе - Урал һыуы төшкәс, тиерҙәр ине. "Урал һыуы" тип ауылға сиктәш Бөрйән ҡарурмандарының ҡар һыуын күҙ уңында тотҡандарҙыр инде, хәҙер ҙә бит "Урманда ике тапҡыр ямғыр яуа" тигән әйтем бар. Билал ауылынан Мөбәрәк ҡайнымдың йәш сағында һал ағыҙыу эшендә булғандарын һөйләүен ҡыҙыҡһынып тыңлай торғайным: ҡыш буйы ағас ҡырҡып, уларҙы һыубаҫар туғайҙарға тартып, һал итеп бәйләйҙәр ҙә, яҙ етеп, һыу ҡайтҡас (һыу ҡайта, һыу китә, тип, уны тере йәнгә һанап йылға менән һөйләшеү борондан килә), болон-туғайҙар һыу менән тулып, һалдарҙы ҡуҙғатып ебәрә торған булған икән. Ололар һал ҡыуғынсыларын билдәләй, ҡыуғынсылар һал өҫтөнә бесән тейәлгән арбаһы менән аттарҙы мендереп урынлаштыра, аҙыҡ-түлек, йөҡлар өсөн лапаҫтар эшләп, Ырымбур тарафтарына хәүефле юлға сыға... Бәлки, ҡыуғынсыларға ла "Һаҡ бар!" тип һөрәнләүҙәре йылға атамаһын тыуҙырғандыр?..

Ә шәхсән эҙләнеү-тикшереүгә килгәндә, йылғаның атамаһы быуаттар төпкөлөнән - алмисактан киләләр тип уйлайым. Был турала Урал батыр эпосы ла һөйләй. Унда:

"Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмарҙар,
Яңы йылға эҙләгән",- тиелә.

Һаҡмар батыр ағаларына эйәреп, ҡаяташҡа үҙенең ҡоралы - һуҡмары (суҡмар) менән һуҡҡандан һуң, һыу бәреп сығып, йылға булып ағып китә. Суҡмар һүҙе тора-бара Һаҡмар атамаһына әүерелгән, тип фараз итһәк, дөрөҫ булыр тип уйлайым, сөнки суҡмар боронғо замандарҙа киң таралған ҡорал булған. Урал батырҙың оло улы Яйыҡ батыр атаһының ҡылысын мираҫҡа алһа, ә кесе туғандары суҡмар менән ҡоралланған булғандыр. Мифология донъяһында киң таралған халыҡ легендаларында ла тере һыу эҙләү һәм табыу кеүек эпизодтар йыш осрай.

Һаҡмар йылғаһының инеше бәләкәй генә шишмәнән башлана, әбйәлилдәр ошо инешкә торба һалып ҡуйған, һыуы сылтырлап ҡына ағып ята. Уҡыусыларым менән инештән услап һыу уртлаған саҡта бала саҡтан таныш тәм - Һаҡмар һыуы тәмен тойҙом. Һаҡмар буйында тыуып үҫкән һәр кемгә таныҡ был тәмде онотмаһындар өсөн, бигерәк тә балалар хәтерендә ҡалдырыр өсөн бөгөнгә көндәрҙә лә Һаҡмар буйы ауылдары халҡы, яҙғы һары һыу төшкәнсе мәкенән сәйгә һыу алып ҡайта - был быуындар күсәгилешлегенә асыҡ миҫал. Кеше генә түгел, был төбәктә оя ҡороп, бала баҫҡан аҡҡоштар ҙа Һаҡмар боҙон тәмләп ҡалырға иртә яҙҙа ашығынып ҡайта...

Шулай итеп, Урал батыр эпосына таянып, Һаҡмар йылғаһы атамаһы ла башҡорт этнонимын формалаштырыуҙа мөһим роль уйнаған тәбиғәт бүләге тип ҡабул ителәргә тейештәр.

**Айҙар МӘЖИТОВ,**
**"Темәс" Башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге етәксеһе,**
**БР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ҺӘР КЕМ ҮҘЕНСӘ ЙӘШӘЙ



**Эйе, һәр кем үҙенсә йәшәй. Донъяға үҙенең ҡарашы менән баға, үҙенә күрә тура тип тапҡан юл һайлай.**

Һәм һәр кешенең был тормошта үҙ дөрөҫлөгө. Күп осраҡта ул был дөрөҫлөгән хәҡиҡәт итеп күтәрә лә белә. Осратҡанығыҙ бармы: "Мин дөрөҫ йәшәмәйем, әммә был минә оҡшай", - тигән кешене? Дөрөҫ йәшәмәгәнен белһә лә, ул быны, дөрөҫ йәшәйем, тигән пәрҙә менән ҡаплаясаҡ. Һәм был уның дөрөҫлөгө. Быға уның хаҡы бар. Ә беҙҙең кемдәргәләр, дөрөҫ йәшәмәй, тигән ҡарар сығарырға хаҡыбыҙ юҡ. Фекер белдерергә, хатта тәнҡитләргә иреклебеҙ, әммә хөкөмдар булырға хаҡыбыҙ юҡ. Шуның өсөн дә Кешелектә Аллаһ хөкөмө (иң юғары) менән Әҙәм (суд) хөкөмөн айырым ҡуялар. Ғәҙелһеҙлек менән осрашҡанда, Хоҙай бар әле, тибеҙ. Шуны белгәнгә күрә, күңелгә күпмелер тыныслыҡ инә.

Әйткәндәй, кешеләрҙе хөкөм итеү хоҡуғына эйә булғандар (һөнәрҙәре буйынса) Юғары хөкөмдән ҡурҡыу һәләтенә лә эйә булһалар, Ер йөҙөндә ғәҙелһеҙлек күпкә кәмер ине ул...

**Наилә ХӘМБӘЛИЕВА.**

✓ ***Кеше тәү башлап Уралда ҡасандан бирле йәшәй башлаған? Улалин һәм Диринг ҡомартҡылары бында, тәүге сиратта Уралдың көньяғында, кеше миллион йыл самаһы әүәлерәк йәшәй башлағандыр, тип фараз итергә мөмкинлек бирә.***



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Беренсе бүлек. Таш быуаты.



**Урал территорияһында кешеләр ҡасандан бирле йәшәй?**

Һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә кешелек йәмғиәте тарихының иң боронғо этаптарын өйрәнеү өлкәһендә мөһим ғилми асыштар эшләнде, улар Ер шарында кешенең килеп сығышының ваҡыты һәм характеры хаҡындағы барса элекке ҡараштарҙы тамырынан үҙгәртте. Мәҫәлән, кеше бынан 1 миллион йыл тирәһе элегерәк Африканың төрлө төбәктәрендә, Европаның һәм Азияның көньяҡ тарафтарында бер үк ваҡытта барлыҡҡа килгән, тигән фекер менән барыһы ла тиерлек килешә ине. Кеше тәүләп йәшәй башлаған зонаға Кавказ аръяғы ла индерелә, Әзербайжандың Азых мәмерйәһендә табылған кешенең аҫҡы яңағы фрагменты иң боронғоларҙан иҫәпләнә. Әммә хәҙер тарихсыларҙан бер кем дә кешелек тарихына 3 миллион йыл тирәһе булыуын инҡар итмәй: кешелек йәшәйешенең 3 тапҡырға тиерлек боронғораҡ булыуы хаҡындағы фекер фәндә Лики фамилиялы инглиз археологтарының иҫ китмәле асыштары һөҙөмтәһендә нығына. Улар Олдувай (Танзания), Кооби-Фора һәм Рудольф (Кения) тип аталған урындарҙа бынан 2 - 2,8 миллион йыл әүәл осорҙарҙа йәшәгән кешенең баш һөйәген, унның һөлдәһенең башҡа фрагменттарын, шулай уҡ кеше эшмәкәрлеге эҙҙәрен - махсус эшләнгән таш ҡоралдар таба. Һуңынан был тораларҙың (боронғо кешеләрҙең ҡаҙып асылған тораҡ урындары. - **Тәржемәсе иҫк.**) датаһы 1,3 - 1,6 млн йыл самаһы тип аныҡлана, әммә уның урынына Африка территорияһында тағы ла боронғораҡ яңы ҡомартҡылар табыла. Улар иҫәбендә Гона (йәше 2,6 млн йыл), Хадара (3,5 млн йыл) торалары, шулай уҡ Эфиопияла һәм Летолин тигән урында (Кения, 3,6 млн йыл) табылған кеше һөлдәләре. Былар әлегә Ерҙә кеше йәшәүе эҙҙәренең билдәле булғандарының иң боронғолары.

Африкалағы археологик асыштар ғалимдарҙан кешеләрҙең формалашыуы һәм ер шарында таралыуы процесына яңыса ҡараш булдырыуҙы талап итте. Донъя ғалимдарының күпселеге, шул иҫәптән беҙҙең илдекеләр ҙә, кешенең иң тәүҙә Көньяҡ Африка территорияһында бынан 3 млн йыл самаһы әүәлерәк барлыҡҡа килеп, шунан башҡа материктарға күсеүе хаҡындағы фекерҙе ҡабул итә. Хәҙерге ваҡытта Евразия территорияһында иң боронғоларҙан һаналған (датаһы 1,9 - 1,7 млн йыл әүәл) Дманиси тораһында (Көнсығыш Грузия) табылған материалдар ошо ҡарашты раҫлай. Йәше 1,2 - 0,6 млн йыл булған торалар һаны байтаҡҡа күберәк: улар Кавказда, Азов янында (Амирание тауы, Баһадирҙар, Дарвагчай һәм башҡалар), Тажикстанда (Куль-дара), Ҡаҙағстанда (Ҡыҙылтау) һәм башҡа урындарҙа табылған. Тикшеренеүселәр ошондай ҡомартҡыларҙы бында Африка территорияһынан күсеп килгән тәүге быуын кешеләре төркөмдәре ҡалдырған, тип иҫәпләй. Ошо дәүергә ҡараған ҡомартҡыларҙың Алтайҙа (Улалинка) һәм Яҡут территорияһында (Диринг) табылыуы билдәле. Улар шулай уҡ кешеләрҙең Азия материгының көньяғынан төньяҡҡа табан күсеүе барышында барлыҡҡа килгән.

Кеше тәү башлап Уралда ҡасандан бирле йәшәй башлаған? Фән әлегә ошо һорауға аныҡ ҡына яуап бирә алмай, әммә Улалин һәм Диринг ҡомартҡылары бында, тәүге сиратта Уралдың көньяғында, кеше миллион йыл самаһы әүәлерәк йәшәй башлағандыр, тип фараз итергә мөмкинлек бирә. Әммә ошондай иң боронғо археологик ҡомартҡылар табылмаған әле, уларҙы эҙләп табыу үтә ауыр: улар, ҡағиҙә булараҡ, бер нисә метр тәрәнлектә ер аҫтында ята һәм белгестәргә осраҡлы рәүештә билдәле була. Ә әлегә бында Әбйәлил районының Ташбулат ауылы янындағы Ҡарабалыҡлы күле ярындағы Мысовая тораһы йәше буйынса иң ололарҙан булып ҡала. Билдәле совет археологтары О.Н. Бадерҙың һәм Г.Н. Матюшиндың күп йыллыҡ ҡаҙыныу эштәре һөҙөмтәһендә торала таштан оҫта итеп эшләнгән күп һандағы ҡул бысаҡтары (киҫкестәре), нуклеустар (эшкәртелә башлаған таш киҫәктәре. - **Тәржемәсе иҫк.**) һәм уларҙы эшкәрткәндән ҡалған таш ҡалдыҡтары йыйып алына. Был ҡомартҡылар ашель-мустьер дәүеренә ҡарай (200 - 40 мең йыл элегерәк).

Күптән түгел Көньяҡ Уралда, Силәбе өлкәһенең Ҡыҙыл (Кизиль) районында, Урал йылғаһының һул яҡ ярында Богдановка I тип исемләнгән икенсе боронғо тора табылды һәм тикшерелде. 1000-дән ашыу таш әйберҙәр (ҡоралдар: ҡырғыстар, бысаҡтар, ослоташтар, ярып алынған таш киҫәктәре), шулай уҡ мамонт, бизон, мәмерйә айыуы һәм башҡа йәнлектәрҙең һөйәктәре ер аҫтында 6 метр тәрәнлектә 20 см ҡалынлыҡтағы мәҙәни ҡатламды хасил итә. Ҡомартҡы 100 - 40 мең йыл әүәлге дәүергә ҡарай (мустье эпохаһы). Яҡшыраҡ һаҡланғанлығы һәм табыштарҙың күп булыуы айҡанлы был тора киләсәктә Көньяҡ Уралдың боронғо таш быуат эпохаһына ҡараған тарихын өйрәнеү йәһәтенән тәрәк сығанаҡ булып ҡалыуы мөмкин.

XX быуаттың 80 - 90 йылдарында иртә палеолит ҡомартҡыларын махсус эҙләү барышында Урта Уралда йәше 250 - 200 мең йыл булған байтаҡ ҡына тора урындары асылды. Ельники, Большая Глухая, Ганичата I һәм II тип исемләнгәндәрендә махсус эшкәртелеү эҙҙәре булған кварцит ташы киҫәктәре, шул осор фаунаһы ҡалдыҡтары табылды. Атап кителгән ҡомартҡылар әлегә аҙ өйрәнелгән, тикшеренеүҙәр тулыһынса тамамланғанға тиклем уларҙың тәү (иртә) датаһын билдәләп булмай. Примитив таш ҡоралдар, эшкәртеүҙән ҡалған таш киҫәктәре табылған Муллино, Айдос торалары яҡынса бынан 100 - 40 мең йыл әүәлге дәүергә ҡарай.

Бында йәшәгән кешеләр аҙ һанлы булып, һунарсы һәм балыҡсылар төркөмдәренән торған.

Уралға тәү башлап кешеләр көньяҡтан, Урта Азия һәм Ҡаҙағстан территорияһы аша килгән, тип иҫәпләнә, был тарафтарҙа ла хәҙерге ваҡытҡа тиклем тиҫтәләгән боронғо таш быуат торалары асылған, улар араһында ашель-мустьер дәүеренә ҡарағандары ла бар (350 - 300 мең йыл элегерәк). Уларҙан Көньяҡ Уралға иң яҡын булғандары Мугаджар районында урынлашҡан торалар, был һырттар Урал тауҙарының көньяҡ армыттары булып тора.

Кешеләрҙең был тарафтарға Кавказ һәм Түбәнге Волга территорияһы аша үтеп инеү мөмкинлеге лә инҡар ителмәй. Әммә, күп кенә ғалимдарҙың фекеренә ярашлы, ошо көньяҡ юлы, беҙ хәҙер күҙ алдына килтергәнсә, бигүк ябай булмаған. Үтә боронғо дәүерҙәрҙә Каспий диңгеҙенең кимәле ныҡ юғары булған, уның төньяҡ ярҙары хәҙерге Волгоград өлкәһенән дә төньяҡтараҡ булыуы мөмкин. Әммә төньяҡ киңлектәрен үҙләштереү өсөн беҙҙең боронғо бабаларыбыҙға үтә алмаҫлыҡ кәртәләр булмаған.




*Һүрәт 1. Көньяҡ Уралдың иң боронғо кешеһенең таштан яһалған эш ҡоралдары: 1,2 - ҡул киҫкесе; 3 - уҡ башаҡтары, 4 - ҡырғыс; 5 - нуклеус һәм унан китеп алынған йоҡа пластина; 6 - йоҡа бысаҡ формаһындағы пластиналарҙы ағас тотҡосҡа беркетеү ысулы; 7 - ағас йә иһә һөйәк нигеҙ паздарына беркетелгән бысаҡ формаһындағы пластиналарҙан яһалған бысаҡ-хәнйәр.*

Һуңғы йәки үрге палеолит дәүерендә (беҙҙең эраға тиклем 40 - 11 мең йыл) кешеләр барса Урал территорияһында тиерлек йәшәгән. Көньяҡ Уралда ғына әлегә билдәле булған 202 тора табылған. Ошо осорға ҡараған ҡомартҡылар Башҡортостандың төрлө райондарында (Өфө, Октябрьский ҡалалары янында), Ҡурған өлкәһендә (Шикаевка), Пермь крайында (Пермь ҡалаһы янында), шулай уҡ Коми Республикаһында (Айыу Таш) ла бар. Был ваҡытта кеше таштан (саҡматаштан) уҡ башаҡтары, дротиктар яһарға, саҡматаш киҫәгенән йоҡа ғына, бысаҡ формаһындағы пластиналар телеп алырға өйрәнгән, улар өҫтәлмә эшкәртелеүҙән һуң нигеҙ ағас паҙына беркетелгән һәм ошондай берләштерелгән эш ҡоралдарының бысаҡ тибындағы ҡырыйы киҫеү өсөн файҙаланылған. Эш ҡоралдарының тиҫтәләгән башҡа төрҙәре билдәле.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Шайморатовсылар - Чернигов-Припять операцияһында

19 сентябрҙә дивизияның 58-се һәм 60-сы полктары, урмандар аша йәшеренеп барып, Снов йылғаһы ярҙарына етә. Клочково һәм Брусилово ауылдары янында немецтарҙың 2 пехота батальоны, миномет батареяһы оборона тота, бында йылға аша һалынған күперҙәр ҙә була. Немец частары уты аҫтында йылға аша сығыу үтә хәүефле була. Шул саҡта 2-се эшелонда барған 62-се кавполктың разведка төркөмө (командиры - гв. өлкән лейтенанты В.Е. Козлов) Снов йылғаһы аша дошманға һиҙҙертмәйенсә генә сыға алыу мөмкинлеген биргән кисеү урынын таба. Клочково ауылы Снов йылғаһы һәм Чернигов ҡалаһы арауығында урынлашҡан, немец частары өсөн был торлаҡ пунктын ҡулда тотоу үтә мөһим була. 62-се полк яугирҙарына, дошман тылына сығып, ошо ауылды алыу бурысы ҡуйыла. Хәрби операция менән полктың штаб начальнигы, гв. капитаны А.В. Красиков етәкселек итә. Полк командирының политбүлек буйынса урынбаҫары, гв. майоры С.Р. Ҡадиров та ошо алышта ҡатнаша. Лейтенант Г.М. Тихоновтың 3-сө, өлкән лейтенант Е.С. Должуктың 1-се эскадрондары, полктың артиллерия батареяһы, Снов йылғаһын кисеп сығып, Клочково ауылына көнбайыш яҡтан яҡынлаша. Был мәлдә ауылдың көнсығыш яғынан һөжүм иткән 60-сы полк атакаларын кире ҡағыу менән албырғаған немец офицерҙары тылдан янаған хәүефте абайламай ҡала. Капитан Красиков ауылға атлы стройҙа бәреп инергә ҡарар итә. Эскадрондар, пулемет тачанкалары алға ташлана. Дошман танкылыры ут аса, атлыларҙы тотҡарларға маташа. Әммә лейтенант Морозовтың артбатареяһы улар өҫтөнә снарядтар яуҙыра, ауыл ситендәге маскировкаланған танкыны орудие командиры, гв. өлкән сержанты Ғ.А. Әхмәров баҫтыра. Ауыл урамдарына сабып килеп ингән яугирҙар күҙ асып йомған арала дошман рәттәрен тарҡата, улар паникаға бирелә. Ауыл азат ителә, дошман Снов йылғаһы аша һалынған күперҙе лә шартлатып өлгөрмәй. Күпер аша Снов йылғаһының көнбайыш яғына сыҡҡан 60-сы полк дошманды Черныш, Лопатино, Певцы ауылдары йүнәлешендә эҙәрлекләүен дауам итә. Ә Кусимовтың 58-се гв. кавполкы, немец пехотаһын Брусилово ауылы эргәһендә ҡаҡшатып, артабан Березянка һәм Бобровицы торлаҡ пункттары йүнәлешендә һөжүмен дауам итә. Чернигов ҡалаһын азат итеүҙә Клочково янындағы уңыш бик мөһим була: армия командованиеһы дивизиябыҙҙың 62-се кавполкы командиры, гв. подполковнигы М.Г. Маркарянды III дәрәжәләге Суворов ордены менән бүләкләй.

19 сентябрь кисенә 16-сы гв. кавдивизияһы Снов йылғаһының көнбайыш ярында киң плацдарм булдыра. Яугирҙар, тәүлек ярым дауамында дошман менән бәрелештәргә инеп, 130 саҡрым алға китә, 61-се армияның башҡа частарына ла дошманды эҙәрлекләү өсөн уңайлы шарттар тыуҙыра. Батырҙарса алышҡан яугирҙар Донбаста һәләк булып ҡалған генерал-майор М.М. Шайморатовтың, элекке яуҙаштарының ҡонон ҡайтара. Дивизия Чернигов - Гомель шоссе юлына яҡынлаша, был инде немецтарҙың Чернигов төркөмөнә айырыуса хәүефле була. Дошман Чернигов ҡалаһынан танкылар менән көсәйтелгән пехота полкын беҙҙең ғәскәргә ҡаршы ебәрергә мәжбүр була.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Оло йәштәрҙәге тәжрибәле шәфҡәт туташы ахырҙа уның серен сисә. Аш эшкәртеү юлын (егерме метрға яҡын эсәк буйын) имен генә үтеп килеп төшкән тегеү энәһе... еп менән шырпы бөртөгөнә бәйләнеп ҡуйылған булған икән!*



# ТАБИП СЕР АСА:

## "Кемдәр улар - симулянттар?"

**Бер нисә йыл элек гәзитебеҙҙә табип практикаһында һирәк кенә булһа ла осрай торған диссимуляция тип аталған төшөнсә хаҡында мәҡәләм сыҡҡайны. Ниндәйҙер маҡсат менән кешенең үҙендә булған сирҙе йәшереп маташыуын шулай тип атайҙар. Ғәҙәттә, берәй уҡыу йортона инеүселәр йә эшкә урынлашыусылар араһында осрай уның менән булышҡандар. Элегерәк, Советтар Союзы осоронда хатта әрме хеҙмәтенә саҡырылыусылар араһында ла шундай хәлдәр булыуы хаҡында ине ул мәҡәләм. Һалдатҡа йәше еткән егеттәрҙең әрмегә бармай ҡалыуы оят була торғайны ул саҡ. Ҡыҙҙарҙың да күпселеге хәрби хеҙмәттә булмаған егеттәрҙе әллә ни өнәп еткермәгәнгә күрәмелер (айырыуса беҙҙең яҡташ егеттәребеҙ араһында), үҙендә булған теге йәки был сирҙе табиптарға белгертмәҫкә тырышҡандар бар ине. Мин үҙем дә военкоматҡа ҡаралырға барғас, хатта ҡасандыр ҡулым һынғанлығы хаҡындағы мәғлүмәтте лә амбулатория картаһынан йыртып алып ташлағаным хәтеремдә...**

**Бөгөнгө һүҙем, киреһенсә, симулянттар хаҡында. Хәрби табип булып сирек быуатҡа яҡын хеҙмәт иткән осорҙары госпиталебеҙҙә үҙем йә күрше бүлектәрҙә эшләгән коллегаларым күҙәткән ана шундай ҡыҙыҡлы хәлдәрҙе бәйән итеп китмәксемен. Алдан уҡ әйтеп ҡуйырға кәрәк: күп кенә үҙемдең яҡташтарым менән дә бергә хеҙмәт итергә тура килде, әммә улар араһында бер генә симулянтты ла хәтерләмәйем. Башҡа офицерҙар, табиптар араһында милләттәштәрем өсөн ғорурланыуға (дөрөҫөн генә әйткәндә, хатта бер аҙ маҡтанырға) был бер уңай сәбәп тә ине. Уның ҡарауы, башҡа яҡтарҙан килгән егеттәр араһында әлеге яһалма "сирлеләрҙе" осратырға тура килгеләне. Ниндәй генә симулянт булмаһын, табип уның аһ-зарына иң башта ышанырға бурыслы. Унан, ентекләп, һәр төрлө диагностик тикшереүҙәр үткәреп, башҡа коллегаларынан консультатив ярҙам алғандан һуң ғына теге йә был шәхестең симуляция менән булышҡаны хаҡында һүҙ йөрөтөү мөмкин. Сөнки кешенең ысынлап та берәй сире була тороп, шуны таба алмай, күҙ уңынан ысҡындырыу хәүефе лә бар...**

### Эсе киткән...

Хәрби табип булып часҡа килгәс тә мине, йәш кенә лейтенантты, медицина пунктына начальник итеп тәғәйенләнеләр. Август айы, йәшелсә-маҙар ашап, һалдаттарҙың эс китеү (энтероколит) осраҡтары йышайған мәл. Әле генә табип дипломы алған кеше булараҡ, "бар сирҙәрҙе лә яҡшы беләм" тип һанаған сағым (башта һәр йәш табип үҙе хаҡында ана шундайыраҡ уйҙа була). Ҡабул итеү бүлмәһенә ингән һәр бер һалдатты иғтибар менән ҡарап, кәрәкле диагноздар ҡуйып, дауалау ысулдары тәғәйенләү менән булышам. Минең янымда оло ғына йәштәрҙәге бер прапорщик - фельдшер ҙа бар. Тәжрибәле был ағай минең ауырыуҙарҙы нисек ентекләп ҡарағанымды күҙәтә. Ҡайһы берҙә йөҙөнә бер аҙ көләмһерәү билдәләре лә сыҡҡылай, әммә минең күрһәтмәләремде һис һүҙһеҙ үтәй. Бына сираттағы пациент - бер йәш һалдат бүлмәгә килеп инде. Ике ҡуллап ҡорһаҡ тапҡырын тотҡан. Эсе китеүенә зарлана. Кушеткаға һалып, эсенә баҫҡылап ҡарағандан һуң, бәҙрәфкә барырға ҡуштым. "Тик оло ярауыңды сайҙыртма, миңә күрһәтерһең", тип бойорорға ла онотманым. Егет бәҙрәфкә киткәс, бер аҙ оҙаҡланы. Әлеге фельдшер Абрамов уның артынан сыҡты һәм, күп тә үтмәй, мут йылмайып килеп инде: "Иптәш лейтенант, был һалдатты ҡабаттан казармаға ҡайтарып ебәрергә кәрәк!" "Ни өсөн?" "Симулянт ул. Уның бындай ҡыланыштары беренсе мәртәбә лә түгел. Мин уны беләм..." Ҡыҫҡаһы, был фельдшер бәҙрәфкә ингәндә әлеге һалдатыбыҙ ҡаты оло-ярауын тырыша-тырыша һыу менән бутап, "шыйыҡлатырға" маташып торған икән...

### Аҡса йотҡан...

Бер мәл, "аҡса йоттом", тип бер һалдат госпиталгә килгән. "Яңылыш ҡына" бер һумлыҡ тәңкәһен йотҡан был егетте рентгенға ҡуйып, снимок яһаныҡ. Ысынлап та, әлеге "байлығы" уның эсендә ятҡанлығы асыҡланғас, егетте хирургия бүлегенә һалып ҡуйҙыҡ. Олораҡ кешеләр хәтерләй, ул саҡтағы бер һумлыҡ аҡса ғәйәт ҙур була торғайны. Нисек йотҡолоғонда һыҡып тороп ҡалмаған да, ашҡаҙанының сфинктерынан (тар ғына булған сығыу урыны) нисек үтеп киткән тиһең... Эсәге буйлап бер-ике көндән иң "һуңғы пунктҡа" барып етеп, тура эсәктең дә "сфинктеры" аша үтеп, унитазға төшөргә тейеш был аҡса, тип көтәбеҙ. Бәҙрәфкә барған һайын санитар уны контролдә тота. Аҡса һаман төшмәгәс, ҡабаттан снимок яһарға рентгенға алып баралар. Унда ни күренә: әлеге "рубль" эсәк буйлап аҫҡа ҡарай китеү унынына, ашҡаҙанына кире килеп ултырған (һәр хәлдә, рентген ашҡаҙан тапҡырында тороуын күрһәткән)! Рентген кабинаһынан сыҡҡас та егеткә сисенергә бойоролған. Ә әлеге "һумлыҡ" тәңкә был "зирәк" егетебеҙҙең ҡорһағына... лейкопластырь менән тыштан йәбештереп ҡуйылған булған!

### Энә ашаған...

Ҡайһы бер һалдаттар, ысынлап та, ят есем (инородное тело) йотоп, госпиталгә килгеләй торғайны. Ғәҙәттә, оло һалдаттар менән ундай хәлдәр булмай. Аҡ яға теккән мәлдә "яңылыш ҡына" энә йотоуҙар һәр саҡ "молодой"ҙарҙа осрай. Сәнселмәйенсә, был энә нисек уларҙың йотҡолоғонан үтеп китә икән, тип аптырай инем. Ул ғына ла түгел, ике-өс көндән әлеге энә "имен-аман" көйө унитазға ла килеп төшә! "Инородное тело желудочно-кишечного тракта" тигән шундай диагноз менән бер егетебеҙ хатта госпиталдә ике-өс тапҡыр ятып сыҡты! Һалдаттың был эш менән махсус рәүештә булышыуын иҫбат итеү ифрат та ауыр. Энәһе "сығып китеү менән" часҡа ҡайтарып та ебәрәләр. Был хаҡта һәр саҡ хәбәрҙар булған "дедушка"лары уны казармала үҙҙәренсә "йылы" ғына ҡаршы алалыр, моғайын, тип уйларға ғына ҡала... Бер нисә көндән, егетебеҙ "шпага"һын тағы йота (әрмелә һалдат лөғәтендә ундайҙарҙы "шпагоглотатель" тип йөрөтәләр). Сираттағы мәртәбә килгәс, хирургия бүлеге мөдире шәфҡәт туташына был егеттең һәр аҙымын айырыуса ныҡ күҙәтергә бойорған. Хатта энәнең нисек килеп төшкәненә тиклем ҡарап торорға ҡушҡан был етди начальник. Егеттең ныҡ оялыуына ҡарамаҫтан, оло йәштәрҙәге тәжрибәле шәфҡәт туташы ахырҙа уның серен сисә. Аш эшкәртеү юлын (егерме метрға яҡын эсәк буйын) имен генә үтеп килеп төшкән тегеү энәһе... еп менән шырпы бөртөгөнә бәйләнеп ҡуйылған булған икән! Егетебеҙҙең тапҡырлығына хайран ҡалдыҡ. Бынан һуң ул башҡаса госпиталдә күренмәне.



### Бото шешкән...

Бер егеттең аяғы бүрәнәләй булып шешеп, госпиталгә килгәс, уны нисек кенә тикшермәнеләр! Барса анализдары ла яҡшы. Флегмона-фәләнгә лә оҡшамаған. Бер аҙ ғына аҡһап йөрөүен иҫәпкә алмағанда, егетебеҙҙең хәле лә әллә ни мөшкөл түгел. Ашауға ла бигүк сибек булмаған был пациентты оло ғына бер терапевт - Эткало фамилиялы подполковник сираттағы мәртәбә ҡарарға булған. Инәнән-тыума сисенергә ҡушылғас, егетебеҙ уға бик ашығыс рәүештә "бәҙрәфкә барғыһы килеүе" хаҡында әйткән. Әммә табип рөхсәт итмәгән. Шыр яланғас сисенергә мәжбүр булған егеттең әлеге бото салбар ҡайышы менән иң төптән һыҡтырылып ҡуйылған булыуы асыҡланған. Төнгөлөккә бушатып ҡуйып, табип ҡарар алдынан ҡабаттан һыҡтырып бәйләп йөрөгән икән. Трусик балағынан да күренмәгән...

### Эмфизема

Медицинала шундай бер термин бар. Ниндәйҙер сәбәп менән, халыҡса әйткәндә, "ит менән тире араһына" һауа йыйылыуы. Берәй фажиғәгә осрап, кешенең үпкәһе йә тын юлының башҡа бүлеге (ҡурылдай, трахея) йәрәхәтләнеүҙән, тире аҫтына һауа "өрөлөп", күбенә башлай... Шулай, бер һалдат бите, муйыны ныҡ "шешенеп", минең бүлектә ятты. Бөтә анализдары ла яҡшы, бер ниндәй травма-фәлән дә булмаған, "үҙенән-үҙе барлыҡҡа килгән" был сир баштараҡ мине, башҡа коллегаларымды ла бер аҙ аптыратты, уйланырға мәжбүр итте. Бармаҡ менән баҫҡылап ҡарағанда яңы яуған ҡар һымаҡ кетерҙәп торған был шешек, бер нисә көндән үҙенән-үҙе юҡ булды. Икенсе мәртәбәгә шул уҡ һалдатым тағы килде. Әммә был юлы уға ниндәйерәк мөғәмәләлә булырға мин белә инем инде. Укол яһай торған ябай шприц һәм энә ярҙамында сикә тиреһе аҫтына һауа тултырып, табиптарҙың "башын ҡатырған" был егет менән етди генә итеп (хатта прокурор менән ҡурҡытып) һөйләшеп алғас, башҡаса ул госпиталдә күренмәне...

### Насар ишеткән...

Ҡолаҡ мәсьәләһе буйынса бәғзе егеттәр булышҡан симуляция осраҡтары айырыуса хәтеремдә. Медицина өлкәһендә бер ни белмәгән йәш кеше өсөн оҙаҡ йылдар отоларинголог булып эшләгән табипты алдау, әлбиттә, ябай эш түгел инде ул. Шуға ҡарамаҫтан, ошо аҙымға йөрьәт итеүселәр табылғылай торғайны. Күпселек осраҡта пациенттың "бер ҡолағы кинәт кенә ишетмәй башлаған" була. Башта, әлбиттә, быға ышаныу кәрәк. Сөнки "Неврит слухового нерва" тип аталған бер етди сирҙең дә тап ана шулай башланыуы мөмкин. Ваҡытында дауалау саралары күрмәһәң, ғүмерлеккә һаңғырау булып та ҡала кеше бындай осраҡтарҙа. Ентекләп тикшерә лә башлайһың. Ишеткән ҡолағына "с", "ш", "ч" өндәре (шипящие) булған һандарҙы шыбырлап әйтеп, башта "өйрәтеп" алаһың. Табип шыбырҙаған һәр һанды алты аҙым аранан да ишетеп, һалдат дөрөҫ кенә итеп ҡабатлай. "Шестьдесят шесть", "сорок восемь", семьдесят четыре"... Унан, һау ҡолағын бармаҡ менән тығып, "ишетмәгән" яғына шыбырҙарға тотонаһың. Ысынлап та бер ни ҙә ишетмәй! Шулай, һандар ҡабатлап тора биргәс, бер ыңғайҙан "Слышишь?" тип шыбырҙап ебәрәһең. Табиптан алты метр алыҫлыҡта тороуына ҡарамаҫтан, уны-быны аңғарып өлгөрмәгән байғош пациент "нет" тигәнде белгертеп, баш сайҡай... Ә икенсе берәй осраҡта, һандарҙы ҡабатлай-ҡабатлай әлегесә алты аҙым араға тиклем алыҫайғас, шулай уҡ шыбырҙап: "Другое ухо закрой", - тип әйтеү менән, ифрат тыңлаулы был егет... икенсе ҡолағын ҡаплай! Был тикшереүҙәрҙе ситтән генә ҡарап торған шәфҡәт туташы ошо мәлдә еңелсә йылмайып ҡуя...

Ә "ике ҡолағы ла ишетмәгәндәр" менән бер аҙ ғына ҡатмарлыраҡ. Шыбырҙау түгел, ҡысҡырып торһаң да, "бер нәмә лә ишетмәй" ундайҙар. Улар менән ҡағыҙға яҙып ҡына һөйләшеү мөмкин. Биология дәресендә үткән "шартлы рефлекс"

✓ ***Бөгөнгө көндә Европа уртаһында барған фажиғәле хәлгә БМО-ның яуапһыҙ мөнәсәбәте, уның халыҡтарҙың тыныс йәшәүен хәстәрләүсе абруйлы ойошма булыуына ышанысты юҡҡа сығара түгелме?..***

тигән төшөнсәне, моғайын, һәр кем яҡшы хәтерләй. Ана шуға таянып, "тома һаңғырауларҙы" тикшереүҙең ябай ғына, әммә бик ышанысһы бер ысулы бар. Пациенттың алдына лампа ҡуйып, ҡулына ҡәләм һымағыраҡ бер нәмә тоттораһың. "Лампа яныу менән, шунда уҡ өҫтәлгә ҡәләмең менән туҡылдат!" тип, уға яҙып аңлатаһың. Пациент һин лампаны ҡабыҙған һайын өҫтәлгә туҡылдатып ултыра башлай. Әммә... лампаны яндырған ыңғайы, параллель рәүештә, үҙең "Стук!" тип әйтеп торорға тейешһең (ул хаҡта, әлбиттә, тикшерелеүсегә алдан яҙмайһың)... Шулай, әллә күпме мәртәбә лампа яндырып, ыңғайы бер "Стук"ты ҡабатлап тора торғас, бер мәл, лампочканы ҡабыҙмайынса ғына, "Стук!" тип әйтеп ебәрәһең. Шул саҡ ҡолаҡтары яҡшы ишеткән пациентыңдың ҡәләме лә өҫтәлгә "туҡ" итеп ҡала... Симулянтта әлеге "шартлы рефлекс" табиптың "стук" тип әйтеүенә лә формалашып өлгөргән була. Ә ысынлап та һаңғырау булған кешегә һинең "стук" тип әйтеүең, әлбиттә, һис кенә лә тәьҫир итмәйәсәк....

## Тотлоҡҡан...

Ныҡ тотлоҡҡан егеттәр хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ. Бәғзе берәүҙәрҙең әрме сафына килгәс, кинәт кенә "тотлоға башлаған" осраҡтары ла булғылай. Ундайҙар менән дә танышмын. Әңгәмәләшеп ултырғанда ҡайһылар бигерәк ныҡ килештерә, ҡапыл да ысын "заика"ларҙан бер нимәһе менән дә айырылмай тиерлек. Ысынлап та тотлоғоу менән яфаланған, хатта ныҡ ҡына тотлоҡҡан кеше лә, китаптан йә гәзиттән берәй текст уҡығанда, шиғыр һөйләгәндә йә иһә йырлағанда бер ваҡытта ла тотлоҡмай! "Заика"ларҙың бына шундай үҙенсәлеге бар! Ә инде был хаҡта бер ни ҙә белмәгән симулянтҡа берәй нәмә уҡырға ҡушһаң, тырыша-тырыша "тотлоға" башлай...

## Энурез...

Төндә йоҡлаған урынына "кесе ярау итеүселәрҙе" лә байтаҡ күрергә тура килде. Өлкән һалдаттарҙа бындай осраҡты күргәнем юҡ. Әгәр әлеге "недержание" менән "яфаланған" йәш һалдаттың урыны ике ярусһы карауаттың өҫкө ҡатында булһа, беренсе төндән үк аҫта ятҡан "дед" уны "уңышлы дауалауы" мөмкин... Үҙенең өҫтөнә тамсылар тамыуын теләмәһә. Башлыса бындай егеттәрҙе санитар-инструктор госпиталгә алып килә. Энурездың ысынмы-түгелме икәнен асыҡлау һәүетемсә ҡатмарлы ғына эш, әммә неврологтарҙың үҙҙәренең тикшереү ысулдары ла бар. Ул хаҡта тәфсирләп тормайым. Ә бер егет аҫтына "ярау итә" башлағас, сасҡа атаһы килде. Атай кеше командирҙарға: "Улым һейеп ятмай ул", - тип әйткән. Улы менән дә тейешенсә һөйләшеп алған, күрәһең, һалдат башҡаса ундай эш менән булышмай башланы. Әлбиттә, ысынлап та сирле егеттәр килеп эләккән осраҡтар ҙа була. Әрмелә хеҙмәт итергә ныҡ теләге булыу сәбәпле ауырыуын военкомат табиптарынан йәшереп ҡалған бындайҙар, ғәҙәттә, әрме мөхитенә килеп эләккәс, ныҡ ҡына үкенә. Башҡа хеҙмәттәштәре уны ла "симулянт" тип һанап, ҡыйырһытыуҙары мөмкин. Әрмегә яраҡһыҙ булған бындайҙарҙы, әлбиттә, табиптар, ахырҙа, "комиссовать" итеп ҡайтарып ебәрә.

## Тағы бер төрө...

"Тауышы бөткән"дәрҙе лә күргәнем бар. Бер нисек тә тауышын сығарта алмағас, һәр саҡ шыбырҙап ҡына һөйләшкән бер егетте Мәскәүгә үҙәк госпиталгә лә ебәрергә тура килде. Шунда ғына уның тауышы "асылған". "Һине иртәгә һаулыҡ буйынса комиссовать итәбеҙ", тип хәйләләгәндән һуң, шатлығынан палаталаш егеттәргә үҙенең серен сискән был һалдат. Ярайһы ҡаты ғына итеп әңгәмәләшкәндән һуң, уны ҡабаттан часына ҡайтарып ебәргәндәр...

## Һуҡыр эсәк

Баштараҡ, симуляция осрағын яҡташтарыбыҙ араһында күрмәнем, тиһәм дә, бер тарих шулай ҙа хәтеремә төштө. Симуляцияның "уңышлы" булған бер осрағы. Медицина институтында уҡыған саҡта бер егетебеҙ яҙғы сессияларҙың береһендә, ҡабат-ҡабат маташып та, ниндәйҙер имтиханын тапшыра алмағас, уны әрме сафына саҡырырға ҡағыҙ килгән. "Медик" булараҡ, егетебеҙ "острый аппендицит" тип аталған сирҙең симптомдарын бик яҡшы белгән, әлбиттә. Таң менән "ашығыс ярҙам" саҡыртҡан. Ифрат йыш осрай торған шул ауырыуҙың "классик вариантын" табиптарға "демонстрациялағас", уны ашығыс рәүештә операция өҫтәленә һалып, әлеге һуҡыр эсәгенең "ҡойроғон" (медицинала "червеобразный отросток" тип атала) алып та ташлағандар. Хәрби комиссариатҡа был хаҡта хәбәр иткәс, уға, әлбиттә, "отсрочка" биргәндәр...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әрме коллективына килеп эләккән бәғзе берәү табиптарҙы шулай бик еңел генә "төп башына ултыртырға" була икән тип уйлаһа, әлбиттә, яңылышасаҡ. Ул ғына ла түгел, ундай егеттәрҙе иң беренсе нәүбәттә уның хеҙмәттәштәре яратмай, кемдер әйтмешләй, "эткеләй-төрткөләй" башлауҙары ла ихтимал. Бынан тыш, әйтәйек, махсус рәүештә йотолған осло энә эсәк стенаһын үтә тишеп сығып, етди ҡатмарланыуға ла килтереүе мөмкин. Икенсенән, "членовредительство" тип аталған статья буйынса һалдатты хөкөм итеүҙәре лә бар, Аллаһ һаҡлаһын! Кешенең яуапҡа тарттырылыуын бер табип та теләмәй, әлбиттә, шуға күрә, һәр осраҡта ла тиерлек, әлеге энәнең һаҡһыҙлыҡ арҡаһында ғына йотолған булыуына "ышаналар". Ситтән ҡарағанда мәҙәк һымаҡ ҡына булып тойолһа ла, шундай хәлдәрҙең эсендә йөрөгән табипҡа әллә ни ҡыҙыҡ та түгел ул. Ысын сирлеләрҙе дауалауҙан тыш, шундайҙар менән дә булышырға тура килә шул. Тормош бит...**

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы медицина подполковнигы.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# БЕРЛӘШМӘГӘН МИЛЛӘТТӘР ОЙОШМАҺЫ

**Белеүебеҙсә, "Демократия - дәүләт менән идара итеүҙең иң насар ысулы", тигән үҙ ваҡытында У.Черчилль. Минеңсә, хатта бер ҡасан да, бер илдә лә дәүләт идаралығында абсолют демократия булғаны юҡ һәм булыуы мөмкин дә түгел. Сөнки һәр идаралыҡ, ҙурмы ул, бәләкәйме, барыбер, авторитар идаралыҡта ғына үҙен һаҡлай ала. Ә үҙен власта һәм власты үҙ ҡулында һаҡлау - һәр идарасы өсөн иң мөһим маҡсат! Үҙ урынын һаҡлар өсөн ул "төймәнән дә дөйә" яһаясағы билдәле. Шул маҡсатта ҡылған яуызлыҡ, яуапһыҙлыҡтарын да "демократияны яҡлау өсөн" тип аҡлаясаҡ...**

Был һүҙҙәремде демократтар партияһын етәкләгән Америка Ҡушма Штаттары миҫалында еңел иҫбат итә алам. Үҙҙәрен американдар тип атаған халыҡтар төркөмө (ер йөҙөндә американ тигән милләт юҡ, Америка республика ла, федерация ла, батшалыҡ та түгел, ул - төрлө милләт халыҡтары йәшәгән штаттар берләшмәһе) үҙҙәренең һайлауҙарында ла, Ер шарының төрлө төбәктәрендәге илдәрҙә лә, бер ниндәй тыйыуһыҙ, нимә теләһә, шуны ҡыла, нисек теләй, шулай ҡылана. Уларҙың был башбаштаҡлығына бер кем дә ҡаршы тора алмай, тип, ҡоторона ғына бирәләр. Мәҫәлән, һуңғы йылдарҙа, ялағай ҡуштандарының өнһөҙ килешеүен оҫта файҙаланып, үҙен демократияның төп бағанаһы итеп билдәләгән АҠШ агрессив сәйәсәте менән асыҡ та, аҫтыртын да мосолман илдәренә даими һөжүм итә. Был һөжүмдең маҡсаты - демократия урынлаштырыу һылтауы менән илдәрҙе берберенә ҡаршы ҡуйып, тарҡатыу, көсһөҙләндереп, үҙ ихтыярына тулыһынса буйһондороу. Тимәк, ҡасандыр У.Черчилль әйткәндәр хаҡ булып сыға.

Сәйәси һәм хәрби агрессор үҙ маҡсатына күп осраҡта артыҡ ҡаршылыҡһыҙ өлгәшә: һөжүм ҡорбаны булған илдәрҙә хөкүмәт етәкселеге алышына, ил байлығы талана, тәбиғи ресурстар менән идаралыҡ тулыһынса йәки өлөшләтә Америка ҡулына күсә. Европа, Азия илдәрендә Американың йоғонто сиктәре киңәйеп, яңы биләгән ерҙәрҙә көсө артҡан һайын, аппетиты ла арта. Ҡасандыр НАТО-ға ингән үҙаллы илдәр етәкселегенең ҡыйыуһыҙлығы һәм аумаҡайлығы арҡаһында, Американың "Хәрби суҡмар"ына әйләнгән ойошма, Ер шарының теләһә ҡайһы нөктәһендә, теләһә кемдең башына, бер кемдән дә тартынып тормайынса тондора алыуын бөтә донъяға танытты һәм, БМО, Европа Советы кеүек ойошмалар етәкселегенең икейөҙлө күндәмлеге һөҙөмтәһендә, маҡсатына еңел ирешә. Мысырҙа Хөсни Мөбәрәк, Иракта Саддам Хөсәйен, Ливияла Муамар Каддафиҙы "йыҡтылар". Сирияла Бәшәр Әсәдкә ҡаршы һөжүм яһанылар, Югославияны тар-мар итеп, тарҡаттылар. Украинаны Рәсәйгә ҡаршы ҡоторталар. Иран, Йемен, Катарҙа даими рәүештә бола ойошторалар...

Һуңғы йылдарҙа донъя халыҡтарының бөгөнгө йәшәйешен, киләсәген хәл итерҙәй үҙгәрештәргә Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының (БМО - ООН) битараф булыуы хайран ҡалдыра. 200-ҙән ашыу илдең иң алдынғы ҡарашлы һәм абруйлы вәкилдәрен берләштергән ойошма донъяуи хәлваҡиғаларҙы баһалап, кешелек өсөн хәүефһеҙ яҡҡа йүнәлтеү сараларын күрергә хаҡлы һәм тейештер тип ышанһаң, улай килеп сыҡмай. Бындай дәғүә белдерергә сәбәптәр байтаҡ. Сөнки көндәлек тормошта ғәмәлгә ашып торған ваҡиғаларҙан күренеүенсә, күп осраҡта БМО Ер йөҙөнөң төрлө төбәктәрендә үрсегән енәйәтсел баҫҡынсылыҡ, милләтселек хәрәкәттәренә битарафлыҡ күрһәтеп, уларҙы ҡоторта кеүек, хатта. Мәҫәлән, бөгөнгө көндә Европа уртаһында барған фажиғәле хәлгә БМО-ның яуапһыҙ мөнәсәбәте, уның ысынлап та күп милләтле халыҡтарҙың тыныслыҡ, тигеҙлек, берҙәмлек нигеҙҙәрендә ҡоролған донъяла тыныс йәшәүен хәстәрләүсе абруйлы ойошма булыуына ышанысты юҡҡа сығара түгелме?..

Башҡаларҙың күрмәмешкә һалышыуы ғына түгел, аҫтыртын ҡоралландырып ҡотортоуы арҡаһында тотанаҡһыҙ бер шайтандың самаһыҙ көсәйеп шашыныуы ниндәй имәнесле һөҙөмтәләргә килтергәнен XX быуат урталарында бөтә Европа халыҡтары үҙ йәнендә татыны. СССР халҡы тыуған иленә варварҙарса һөжүм итеп, 27 млн. кешеһен ҡырған һуғыш суҡмарҙары - фашистарҙы үҙ ояһында дөмөктөргәс, әхлаҡи яҡтан 100 процент хоҡуҡлы булһа ла, енәйәтселәрҙе судһыҙ-ниһеҙ тотоп, үҙ белдеге менән атманы, аҫманы ла, ә Бөтә донъя халыҡтары суды менән хөкөмгә тарттырып, яһилдарға ғәҙел яза бирелеүенә иреште. Киләсәктә бындай ҡырағайлыҡҡа юл ҡуйылмаһын өсөн эшләнде бит был донъя халыҡтары исеменән бирелгән баһа һәм ғәҙел хөкөм. Кешелек онотоп та өлгөрҙөмө ул турала? Әллә йылдар үтеү менән, фәһем алыу урынына, аҙғындарҙың яуапһыҙлығына битараф ҡарап өйрәндеме?

Донъяла именлек хәлдәре, әҙәмдең ҡылған ғәмәлдәре маҡтанырлыҡ түгел шул. Кем, ҡайҙан, ҡасан килеп донъябыҙҙы рәткә һалып бирер, кешелекте игелек, ғәҙеллеккә күндерер, тип, мөғжизә көтөргә генә ҡалдымы инде әҙәм балаһына?..

# ЙОМОРО БАШТАРҒА ДАН!

**Беҙ йәшәгән донъяла сәйер һәм аңлашылмаған хикмәтле хәл, күренештәр даими булып тороусан. Ҡайһылары фәнни тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә асыҡлыҡ таба, аңлашыла башлай. Ҡайһыларын, шулай булған һәм булырға тейештер инде, тип, тыныс ҡабул итергә өйрәнәбеҙ.**

Мәҫәлән, кешелек Ерҙең шар килбәтендә булып, Ҡояш тирәһендә әйләнеүен 5-6 быуат элегерәк кенә фаразлай башлай. Уны иҫбат итергә тырышҡан аҡыллы баштар яҙалана, хатта утта яндырыла. Ер шарының шар формаһында булыуының бәхәсһеҙ икәнен 1961 йылдың 12 апрелендә алыҫтан (космостан) төшөрөлгән фотолар раҫлаһа ла, бөгөн дә Ерҙең ялпаҡ булыуына дәғүәләшеүселәр бар. Ә балыҡтар Ерҙең 3 кит өҫтөндә ятмағанын һәм уның ыуылдырыҡтары кеүек түңәрәк икәнен, ә ҡоштар Ерҙең 3 филдә тормағанын һәм уның йоморткалай йоморо булыуын кешеләрҙән күпкә алда күргәндәр һәм белгәндәр. Ошо ябай ғына дәлилдәр ҙә Әҙәм затының аң үҫеше кимәле башҡа тереклектәрҙән күпкә юғары булыуына шик тыуҙыра...

Шикләнер өсөн башҡа сәбәптәр ҙә бар. Мәҫәлән, кеше йәшәгән йортонан ун аҙым китеп тә аҙашыуы, бер урынға күпләп йыйылып йөрөгәндә бәрелешеп, бер-береһен тапауы ихтимал, ә балыҡтар бер өйөр булып йөҙөп йөрөгәндә лә, ҡоштар меңәрләгәне бер туп булып осҡанда ла, юлдан яҙмай, бәрелешмәй.

Бәлки, улар үҙҙәренең төрҙәренә генә хас тәбиғи көскә эйәлер йәки әлегә кешелек фәне асмаған тәбиғәт законы менән файҙаланаларҙыр. Шулай булыуы ла ихтимал!

Төптән уйлап ҡарағанда, кешеләр менән йәнәшә йәшәгән тереклектәр, үҫемлектәр тормошонда сәйер күренештәр бихисап. Ләкин беҙ уларҙы күреп өйрәнгәнгәлер, күптәрен аңламаһаҡ та, артыҡ иғтибар бирмәйбеҙ йәки, аңыбыҙ ялҡаулығы арҡаһындалыр, аңларға ла тырышмайбыҙ.

Ҡыуаныসҡа күрә, донъя ҡоролошо, йәмғиәт тормошо, тәбиғәт күренештәре менән ҡыҙыҡһынғандар, күҙҙәре менән тирә-яғын байҡап, аңы менән Йыһанды айҡап, тәү ҡарауға ябай ғына күренештәрҙең айышына төшөнә, бөйөк асыштар яһап, исемдәрен мәңгелеккә тарих биттәренә яҙа. Шундай шәхестәрҙең иң сағыу вәкилдәре - Архимед, Галилей, Ньютон, Менделеев һ.б. Беҙҙең замандаштар араһында ла фән өлкәһендә юғары асыштар яһауға өлгәшкән шәхестәр бар. Улар кеүек аҡыллы заман кешеләрен тәрбиәләй алған йәмғиәттең киләсәге булыуына ышаныс тыуа.

Мейе эшмәкәрлеген файҙалы эшкә йүнәлтә белгән йоморо баштарға дан!

**Урал МОСТАФИН.**

**✓ Камила күҙҙәрен йомдо. "Мин дә яңғыҙмын, - тип яуап биргән һымаҡ булды тынлыҡ. - Ә яңғыҙлыҡ - иң ышаныслы дуҫ. Ул һатмай, алдашмай. Дуҫтарың хыянат иткән саҡта ла яңғыҙлыҡ һиңә тоғро ҡала. Хыянат итә белмәй ул..."**






"Беренселәр билдәле..." Илфат был һүҙҙәрҙе ниндәйҙер һағыш менән әйтте. Ғәжәп, тап аҙаҡҡылары Ғәзинур менән Камила булып сыҡманымы икән?

Мәктәп йылдарындағы дуҫлыҡ студент йылдарында ла дауам итте. "Ҡасан туй ҙа ҡасан туй!" тип йөҙәткән синыфташтары үҙҙәре башлы-күҙле булып бөттө. Камила менән Ғәзинур хәҙер ҡайтҡан саҡтарында бәпәй күрергә йөрөй башланылар. "Инде ғаилә ҡорорға һеҙҙең сират етте", - ти торғайны дуҫтары. Ғәзинурҙың күҙҙәрендә шатлыҡ осҡондары ҡабына, ул һөйөү тулы күҙҙәрен тултырып Камилаға ҡарап ала. Ҡыҙ ҙа тыйнаҡ йылмайыу менән яуап ҡайтара...

Өйләнешеү тураһында улар дүртенсе курста һүҙ ҡуҙғатты. Ләкин Камиланың әсәһе ҡырҡа ҡаршы сыҡты. "Аҙаҡҡы курсҡа барып етәһегеҙ бар. Студент саҡта ғаилә ҡороуҙың нимә икәнен мин үҙем яҡшы беләм. Ашыҡтырмағыҙ", - тип бик ҡаты торҙо.

"Ашыҡтырмағыҙ!" тиеүенең икенсе мәғәнәһе лә бар ине. Ҡыҙын ябай колхозсы ғаиләһенә төшөрөргә теләмәне ул. Мәктәп йылдарындағы "мауығыуы" үтер, ҡыҙы арыуыраҡ ғаиләнән сыҡҡан берәйһен осратыр, тип өмөтләнде. Тик йылдар Камила менән Ғәзинур мөхәббәтен һыуытманы, бәлки, бындай ҡаршылыҡтар араны нығытырға ғына булышлыҡ иткәндер. Аҙаҡҡы курсҡа килеп еткәндә тағы ла кәртәләр килеп сыҡты. Ул йылды Ғәзинурҙың башта ҡустыһы өйләнде, унан һеңлеһен кейәүгә бирҙеләр. Өсөнсө туйға, тәбиғи, ата-әсәһененң хәле етмәне. Етеш йәшәгән уҡытыусылар алдында кемдең кәм күренгеһе килһен? "Көҙгә туй яһарбыҙ, тик уға тиклем мине ташлап берәйһенә сығып китмәҫһең бит?" - тип ярым шаяртыу, ярым борсолоу аша әйтте Ғәзинур.

"Кәрәк икән, мин һине ғүмерем буйы көтәсәкмен", - тине Камила уның күҙҙәренә ҡарап. Ғәзинур үҙен ғәйепле тоймаһын өсөн шулай ышаныслы баҫым яһап тороп әйтте. Фәрештәнең "Амин" тигән сағына тура килде, ахырыһы, һүҙҙәре, юғиһә, ошолай оҙаҡ көтөр инеме ни ул йән һөйгәнен? Бүтәнде ярата алмаҫ инеме ни? Ярата алманы шул. Әллә бөтәһе лә текә ғорурлыҡ ҡына булдымы? Ю-у-уҡ, бары яратыу ғына уны текә һәм ғорур яһағандыр. Бары мөхәббәт.

Ҡыҙыҡ, ни өсөн туй яһап өйләнешеү улар өсөн мөһим тойолдо икән? Бөтәһен дә ябайлаштырырға, дуҫтар менән кескәй табын яһап ҡына ла була ине бит. Эйе, мөмкин ине. Йылдар үткәс, бөгөнгө күҙлектән ҡарағанда. Хәҙер бына туй яһаның ни ҙә, яһаманың ни... Ә ул саҡта!.. Шул һөйләшеүҙән һуң арала тәүге йөй барлыҡҡа килде. Был артабанғы тормош юлын һайлауға бәйләнгәйне.

- Камила, - тип ҡыуанып килеп инде бер көндө Ғәзинур. - Мине бында Өфөлә ҡалырға саҡыралар. Аспирантураға. Тағы ла бер нисә йылдан фән кандидаты буласаҡмын. Перспектива бик асыҡ күҙаләнә түгелме?

- Нисек? - Камила ысынлап тороп аптыраны, сөнки улар араһында ошоға тиклем Өфөлә ҡалыу тураһында һүҙ ҙә булғаны юҡ. Киреһенсә, Ғәзинур үҙенең хыялдары менән ҡанатландыра килде лә баһа. - Ә нишләп ҡапыл улай?

- Күптән тәҡдим иткәйнеләр. Уйланып оҙаҡ ҡына йөрөлдө... Кисә тағы ла ныҡ ҡына һөйләшеү булды. Бөтәһен үлсәп-нитеп ҡараһаң, диплом етәксем дөрөҫ әйтә бит. Мин ризалаштым.

- Ауыл? Мин?..

- Ауылға, ни, беҙҙән һуң уҡығандар ҡайтыр, феодал булып йәшәрҙәр. Әйҙә, һин дә ҡал.

- Распределение булғанын беләһең бит, Ғәзинур, һәр хәлдә, ауылда мине көтәләр. Бәлки, һиңә лә ашыҡмаҫҡалыр? Уйлашайыҡ.

- Камила, мин уйлағанмын инде. Хәҙер уй-ниәтемдән кире ҡайтып булмай. Икеләнә башлаһаң, бер нәмә лә килеп сыҡмай торған. Был осраҡта бары тәүәккәллек кенә кәрәк. Һин үҙең дә бит миңә, шул тәүәккәллегең өсөн иғтибар иттем, тиһең, һәр кем аспирант, ғалим була алмай. Теге ваҡыт килгәндә курсташың Рәхимде аспирантурала ҡалырға йыйына тип, үлтереп маҡтанығыҙ түгелме?

- Бүлмәләш ҡыҙҙар маҡтаны. Мин бер нәмә лә өндәшмәнем.

- Өндәшмәһәң дә, хуплайһың.

- Ул ысынлап та фән кешеһе. Эҙләнә-тикшерenә. Әллә нимәләр соҡоп килтереп сығара. Профессорҙар менән дә бәхәсләшеп китә...

- Тынғыһыҙ әҙәм икәнен беләм! Арҡыс-торҡос баҫа ла ауыл хужалығы институтының бөтә ятаҡтарын барлап сыға. Танымаған кешеһе юҡ. Теге ваҡыт мине лә тотоп алды...

- Аспирантурала ҡаласағын әйттеме?

- Мине лә өгөтләне. Оҙон ҡулдарын болғап, тегендә-бында сапҡан Рәхимдәрҙән кәм түгеллегемде бик яҡшы беләм. Шулаймы?

- Уныһы шулай, - тине ҡыҙ. - Ләкин ауылдаштарыңа, уҡытыусыларыңа ла вәғәҙәләр әйтеп киткәйнең. Бөтәһе лә һине көтә, йәш агроном.

- Минең ғилем юлын һайлауым оҡшамаймы әллә, Камила? - Ғәзинур уның ҡулынан тотоп алды. - Ҡарашым киңерәк була бара. Алыҫҡараҡ ҡарайым хәҙер. Шулай тейеш.

- Оҡшай. Тик ниндәй маҡсат һине күптән һайлап алған юлыңдан ситкә тайпылырға мәжбүр итә?

- Камила, төрттөрмә инде, - Ғәзинур ғәйепле йылмайҙы. - Тағы ла һине ике-өс айҙан алып китәм, һин дә бында буласаҡһың. Мин нисек хәл иттем, шулай буласаҡ. Ауылдағыларға иғтибар итмә, беҙгә йәшәргә кәрәк бит.

Камила уның менән ризалашты. Ғөмүмән, Ғәзинурҙың көтмәгәнсә һәм ҡапыл хәл итеүе уға оҡшай. Маҡсатлы, үҙ-үҙенә ышанған кеше генә шулай эшләй. Хәйер, быға тиклем популяр булған "Бөтә синыф менән - ауылға!" тигән саҡырыу онотолоп, көнүҙәгенән алып ташланғайны. Ғәзинур үҙе лә уны бер саҡ "бала уйыны" тип ысҡындырҙы...

Бына шулай тормошҡа алған йүнәлеш бишенсе курс аҙағында ҡапыл ғына үҙгәрҙе. Ул артабанғы яҙмышҡа йоғонто яһаны.

Йыш хатлашып торҙо улар. Ахыр сиктә, әсәһе лә Ғәзинурҙың ғаиләлә буласаҡ роле менән килеште. Үҙенең дә ҡай саҡ: "Ана, беҙҙең буласаҡ кейәү",- тип ысҡындырғаны булды, һәр хәлдә, көҙ-ҡыш айҙарында ҙур туй буласағы бөтәһенә лә мәғлүм ине. Октябрҙең етеһендә хәбәр итмәй-нитмәй генә Ғәзинур ҡайтып төштө. "Камила, беҙгә йәһәтерәк өйләнешергә кәрәк", - тине ул ныҡышмал тауыш менән. Камиланың шат йөҙөн күргәс, ҡулындағы пакетын асты. "Был һиңә туй күлдәге. Хәтерләйһеңме, йәй һайлағайныҡ, ана шул". Ҡыҙ ҡыуанысынан ҡысҡырып ебәрҙе лә Ғәзинурҙы ҡосаҡлап алды: "Йәнем, йәнекәйем минең!" Тиҙ генә туйға әҙерлек башланды, бөтәһе лә зыҡ ҡупты. Ҡунаҡтарға саҡырыу ебәрелде, кәрәк-яраҡтар эҙләп, районға баҙарға киттеләр. Ата-әсәһе, ваҡ-төйәк алырға тип, Орск ҡалаһына юл тотто.

* * *

Камила өй йыйыштыра ине, шул саҡ кемдер һаҡ ҡына ишек шаҡыны. "Инегеҙ, ин!" - тип ҡысҡырҙы Камила. Өйгә ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына аҙымдар менән бер ҡыҙ килеп инде. Шат йылмайған Камила ҡунаҡты түргә саҡырҙы.

- Үтегеҙ! Кем булаһығыҙ һуң? Танымайымсы.

- Камила, һин мине белмәйһең... Исемем Гүзәл.

- Эйе, Гүзәл, тыңлайым һеҙҙе.

Ҡыҙ ҡапыл бер аҙым алға атланы.

- Камила! Минең балам буласаҡ!

Камиланың йөрәге "жыу" итеп китте, ләкин һаман бер нәмә лә аңламай ине.

- Балаң?.. Эйе...

Гүзәл күҙен ҙур итеп асты ла уға текәлде. Камила һиҫкәнде.

- Ним-мә? Юҡ!

- Ғәзинур...

- Юҡ! - тип өҙөлөп ҡысҡырҙы Камила. - Юҡ, тинем бит. Уның башҡа йөрөгән ҡыҙы булманы! Һәм булмаясаҡ!

- Уныҡы, Камила! - Гүзәл үкереп илап ебәрҙе. - Мин уның артынан Өфөнән килдем!..

- Өфөнән? Нисек Өфөнән! Ул беҙҙең туйға ҡайтты!

- Туйға түгел, ул, Камилаға дөрөҫөн әйтәм, тип ҡайтып китте. Дөрөҫөн тип! Беҙҙең бала буласағын...

- Юҡ! Бар, сығып кит! Кит, юғал!

- Ә бала? Һиңә килтереп ташлайыммы баланы?

"Бала..." Бына ни өсөн Ғәзинур туйҙы ашыҡтырған. Ә ни өсөн туй күлдәге? Хыянатты шулай төҙәтергә уйлағанмы? Камила һиҙмәҫ борон туй яһап ҡалырға, тигәнме? Камила бер ҡасан да белмәҫ, тигәнме? Бала... Нисек инде улай?

- Айырма беҙҙе, Камила! Мин уны яратам!.. Айырма бала хаҡына!..

Камила ҡоро күҙҙәрен уға төбәне.

- Нимә өсөн миңә килдең? Кеше бәхетен урлағаныңды беләһеңме?

Шул саҡ Гүзәл уның алдына теҙләнеп төштө.

- Ни өсөн килгәнде беләһең бит, Камила! Ҡыҙған мине!..

- Тор, - тине һалҡын тауыш менән Камила. - Тор, йәлләтмә үҙеңде. Мөхәббәтте теҙләнеп, тубыҡланып һорамайҙар. Ул һиңә үҙе яуап бирер. Мин судья түгел! - Телефонды алды. - Ғәзинур!.. Өйҙә юҡ? Әйтегеҙ, килеп етһен бында. - Унан ҡыҙға боролдо. - Ишет, ул үҙе хәл итер! Үҙе һайлар, ул саҡта... Мин уның менән ер ситенә лә китәсәкмен! - Тыштан ҡустыһын саҡырҙы. - Йәмил, мине Үрнәккә алып бар! Сәриә апайымдарға! Мин килгәнсе, Гүзәл, бында эҙең дә булмаһын!

Йәмил ҡустыһы уны мотоциклда Үрнәккә алып барып ташланы. Ғәзинур менән Гүзәлдең осрашыуына шаһит булырға теләмәне Камила. Был сетерекле хәлдән сығыу юлын тәүәккәл Ғәзинур үҙе табыр, тип өмөтләнде һәм эстән Ғәзинурға ышанды. Ышанды... Аңлашыр өсөн Ғәзинур уның янына Үрнәккә үҙе килергә тейеш ине. Ул саҡтағы аҡылы менән Камила шулай хәл итте.

Ә Ғәзинур күренмәне. Ике көндән уны атаһы менән әсәһе килеп алды. Ҡыҙының төпкә батҡан күҙҙәрен күргәс, әсәһе илап ебәрҙе.

- Нишләнең һин, балам! Нишләнек беҙ?.. Хур ғына булдыҡ...

- Мин хур булманым, әсәй. Берәүҙе лә алдаманым, әүрәтмәнем. Хыянат итмәнем. Ә ул дөрөҫөн һөйләр өсөн дә килмәне.

- Электән шул егеткә ышаныстым булмағайны ла бит... Ни хәл итәһең...

Камила күккә баҡты:

- Минең өсөн тормош бөттө.

- Юҡ, балам, юҡ. Һинең тормош башлана ғына әле...

- Ул ҡайҙа?.. Әле ауылдамы?

- Киттеләр. Аталары йәһәтләп бата уҡыттандар ҙа ултыртып та ебәргәндәр.

Ҡыҙ сайҡалып китте. Саҡ-саҡ тотоп өлгөрҙөләр.

- Ҡайттыҡ, әсәй, - Камила атларға итте, ҡапыл күҙ алды ҡараңғыланды.

Шул ҡайтыуҙан ул бер ай түшәктән тормай ауырыны. Әкрен һауыҡты, сөнки йәшәүҙең бөтә мәғәнәһен юғалтҡайны. Шулай ҙа йәшәргә кәрәк!

Был ҡыш элеккеләренә оҡшамағайны. Аҫҡаҡ һыуыҡ торҙо, шунан ыжғыр дауыл башланды. Буранлы көндәр үткәс, ул үҙендә бер көс тойҙо. Кискеһен әкрен генә атлап тышҡа сыҡты. Бөтә тирә-яҡты ҡалын ҡар ҡаплаған. Ҡараңғылыҡ аҡ ҡарҙы серле күк төҫкә мансыған. Тып-тын. Һиллек. Иҫкән ел дә юҡ. Шундай бер тынлыҡ ки, әйтерһең, бөтә ғаләм татлы йоҡоға талған. "Мин бер үҙем", тине ҡыҙ. Унан өҫтәне: "Тағы ла тынлыҡ". Тирә-йүнгә күҙ йүгертте. "Тынлыҡ һәм тағы ла мин... Тынлыҡ, ишетәһеңме, мин япа-яңғыҙмын. Ә һин беләһеңме яңғыҙлыҡтың нимә икәнен?" Ҡыҙ йәнә ян-яғына күҙ йүгертте. Шул саҡ күңеленә ниндәйҙер йылылыҡ үтеп ингәнен тойҙо. Камила күҙҙәрен йомдо. "Мин дә яңғыҙмын, - тип яуап биргән һымаҡ булды тынлыҡ. - Ә яңғыҙлыҡ - иң ышаныслы дуҫ. Ул һатмай, алдашмай. Дуҫтарың хыянат иткән саҡта ла яңғыҙлыҡ һиңә тоғро ҡала. Хыянат итә белмәй ул. Мин тынлыҡ, шуға ла бөйөк..."

- Камила! - Әсәһе ишекте асып уға өндәште.

- Мин бында, әсәй!

- Шат күренәһең, балам.

- Беләһеңме, әсәй, мин әле генә тынлыҡты тыңланым. Ул минең кескәй генә йөрәгемә әйтеп бөтөргөһөҙ хозурлыҡ бирҙе, һиллек менән тултырҙы. Мин уның серен аңланым...

**(Дауамы. Башы 27-28-се һандарҙа).**

✓ *Балалар хәҙер элеккесә түгел, тиҙәр. Ризалашмайым. Балалар һәр ваҡытта ла бер иш. Таҙа дәфтәр бите кеүек. Ҡалғаны уҡытыусынан тора. Үҙенде хөрмәт иттерә, предметыңды яраттыра алыуың - үҙеңдең талантың.*



*ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ*

# МИН КӨНЛӘШМӘЙЕМ, КЕНӘ ҠЫУМАЙЫМ...

## Күңел тыныслығы һаҡлай алыуымдың сере шундалыр



**Фирүзә Абдуллинаның шиғриәте үҙенә төбәлгән һымаҡ булһа ла, ысынбарлыҡта, шағирә күп ҡатын-ҡыҙҙың кисерештәрен сағылдыра. Тулы итеп сағылдыра. Тәү ҡарамаҡҡа ғәҙәти тойолған төшөнсәләр, ҡатын-ҡыҙ, ғаилә хәстәрлеге, балалар яҙмышы - былар һәр саҡ көнүҙәк булып ҡаласаҡ. Кешелектең тәбиғәте шулай: ул һәр саҡ яҡшылыҡ, мәрхәмәт тантана итеренә, ауырлыҡтарҙы еңеп сығырына ышана, шуға ла киләсәккә өмөт менән баға. Әҙәм балаһының шундай эске көсө бар. Шиғриәт ошо тойғоларҙы тулылығында һәм юғарылылыҡта бирә ала. Был Фирүзә АБДУЛЛИНАның яҙған юлдарында асыҡ сағыла. Ә беҙгә артабан да шиғри, йырлы күңелле Фирүзә ханымдың илһамлы ижады менән танышып йөшәргә яҙһын.**

**Шиғырҙарығыҙ ҡасан, нисек яҙыла һәм һеҙҙең өсөн нимә ул бәхет төшөнсәһе?**

- Мин, шиғыр яҙып алайым әле, тип, махсус ултырып яҙа алмайым. Улар күпселек ниндәйҙер тетрәнеү һөҙөмтәһе булараҡ тыуа. Башыма фекер килә икән, тиҙ генә яҙып ҡуймаһам, шиғырым боролоп китә лә бара, ҡабат әйләнеп килмәй. Тотоп өлгөрөп ҡалырға кәрәк. Көсәнеп яҙа алмайым. Хис-тойғоларым тулышып, аҡ ҡағыҙға үҙе генә түгелеп китеүе кәрәк. Биш минутта яҙылған шиғырҙан дә камилы булмай. Уйлап сығарып яҙылған шиғыр яһалма, йәнһеҙ була. Һәр яңы шиғырым минең өсөн яңы ғына тыуған балам кеүек ҡәҙерле. Уй-фекеремде, хистойғомдо шиғыр аша уҡыусыларыма асып бирә алыуым менән бәхетлемен.

Яҡындарым һау-сәләмәт, уңышлы булһа, йорт-ил имен торһа, һаулығым бик үк йонсотмаһа, шул үҙе үк бәхет инде ул. Ҡалғаны үҙебеҙҙән тора, тигәндәй. Кешегә ғүмер иҫәпле генә бирелгән. Ошо бер генә тапҡыр бирелгән ҡыҫҡа ғына ғүмеребеҙҙе әрәм-шәрәм итмәй генә, матур итеп йәшәп үткәрә белеүҙәлер кешенең төп бурысы. Кемдер бәхетте байлыҡта тип уйлай. Әлбиттә, аҡсаһыҙ йәшәп булмай, ул ни тиклем күберәк булһа, мөмкинлектәрең дә шул тиклем ҙурыраҡ, тигәндәй. Әгәр шул мөмкинлектәреңде матур итеп йәшәүгә, донъя күреүгә, мохтаждарға ярҙам итеүгә ҡулланһаң, күңелең тыныс, намыҫың таҙа була, тимәк. Кешегә аҡса бер ҡасан да етмәй. Булғанына риза булып, юрғаныбыҙға ҡарап аяғыбыҙҙы һуҙып, барына шатланып, юғына артыҡ бошонмай йәшәргә тырышабыҙ. Һәр бер көндө матур итеп йәшәп үткәрһәң, бөтә ғүмерең дә матур була түгелме?

Бәхетле булыуҙың төп шарты - күңел тыныслығы. Бынын өсөн үҙеңдең йәшәйешеңдән риза булыу мөһим. Мин бер ҡасан да бер кемгә лә көнләшмәйем. Нисек кенә бай булһаң да, һинән байыраҡтар барыбер табыласаҡ. Уңышлыраҡтар ҙа, сәләмәтерәктәр ҙә, талантлыраҡтар ҙа, матурыраҡтар ҙа. Үҙеңде нисек барһың, шулай ҡабул итергә кәрәк. Һиңдә булған ҡимммәттәрҙең байтағы күп кешеләрҙә юҡ, шуны ла онотторға ярамай. Барына шөкөр, тип әйтә белергә кәрәк. Ә башҡаларҙың уңыштары өсөн мин ихлас күңелдән шатланам. Күңел тыныслығы һаҡлай алыуымдың тағы бер сере шунда: мин бер кемгә лә асыуланмайым, үпкә һаҡламайым, кенә ҡыумайым. Мин бары тик бындай кире энергетикалы кешеләр менән аралашыуҙан туҡтайым.

**Уҡытыусы һөнәре - беҙҙең халыҡта иң абруйлы һөнәрҙәрҙең береһе һанала. Һеҙ ҙә ғүмерегеҙҙе мәктәпкә арнағанһығыҙ. Шулай булғас, йәш быуын, рухи ҡиммәттәр тураһында уйланмай ҡалмайһығыҙ. Уларға бәйле, хафаландырған һәм өмөтләндергән нәмәләр барҙыр?**

- Бөтә ғүмеремде бағышлаған һөнәремде мин бик яратып башҡарҙым. Үҙемдә булған бөтә белемде, рухты уҡыусыларыма бирергә тырыштым. Улар белемле генә түгел, ә илһөйәр, телһөйәр, изгелекле, миһырбанлы, әҙәпле, донъяға киң ҡарашлы шәхестәр булһындар өсөн бар көсөмдө йәлләмәнем. Рус теле һәм әҙәбиәте уҡытһам да, тыуған тел һәм әҙәбиәт, халыҡтың ауыҙ-тел ижадына ихтирамды алғы һыҙыҡҡа ҡуйырға тырыштым. Үҙ телен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен белмәгән кеше сит телдәрҙе, әҙәбиәттәрҙе ихлас күңелдән өйрәнә лә, ярата ла алмай, бөтәһе лә әсә теленән башлана. Рус һәм башҡорт телдәрен параллелдәр, сағыштырыуҙар алымы ҡулланып аңлатырға тырыша торғайным. Был алым яңы тема өйрәнеү генә түгел, башҡорт телен ҡабатлау ҙа булып тора ине. Рус әҙәбиәтен өйрәнгәндә лә башҡорт әҙиптәренең әҫәрҙәренә сағыштырып, оҡшашлыҡтар йәки ҡапма-ҡаршылыҡтар табып, анализлай инек. Балаларҙа телгә, илгә, милләткә ихтирам, һөйөү тойғоларын гуманитар предмет уҡытыусылары бергәләп тәрбиәләргә тейештер, тип уйлайым.

Балалар хәҙер элеккесә түгел, тиҙәр. Ризалашмайым. Балалар һәр ваҡытта ла бер иш. Таҙа дәфтәр бите кеүек. Ҡалғаны уҡытыусынан тора. Үҙенде хөрмәт иттерә, предметыңды яраттыра алыуың - үҙеңдең талантың. Бала күңеле - бәрәкәтле ҡара тупраҡ кеүек. Ниндәй орлоҡ сәсәһең дә, нисек тәрбиәләйһең бит... Ниндәй шәхестәр үҫеп сығыуы уҡытыусыға бәйле. Әлбиттә, генетика һәм ғаилә тәрбиәһенең ролен инҡар итмәйем. Ләкин тәжрибәле, үҙ эшен яратҡан, талантлы уҡытыусы балаларҙа ғына түгел, уларҙың ата-әсәләрендә лә үҙенә, үҙ предметына, мәктәпкә ҡарата ихтирам тәрбиәләй ала. Ихтирам бар ерҙә төплө белем дә була.

Замана йәштәре оҡшай минә. Улар үҙ алдарына ҙур маҡсаттар ҡуйып, шуға ынтыла беләләр. Уларҙың мөмкинлектәре лә ҙур. Әүҙемдәр, асыҡтар, ихластар. Беҙҙең мәктәптә уҡыусылар ҡурайҙа, ҡумыҙҙа уйнайҙар, бейейҙәр, милли биҙәүестәр эшләйҙәр, уҡ-яндан аталар, төрлө ярыштарҙа призлы урындар яулайҙар. Рухлы, маҡсатлы егеттәрҡыҙҙар уҡып сығалар. Юғала торған түгелдәр! Әгәр бөтә ерҙә лә шулай булһа, йәштәргә өмөтөм ҙур.

**Бер шиғырығыҙҙа шундай юлдар бар:**
**Бар донъяла юғары көс -**
**Ғәҙеллек бар - шуны беләм!**
**Былай тип әйтер өсөн бик оптимист булырға кәрәктер. Тормоштоң ҡатмарлыҡтары барлығын беләбеҙ, шуға кемдер ышанып та бөтмәҫ. Ә минең белгем килә: ҡасан һәм нисек ныҡыңды һеҙҙә был ышаныс?**

- Тормошта беҙ бик йыш ҡына ғәҙелһеҙлек менән осрашабыҙ. Аҡты ҡара тип иҫбатлаусылар алдында көсһөҙ булып ҡалабыҙ. Күп ваҡытта таныш-белешлек, әшнәлек арҡаһында лайыҡ булмағандар юғары исемдәр, наградалар алалар, ә ысын эш оҫталары ситтә тороп ҡала. Ялағайлыҡ, әшнәлек, туған-тыумасалыҡҡа - йәшел юл. Намыҫлы, уңған, тыныш кешеләрҙе күрмәйҙәр генә түгел, уларҙы хатта эҙәрлекләйҙәр, ҡыйырһыталар, кәмһетәләр. Ауыр, ҡыйын был хис-тойғоларҙы кисереү. Үҙем менән дә байтаҡ ғәҙелһеҙлектәр булды. Был шиғырымда минең Юғары ғәҙеллеккә өмөтөм сағылған. Тормош үҙе һәр кемгә "по заслугам" бирә бит ул. Мин быға бик күп миҫалдар килтерә алыр инем. Суд системаһы камил түгел, ләкин Юғары ғәҙеллек барлығына ышаныс көслә, был минә тормоштағы ғәҙелһеҙлектәрҙе сабыр ғына итеп үткәрергә ярҙам итә, көс бирә. Ошо ышаныс ым яҙмамда оптимист булып ҡалам да инде.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**һорауҙар бирҙе.**

*ӘҘИП ҺҮҘЕ*



# ТӘҠДИР

Ғәжәп тығыҙ, шунлыҡтан ҡараңғы сауҡалыҡ эсе. Йәш, һырғый ҡайындарҙың ботаҡтары олондоң осонда ғына. Берберенә ныҡ сырмалышып, улар ер өҫтөнә тамсы ла ҡояш нуры үткәрмәй. Бындай урындарҙа, майшәм ише төҙ ағастарҙан башҡа, үҫемлектәрҙең бик һирәге генә тереклек итергә һәләтле. Ә үләндәрҙең инде иң әрһеҙҙәре, күләгә урынды үҙ иткәндәре генә үҫә ала. Шуларҙың береһе, күрер күҙгә артыҡ салынып бармаған әскелтем һутлы бөрлөгән. Һыуынды ҡандырыу буйынса унан шәберәк емеш юҡтыр ул. Ни сәбәптән ул ошондай ҡараңғы урындарҙы ярата - уныһын ҡапыл ғына әйтеп булмай.

Эш араһындағы ял мәлендә һалҡынлығы менән йәрәккә ял биреүсе тос емештәрҙе сүпләштереп, берененән-береһе һылыуыраҡ сауҡалар араһынан ашыҡмай ғына китеп барам. Селт-аҡ башҡа олондар араһында ҡырҡа айырылып, күҙгә ташланып торған береһе иғибарымды йәлеп итте. Ул, ни сәбәптәндер, ҡара төҫтә ине. Быныһы тағы ниндәй ағас? Мин уға яҡынлаштым. Әллә беҙҙең яҡтарҙа үтә һирәк осраған ҡара ҡайын инде? Ә, юҡ икән.

Минең ҡаршымда һәләк төҙ, ғәжәп һырғый муйыл ағасы баҫып тора. Ул йәнәшәһендәге шундай уҡ ҡайындарҙан һис ҡалышмайынса, ярышып үҫә. Ботаҡтары ла уларҙыҡы һымаҡ иң осонда ике-өс бөртөк кенә. Шул зәғиф ботаҡтар араһында һирәкһаяҡ булһа ла емеше күренгеләй. Мөғжизәнең бындайын мин тәү тапҡыр күрәм. Йәйрәп китеп, ҡыуаҡланып үҫергә яратҡан муйылды тәбиғәт-әсә ни хәлгә килтергән!

Ошо иҫ китмәле күренешкә ҡарап тороп, шуны аңланым: муйыл өлөшөнә төшкән әлеге ысул ниндәйҙер юл менән ҡайынлыҡҡа килеп эләккән ҡыуаҡ заты - ошо әсәнең бер балаһы өсөн, иҫән ҡалып, артабан тереклек итеүҙән берҙән-бер юлы ла баһа! Башҡаһы юҡ. Сараһыҙҙан ошо яҙмышҡа дусар ителгәнһең икән, эргәндәге дөғүәселәрең менән ярыша-уҙыша тик өҫкә, ҡояш яҡтыһына ынтыл. Юғиһә... Юғиһә, ана, арыраҡ, ҡасандыр йәнә бер муйыл ҡыуағы үҫкән булған. Ул, дөрөҫөрәге, ҡайындар араһында муйылса үҫергә маташҡан. Ләкин уныһынан йүнле дөғүәсе лә, көрәшсе лә сыҡмаған: ярты юлда бирешкән. Хәҙер килеп элекке матур ҡыуаҡ урынында йөмһеҙ тырпайышып, ҡоро-һары ботаҡтар ғына тороп ҡалған.

Шулай, ҡояш аҫтындағы урын, әҙәмдәрҙең һәр ҡайһыһына етмәгән кеүек, ағастарҙың да барыһына ла етмәй булып сыға. Әлеге рәхимһеҙ йәшәйеш ҡағиҙәһе, бәлки, бер кеше өсөн генә түгел, хатта ергә ереген үҫкән ағастарға ла ҡағыла икән. Шундай һорау тыуҙы: ниндәйҙер бер кәрлә бөрләгән ошо ааруһыҙ шарттарҙа ла, бер ни булмағандай, һин дә мин үҫеп, хатта емеш биреп ултырғанда, ни өсөн ағастарҙың бөгөн берҙәре быны булдыра алмай? Үҙемсә тағы асыш яһаным: яҙғанынан узып әллә ҡайҙа бара алмайһың икән. Һин телә йһенме-юҡмы, тәҡдир үҙенекен итә һәм үҙ хөкөмөн сығара. Ул йә күтәрә, йә батыра, йә һыуға һала, йә яндыра. Өсөнсөһө бирелмәгән. Хәйер, теге муйыл ағасы кеүек ныҡ тырышҡанда һәммәһен еңеп сығырлыҡ көс, барыбер, табырға булалыр. Өҫтәүенә, башҡа йән эйәләренән айырмалы, әҙәми заттың мөмкинлектәре лә, һәләте лә сикләнмәгән. Барыһы ла үҙеңдән тора...

Сауҡалыҡ эсендә ныҡышып үҫкән яңғыҙ муйыл миндә ошондай фекерҙәр тыуҙырҙы.

**Иҙрис НОҒОМАНОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# СӘНҒӘТ ӨЛГӨЛӘРЕ...

## бәхетле итә

■ Донъяла әллә күпме кеше кальцийлы өҫтәмәләр ҡабул итә. Әммә яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, кальцийҙы даими ҡулланыу йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре барлыҡҡа килеү хәүефен ике тапҡырға арттыра икән. Белгестәр әйтеүенсә, бөгөн бер Бөйөк Британияла ғына бындай өҫтәмәләрҙе яҡынса 5 миллион кеше ҡабул итә. Сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалау һәм ауырыуҙарҙы иҫкәртеү һөҙөмтәһендә атеросклероз, гипертония, остеопороз һәм башҡа сирҙәрҙе булдырымаҫҡа тырышыусылар һаны көндән-көн арта. Шуға ла АҠШ һәм Европа илдәрендә организмды тонуста тоторға ярҙам итеүсе өҫтәмәләр ҡабул итеү ғәҙәти хәл иҫәпләнә. Тик улар ысынлап та хәүефһеҙме һуң? Германия һәм Швейцария ғалимдарының 11 йыл дауамында үткәргән тикшеренеүҙәрендә урта һәм оло йәштәге 24 мең кеше ҡатнашҡан. Эш төрлө яҡлап алып барылған, әммә шул да асыҡланған: даими рәүештә кальций ҡулланыусыларҙа йөрәк өйәнәге хәүефе ике тапҡырға юғарыраҡ булып сыҡҡан. Шул уҡ ваҡытта рәсми медицина кальцийҙың бер тәүлеклек нормаһы (700 мг) бер зыян да итмәүен, ә уны артығыраҡ ҡулланыу эс ауыртыуына һәм диареяға ғына килтереүен раҫлай.

■ Британия тикшеренеүселәре фекеренсә, төрлө проблемаларҙан ҡотолоу өсөн картиналар галереяһына йыш йөрөү ҙә етә. Бигерәк тә донъя һынлы сәнғәте шедеврҙары кеше психикаһына ыңғай тәьҫир итә. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, Клод Моне йәки Сандро Ботичелли кеүек бөйөк рәссамдарҙың һүрәттәрен ҡараған саҡта кешенең баш мейеһе әүҙемләге кеше ғашиҡ булғандағы мейе торошона оҡшаған була. Бынан тыш, тикшеренеүҙә ҡатнашыусыларҙың ҡанында дофамин гормоны ла күберәк була, был гормон кеше ниндәйҙер кинәнес кисергәндә бүленә. Бындай реакция тикшереүҙәрҙә ҡатнашыусының һәр береһендә күҙәтелә. Эксперттар әйтеүенсә, сәнғәт өлгөләре ҡурҡыу, тынысһыҙланыу кеүек тойғоларҙан арынырға һәм хатта ауыртыуҙан ҡотолорға ярҙам итә.

■ Ауырлыҡты нормала тотоу өсөн күпме түгел, ҡасан ашау мөһимерәк, ти Солк биологик тикшеренеүҙәр институты ғалимдары. Сысҡандарҙа үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙә тәүге төркөмгә көндөҙ, 8 сәғәт дауамында ғына тукланыу мөмкинлек биргәндәр. Икенсе төркөм тәүлектең һәр өлөшөндә лә туҡлана алған. Тәүге төркөмдәге сысҡандар икенсе төркөм менән бер үк күләмдәге аҙыҡты ашап бөтһә лә, уларҙа һимереү һәм башҡа метаболик ауырыуҙар теркәлмәгән. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, һимереү аҙыҡ ҡабул итеү графигы һәм организмдың биологик сәғәттәренең тура килмәүе менән бәйле.

■ Иҡтисади хеҙмәттәшлек һәм үҫеш ойошмаһы иҫәпләп сығарыуынса, "яҡшы тормош индексы" буйынса иң юғары балды Австралия алған. Был ойошма илдәр рейтингында ғүмер оҙайлығы, килем, хәүефһеҙлек, эшһеҙлек кимәле һәм башҡа күрһәткестәрҙе иҫәпкә ала. Быларҙың барыһы ла кеше тормошоноң сифатын билдәләй. Австралияла уртаса ғүмер оҙайлығы 82 йәш тәшкил итә, 15-64 йәштәге граждандарҙың 72 проценты эшләй, эшһеҙлек (башҡа илдәр менән сағыштырғанда) 5 процент кимәлендә еткән. Аналитиктар раҫлауынса, "йәшел континент" донъя иҡтисади көрсөгөнән сығыусы илдәр араһында ла беренсе буласаҡ.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА



# ҺАРЫ МӘТРҮШКӘ

**Һары мәтрүшкә, урыҫтарҙа "зверобой продырявленный" тип аталған үлән июндән алып августа тиклем һары сәскә ата. Башҡортостанда киң таралған үлән. Ул бик күп файҙалы матдәләргә бай һәм халыҡ дауаһында киң ҡулланыла. Һары мәтрүшкәне сәскә атҡан сағында йыйып алалар һәм ҡоро, күләгәле урында киптерәләр.**

Һары мәтрүшкә ярҙамында дауалап ҡарамаған ауырыу юҡтыр, уны тамаҡ ауыртыуҙан да, ауыҙҙан насар еҫ килеүҙән дә файҙаланғандар. Уның менән үпкә туберкулезын (хатта ҡан ҡаҡырған осраҡтарҙа) дауалау тураһында күптәр белә, әммә һары мәтрүшкә тамыры һөйәк туберкулезынан шифалы булыуы бик һирәк белгестәргә билдәле. Үлән шулай уҡ бауыр һәм ашҡаҙан шештәре, тиренең яман ауырыуҙарынан ҡулланыла.

Һары мәтрүшкә айырыуса аш һеңдереү ағзалары сирҙәренән яҡшы ярҙам итә - гастрит, колит, ашҡаҙан һәм бөйән эсәге сей ябаһы, төрлө сәбәпле эс китеүҙән, шулай уҡ бауыр һәм үт ҡыуығы ауырыуҙарынан, цистит, ҡатын-ҡыҙҙар ауырыуҙарынан, аналыҡтан ҡан килеүҙән. Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары булғанда йөрәк мускулын нығыта, эндокардит, миокардиттан ярҙам итә. Невралгия, фалиж, быума ауырыуҙарынан, нервылар системаһы ҡаҡшағанда тынысландырғыс булараҡ, хатта простатит һәм енси көсһөҙлөктән дауаланғанда ла ыңғай йоғонтоһо һиҙелә.

Яңы үләндең һутында төнәтмәһенә ҡарағанда файҙалы матдәләр күберәк. Һары мәтрүшкә майы шифалы. Уны йышыраҡ яңы йыйылған үләнгә (100 грамм үләнгә 600 мл үҫемлек майы) 30 минут ҡайнатып әҙерләргә кәңәш ителә. Әммә ябайыраҡ ысул да бар: быяла банканың "иңбашына" тиклем сәскәһен тығыҙлап һалып, зәйтүн майын тултырып ҡойорға, ул булмаһа, түбән температурала һығылған үҫемлек майы ҡулланырға. Үләнде баҫырырға, ул майҙан өҫкә ҡалҡып сығырға тейеш түгел, сөнки күгәреүе ихтимал. Дауа менән 3-4 аҙнанан һуң ҡуллана ла башларға була, әммә 2-3 айҙан һуң ғына үләнен һөҙөп алһаң, яҡшыраҡ.

Спиртлы төнәтмәне әҙерләгәндә 3 литрлыҡ банканың яртыһына һары мәтрүшкә сәскәһен һалырға, банка тулғансы араҡы ҡойорға, ҡапҡас ябырға һәм ҡараңғы урынға ҡуйырға. Көн һайын һелкетеп торорға. Бер айҙан да кәм төнәтмәҫкә.

**Нейроревматизм.** Һары мәтрүшкә төнәтмәһен ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 3 тапҡыр 50-шәр тамсы йоторға, артынан ярты стакан шифалы иренсәскә (чистец лекарственный) үләне төнәтмәһен эсергә. Һуңғыһын бер нисә аҙна эскәндән һуң, юшан (вероника), туғай яраны, бөрмәкәй (подмаренник), ҡылысъяпраҡ (сабельник), еркәүек (таволга) үләндәре төнәтмәһенә сиратлап алмаштырырға мөмкин.

**Ҡоймос һөйәге, геморрой һыҙлағанда** һары мәтрүшкә орлоғо төнәтмәһенә ултырып дауаланырға була. Ванна яһау өсөн 1 ҡалаҡ орлоҡҡа ярты литр һыу алырға, 5 минут ҡайнатырға.

**Баш яраланһа.** 1-әр балғалаҡ һары мәтрүшкә майын ашарҙан бер аҙ алда көнөнә 2-3 тапҡыр эсергә.

**Аденоидтар.** Һары мәтрүшкәне киптереп онтарға һәм иләргә. Онтаҡтың 1 өлөшөнә 4 өлөш аҡ май ҡушырға. Ошо ҡатышманың һәр балғалағына 5-әр тамсы сөйәл үләне һутын ҡушырға һәм эмульсия барлыҡҡа килгәнсе һелкергә. Шифаны көнөнә 3-4 тапҡыр танауға тамыҙырға.

**Эскелек.** 2 ҡалаҡ киптерелгән һары мәтрүшкә үләненә 250 мл ҡайнар һыу ҡойоп, һыу боҫонда 20-30 минут тоторға. Һыуынғас, һөҙөргә. Иртәнге һәм киске аш алдынан 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Был рәүешле 2 аҙна дауаланырға. Төнәтмәне даими эскән кеше алкоголдән биҙә башлай. Был сара тулыһынса арындырмаһа ла, ярҙам иткән осраҡтары бар.

**Тәмәке тартҡанда.** 8 ҡалаҡ киптерелгән үләнгә 0,5 литр араҡы ҡойоп, 10 көн төнәтергә. Ашағандан һуң көнөнә 3 тапҡыр һыуға 40-50 тамсы һалып эсергә.

**Трофик сей яра.** Һары мәтрүшкә майына мансылған марлыны даими баҫып йөрөргә. Бинт менән нығытып бәйләп, оҙайлы йөрөтөргә була.

**Күкрәк биҙе яман шеше (рак).** Көн һайын 2-3 тапҡыр һары мәтрүшкәнең араҡылағы төнәтмәһе менән 20-30 минутлыҡ сылатҡыстар яһарға.

**Тире яман шеше (рак).** Сирле урындарға һары мәтрүшкә майы менән мөмкин тиклем йышыраҡ аппликация яһарға.

**Иҫкәрмә:** һары мәтрүшкәне ҡан баҫымы юғары булғанда оҙайлы ҡулланырға ярамай. Йөклө ҡатындарға ла был үлән ҡәтғи тыйыла. Үләндең ҡаты сәйе хатта сәләмәт кешеләрҙең дә ашҡаҙанына зыян килтереүе ихтимал, ә юғары әселектән гастрит һәм ашҡаҙан сей ябаһы менән яфаланыусының эсәктәре ауыртыуы бар. Һары мәтрүшкәне саманан артыҡ ҡулланыу арҡаһында баш ауырта, сонҡа тартышыуы, күңел болғаныуы мөмкин.

Һары мәтрүшкә менән бер ваҡытта аминокислоталар, триптофан һәм тирозин, амфетаминдар, астма менән ауырыусыларға - ингалятор менән ҡулланырға ярамай. Шулай уҡ һыра, ҡәһүә, шарап, шоколад, ыҫланған йәки маринадланған ризыҡтар, йогурт, үҫемлектәр һеркә осорғанда башланған аллергик ауырыу - поллинозға ҡаршы дарыуҙар, танауға тамыҙа торған саралар ҙа был үлән менән бергә ҡулланырға тейеш түгел. Шулай уҡ һары мәтрүшкә дауаларын температура юғары булғанда ҡабул итмәҫкә. Уны оҙайлы ҡулланыу потенцияны түбәнәйтә. Һары мәтрүшкә сәйен йәки төнәтмәһен эскәндә ҡояшта ҡыҙыныуҙан тыйылырға.



# ҺУҠЫР КЕСЕРТКӘН

**Һуҡыр кесерткән, руссаһы "яснотка белая", кесерткәнгә оҡшаған, әммә йомшаҡ япраҡлы, аҡ сәскәле үлән. Халыҡ дауаһында уның үләне йәки һуты ҡулланыла, шулай ҙа йышыраҡ сәскәһе. Әлбиттә, сәскәһен кәрәкле күләмдә йыйып алыуы еңелдән булмай.**

Һуҡыр кесерткәндән эшләнгән дауаларҙы бөйәл ҡыуығы ауырыуҙарынан (бөйәл ҡыуығы спазмы, миелит, уретрит, цистит, неврит), бронхит, пневмония, талаҡ ауырыуҙары, аҙҡанлылыҡ, күрем һыҙландырып килгәндә, үпкә, аналыҡ, танау һәм башҡа ағзаларҙан ҡан килгәндә, һары, тапма ауырыуҙарынан, йөҙөнһөҙлөк, балаларҙың әҫпеһе ҡалҡыу, кесерткән биҙгәге, экзема, сиҡан, неврастения, невроз, эс китеү, дизентериянан эсәләр.

Һуҡыр кесерткән аналыҡ мускулдарының тартылыуын йышайта. Шуға күрә уның төнәтмәләре акушер-гинекология өлкәһендә киң ҡулланыла. Һуҡыр кесерткән бик файҙалы. Уның сәскәләрен тын юлдары ауырыуҙары булғанда, ә үләнен аш һеңдереү боҙолоуҙан һәм аппетитты көсәйтеү өсөн ҡулланалар.

Үлән сәйен хатта һары ауырыуы, сиҡан сығыуҙы һәм тәндең башҡа эренле ауырыуҙарын дауалағанда эсәләр.

**Баланың әҫпеһе ҡалҡһа (диатез).** 2-3 ҡалаҡ һуҡыр кесерткән үләнен термосҡа һалып, 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға. 1-2 сәғәт төнәтергә. Баланың йәшенә ҡарап самалап эсерәләр: сабыйҙарға көнөнә 3-4 тапҡыр 1-2 балғалаҡ. 2 йәштән өлкәнерәктәргә шулай уҡ көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ, ә 5 йәштән уҙғандарға сирек стакандан ярты стаканға тиклем. Йыуындырғанда йәки ванна ингәндә төнәтмәнең миҡдарын ике тапҡыр күберәк тотонорға була.

**Гломерулонефрит (ике яҡ бөйөрҙөң дә тотош шешенеүе).** 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу нисбәтендә самалап алырға, 1-2 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә, ашарҙан алда дауаланыу яҡшыраҡ.

**Инсульт.** 3 ҡалаҡ үләнгә 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, талғын утта 10 минут ҡайнатырға. Төнгөләккә ҡалдырырға. Ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

**Неврастения.** Үләндең һутын һығып алып, ашарҙан алда көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Пневмония, бронхит.** 1 ҡалаҡ киптерелгән сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыуынғас, һөҙөп алырға. Ашағандан һуң 30-40 минут үткәс, көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

**Һуҡыр кесерткән ағыулы түгел.** Шуға уны саманан артыҡ ҡулланыуҙың етди эҙемтәләре юҡ. Әммә һуҡыр кесерткәнде ҡандың ойошоусанлығы юғары булғанда, атоник эс ҡатыу, ҡан баҫымы түбәнәйгәндә ҡулланыу кәңәш ителмәй. Был үлән ҡан баҫымы юғары булғанда файҙалыраҡ. Һуҡыр кесерткән йөклө ҡатындарға ярамай.

**Рим ӘХМӘДОВ китабынан.**

***✓ Ковид беҙҙе өсөнсө йыл рәттән эҙәрлекләй һәм шуға күрә ревакцинация эшләтеү мотлаҡ. Вирус үҙгәреп тора, кешенең иммун системаһы уның менән осрашыуға әҙер булырға тейеш.***



МЕДИЦИНА ХӘБӘРҘӘРЕ

# БАЛАЛЫ БУЛҒЫҢ КИЛӘМЕ?



**Һаулыҡ һаҡлау министрлығы хәбәр итеүенсә, ЭКО хеҙмәтен республикала йәшәгән һәр ҡатын-ҡыҙ мотлаҡ медицина страховкаһы иҫәбенә бушлай алыу мөмкинлегенә эйә. Экстракорпораль аталандырыу - түлһеҙлекте дауалауҙың иң һөҙөмтәле ысулы. Унын менән Рәсәйҙәге һәр ғаилә файҙалана ала. 2021 йылда ғына ла илдә 87 меңгә яҡын ЭКО циклы уҙғарылған.**

**Ярҙам һорап ҡайҙа мөрәжәғәт итергә?**

Йәшәгән урын буйынса ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһына мөрәжәғәт итергә. Унда "түлһеҙлек" диагнозын раҫлау өсөн тикшереү үтергә кәрәк. Әгәр ЭКО-ға ғаилә әҙерләнһә, ике партнёр ҙа тикшерелә.

**Иң мөһиме:** 6-12 ай дауамында консерватив дауаланыуҙың һөҙөмтәһе булмаған осраҡта ошо процедураға йүнәлтмә бирелә.

**Был процедураны кемгә эшләргә ярамай?**

Һаулыҡ торошо һәм овариаль резерв буйынса сикләүҙәр булған ҡатын-ҡыҙҙарға эшләргә ярамай. Антимюллер гормоны (АМГ) - кәмендә 1,2 нг/мл, ике түллекте фолликулдар кәмендә 5-әү булырға тейеш. АМГ йәшкә ҡарап кәмей һәм йомортҡалыҡтың фолликуляр резервын күрһәтә: әгәр ул үтә түбән булһа, ЭКО программаһы, ҡағиҙә булараҡ, һөҙөмтә бирмәй. Йөклөлөккә йәки овариаль стимуляцияға ҡаршылыҡтар булған пациенттар, дауаланып, ҡаршылыҡтар бөтөрөлгәндән һуң ғына ЭКО-ға йүнәлтмә алырға мөмкин.

Башҡортостанда йәшәүселәргә ЭКО сират буйынса яһала. Сират Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы комиссияһы тарафынан ярҙамсы репродуктив технологияларҙы ҡулланыу өсөн сикләүҙәрҙе һәм ҡаршылыҡтарҙы иҫәпкә алып төҙөлә. Сиратта тороусылар һәм пациенттың шифры (шәхси мәғлүмәттәрһеҙ) күрһәтелгән сират ҡағыҙының электрон формаһы Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы сайтында урынлаштырылған.

Документтар Республика медицина-генетика үҙәгендә ҡабул ителә. Адресы: Өфө ҡалаһы, Чернышевский урамы, 41, 2-се ҡат. Ҡабул итеү ваҡыты: дүшәмбе - йома, сәғәт 9.00-ҙан 15.00 сәғәткә тиклем. Комиссия секретары менән бәйләнеш телефоны: 7 (347) 246-83-97.

# ТАЖЗӘХМӘТ СИГЕНМӘЙ



**Донъяла тажлы зәхмәттең етенсе тулҡыны башланды. Ауырыуҙың көсәйеүе Европа илдәрендә, Израиль, Америкала күҙәтелә. Көҙгә был тулҡын Рәсәйҙә лә ҡапларға мөмкин, ти белгестәр. Белгестәр әйтеүенсә, республикала коллектив иммунитет бик түбән һәм ул 20,7 процент тәшкил итә. Шуға күрә хәҙерҙән үк вакцинация һәм ревакцинация өлкәһендә етди эшмәкәрлек алып барырға кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә ала улар.**

Башҡортостан халҡына нимә көтөргә һәм үҙ һаулығын нисек һаҡларға кәрәклеге тураһында Башҡортостан Республикаһы Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш инфекционисы, БДМУ-ның йоғошло ауырыуҙар кафедраһы етәксеһе Дамир Вәлишин һөйләй.

- Ковид беҙҙе өсөнсө йыл рәттән эҙәрлекләй һәм шуға күрә ревакцинация эшләтеү мотлаҡ. Вирус үҙгәреп тора, кешенең иммун системаһы уның менән осрашыуға әҙер булырға тейеш. Айырыуса хроник сирҙәре булғандарға уяу булырға кәрәк, сөнки сир уларҙа ауырыраҡ үтә.

Тажзәхмәт вирусы даими рәүештә үҙгәрә. "Омикрон" булды, унан "Стелс-омикрон", хәҙер уның үҙенең әллә нисә төрө барлыҡҡа килде. Сирҙең нисек уҙыуы һәр кешенең һаулығы ниндәй булыуға бәйле. Тажзәхмәт ҡан тамырҙарына айырыуса ҙур зыян килтерә.

Вакцина эшләтеүҙең һәм ревакцинация үтеүҙең дә аныҡ ҡағиҙәләре бар. Мәҫәлән, сирҙең көҙ миҙгелендәге күтәрелеүенә әҙер булыу өсөн яңы тулҡынға тиклем бер ай алдан әҙерләнергә кәрәк. Беренсе компоненты июль айында, икенсеһен август урталарында эшләтеү яҡшы. Әгәр вакцинация үткән булһағыҙ, августа бер компонентлы "Спутник Лайт" менән ревакцинация эшләтеү ҙә етә.

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Аң һәм тән бәйләнеше

Аңдың тән күҙәнәктәренә йоғонтоһо тиҫтәләрсә йылдар ныҡлы өйрәнелде, әммә был бәйләнеште микроскоп ярҙамында асыҡлап булмай. Бәлки, киләсәктә быға телескоп ярҙам итер, сөнки Клив Бакстер был "беренсел ҡабул итеү" химик реакциялар йәки нервылар импульстарына нигеҙләнмәгән, ә Йыһан тәбиғәтенә һалынған, тип раҫлай. Бындай ҡараш яңы түгел.

Бынан йөҙҙәрсә йылдар элек Австралия актеры Маттиас Александер үҙенең һөйәктәре менән уйында ғына һөйләшеп, сәхнә теле проблемаларынан ҡотола. Ул: "Муйыным еңел борола, башым өҫкә лә аҫҡа ла йөрөй, арҡам турая һәм борола", - тип ҡабатлай. Шунан башлап Александер ысулын ҡулланып, күп уҡытыусылар донъяның төрлө төбәктәрендә "дауалап булмаған" кешеләргә ярҙам итә.

Был ысул гипноз, үҙ-үҙеңде ышандырыу һәм Фелденкрайс, Симонтон, Сильва кеүек аң менән тән араһындағы бәйләнеште камиллаштырыу менән шөғөлләнгән сағыу шәхестәр аша киң танылыу тапты. Мойше Фелденкрайс был өлкәгә "Хәрәкәт аша аңлау" эше менән өлөш индерә. Был хеҙмәттә психик һәм физик процестар берләштерелә. Карл Симонтон яман шеш ауырыуҙарын хатта "дауалап булмаған" осраҡтарҙа ла ремиссия мәсьәләләрендә ысын квант һикереүе яһай: ул ауырыуҙарға көсөргәнештән арынырға ла ҡан күҙәнәктәренең яман шеш менән көрәштә еңеп сығыуын күҙалларға тәҡдим иткән. Фәндә уның методикаһы "психонейроиммунология" атамаһын ала. Хосе Сильва хәҙер "Сильва ысулы" тип аталған аң менән идара итеү ысулын эшләй. Ул төрлө илдәрҙәге миллионлаған кешене насар ғәҙәттәрҙән арыныу, тәндең ағзалары һәм системалары эшен нормаллаштырыу, ҡуйған маҡсаттарға өлгәшеү һәм бихисап мөғжизәле һәләттәр асыуға килтергән көсөргәнештән арынған альфа-торошҡа инергә өйрәтә.

Бөгөн "психонейроиммунология" атамаһы "киберфизиология" термины менән алмашынды, сөнки дауалау тураһындағы фән аң һәм тәндең үҙ-ара бәйләнешен аңланы, атап әйткәндә, уның иммун системаһы менән генә сикләнмәүен, ә организмдың һәр күҙәнәгенә таралыуын асыҡланы. Бөтөн күҙәнәктәр, туҡымалар һәм ағзалар аңдың бойороҡтарын "ишетә". Был йүнәлештең һөҙөмтәләрен йомғаҡлап, киберфизиологияның мөһим мәлдәрен тәҡдим итәм.

Көсөргәнештән арыныу ғәҙәттәгесә башҡарыла. Уйығыҙҙа ғына тәнегеҙҙең һеҙҙе борсоған урынын күҙ алдына килтерегеҙ. Уның менән матур итеп һөйләшегеҙ, уның "төҙәлеүен" һорағыҙ. Уның нисек яуап "биреүен" тыңлағыҙ. Һуңынан был участканы сәләмәт тип күҙ алдына килтерегеҙ.

**Уңышығыҙға ярҙам итәсәк бер нисә кәңәш:**

- артыҡ уйламағыҙ - эшләгеҙ һәм һөҙөмтә көтөгөҙ;
- күҙәнәктәрегеҙгә ҡәтғи бойороҡтар бирмәгеҙ, дошмандарса мөнәсәбәттәрҙән ҡасығыҙ, улар бит беҙҙең дуҫтар;
- "сығышығыҙҙы" алдан әҙерләмәгеҙ - һүҙҙәр ирекле, иркә һәм ихлас булһын;
- мотлаҡ тәрән көсһөҙләнеү үткәрегеҙ, кәрәк икән, кирегә һанау ысулын ҡулланығыҙ;
- уйығыҙҙағы картиналарҙы файҙаланығыҙ: уны нисегерәк күҙ алдына килтереү мөһим түгел, аң "кем" тураһында һүҙ барғанын үҙе аңлар.

Һеҙҙең табибығыҙҙың киберфизиология менән таныш булмауы ла ихтимал. Әммә аң һәм тән һеҙҙеке һәм уларҙы дауаланыуға ғына түгел, профилактикаға ла йүнәлтеп була. Киберфизиология медицина дауалауын алыштырмай, әммә уға ярҙам итә.

**Роберт СТОУН.**

**(Дауамы бар).**

БЫЛ ҠЫҘЫҠ!



# ИҢ ЙӘШ УЙЛАП ТАБЫУСЫЛАР

**Балалар донъяны үҙҙәренсә аса һәм уға үҙҙәренең яңылыҡтарын индерә. Күп балалар өлкәндәргә ҡарағанда зирәклеге, уйлап эш итеүе менән ғәжәпкә ҡалдыра. Нимәнелер уйлап сығарыу һәләте, фекерҙәренең ҡалыплашып, ҡатып ҡалмауы бала кешене асыштарға алып килә, тормошобоҙҙо яҡшыртыуға, камиллаштырыуға хеҙмәт итә. Күптәр файҙалана уларҙың асышы менән, бала кеше уйлап тапҡан икән, тиғән уй хатта башҡа ла килмәй. Ҡайһы берҙәре менән таныштырыу бөгөн маҡсатыбыҙ. Бәлки, беҙҙең арала ла йәмғиәт үҫешен яҡшыртыуға өлөш индереүсе шундай балалар йәшәп ятаһыр?**

## Һыу аҫты кәмәһе

Джастин Бекермен үҙенең асышы менән ер йөҙөндәге миллионлаған кешенең хыялын тормошҡа ашырҙы, тиергә була. Бәләкәй генә һыу аҫты кәмәһен эшләр өсөн ул ике мең доллар аҡса сарыф иткән.

Был тырыш үҫмерҙең ҙур диаметрлы пластик торба ҡулланып төҙөлгән субмаринаһы ике метр тәрәнлеккә төшә һәм һыу аҫтында бер нисә сәғәткә ҡалырға мөмкинлек бирә. Джастиндың атаһы, Кен Бекерман, балаһының хыялдарын тормошҡа ашырыуҙа һәр ваҡыт ярҙам итеүен, тәжрибә яһаған сағында уға бер ниндәй ҙә тыйыу һалмауын әйтә. "Джастиндың бәләкәйҙән үҙенең айырым уйнай торған урыны булды, нимә эшләп ҡараһа ла, ирек бирҙем. "Булмаҫ, эшең килеп сыҡмаҫ", тигән һүҙҙе әйткәнем юҡ. Ынтылышын хуплайым. Эҙләнергә мөмкинлек бирәм һәм ниәттәренең тормошҡа ашыуын теләйем. Хәлдән килгәнсә, үҙем дә ярҙам итергә генә тырышам. Мәктәптә лә уны аңлайҙар, шуға дәрескә йөрөүенә лә үҙгәреш индерҙеләр",- ти ул. Джастиндың ата-әсәһе әйтеүенсә, малай тәүге асышын ун ике йәшендә яһай. Ул иҙән йыуғыс машина яһай. Артабан видео уйындар ҡарарға яйлы торҡа, видео уйын ҡоралы, шулай уҡ алыҫтан идара итә торған уйынсыҡтар яһай. Маҡсатлы Джастин ун һигеҙ йәшендә йәнә лә өс метрлыҡ субмарина яһай, был кәмә менән туғыҙ метр тәрәнлеккә төшөп була.

## Батареяһыҙ фонарь

Канадала йәшәүсе 15 йәшлек Энн Макосински исемле ҡыҙ батареяһыҙ эшләй алған фонарь уйлап таба. Макосински уйлап тапҡан яҡтыртҡыс ҡулдың һәм тирә-яҡ мөхиттең температуралар айырмаһында эшләй. Был асышын Энн ГУГЛ конкурсында күрһәтә һәм унда еңеүсе исемен яулай. "Бала саҡтарында минең атай-әсәйем уйынсыҡтарҙы үҙҙәре яһап алыр булған. Минең өсөн дә өйҙә шундай шарттар булдырҙылар. Бәләкәйҙән транзистор, принтер, компьютерҙарҙы һүтеп-ҡоршап ҡарай, үҙемсә тәжрибәләр яһай торғайным. Әле лә мин балаларға бөтөн телгән уйынсыҡтарҙы алып бирәм, ә уларҙың ижадын үҫтереү яғындамын", - ти ҡыҙ. Температура айырымлығында эшләгән фонарь Пельтье эффектына нигеҙләнә, йәғни ул дүрт үткәргес ярҙамында эшләй. Бер яҡ осон йылытып, икенсе яҡ осон һыуытһаң, улар электр энергияһын үткәреүсәнгә әйләнә. Энндың фонаре температура айырымлығы биш градустан юғары булғанда яҡшы эшләй. Бынан тыш, Энн эсе эсемлектең энергияһын йыйып, электрға әйләндерә торған ҡәһүә көрөшкәһе яһаған. Кәһүә эскән арала бер ыңғайҙан телефондың батареяһын туҡландырырға мөмкин. "Мин хеҙмәтемдең ниндәйҙер айырым кешеләрҙән түгел, ә тотош планетабыҙ тормошон яҡшыртыуын теләйем",- ти Энн. Әлеге көндә ул кескәй балаларҙа технологияларға ҡыҙыҡһыныу уята торған төрлө уйынсыҡтар яһау менән шөғөлләнә.

**(Дауамы бар).**



**25 ИЮЛЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20, 23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
22.40 Д/ф "Мариуполь". [16+]
0.50 Т/с "София". [16+]
1.50, 2.45 Т/с "Королева бандитов". [12+]
3.40 Т/с "Женщины на грани". [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Серебряный бор". [12+]
11.00 Новости недели (на рус.яз).
11.45 Специальный репортаж. [12+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 "Бай". [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе... [12+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
17.30 История одного села. [12+]
17.45 "Орнамент". [6+]
18.00 Пофутболим? [12+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Ҡустәнәс. [12+]
19.30 "Дарман". [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 "Елкән". [6+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Спортивная история. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Анна Каренина". [16+]
1.30 Бәхетнамә. [12+]
2.15 Спектакль "Вечерняя трапеза". [12+]
4.00 Ҡустәнәс. [12+]
4.30 История одного села. [12+]
4.45 Честно говоря. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**26 ИЮЛЯ**
**ВТОРНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "София". [16+]
1.05, 2.00 Т/с "Королева бандитов". [12+]
2.50 Т/с "Женщины на грани". [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 Хазина. [0+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 "Этно-краса". [6+]
15.30 "КультУра". [6+]
15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
17.30 "Дорога к храму". [0+]
18.00 "Криминальный спектр". [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Колесо времени. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 Ныҡ бул. [6+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 "Это моя профессия". [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Северное сияние". [16+]
1.15 Бәхетнамә. [12+]
2.00 Спектакль "Озеро моей души". [12+]
3.30 Х/ф "Северное сияние". [16+]
5.00 Үткән гүмер. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**27 ИЮЛЯ**
**СРЕДА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "София". [16+]
1.05, 2.00 Т/с "Королева бандитов". [12+]
2.50 Т/с "Женщины на грани". [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 Республика LIVE #дома. [12+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 Тормош. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 "МузКәрәҙ". [0+]
15.30 "Сулпылар". [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
17.30 Спортивная история. [12+]
18.00 Дорожный патруль. [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 "Честно говоря". [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Историческая среда. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Сиделка". [16+]
1.15 Бәхетнамә. [12+]
2.00 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]
3.45 Автограф. [12+]
4.15 Башкорттар. [6+]
4.45 Әлләсе. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]
5.35 Местное время. Вести-Башкортостан.

**28 ИЮЛЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "София". [16+]
1.05, 2.00 Т/с "Королева бандитов". [12+]
2.50 Т/с "Женщины на грани". [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00 Счастливый час. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 Бәхетнамә. [12+]
14.15 "Орнамент". [6+]
14.30 "Это моя профессия". [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [6+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
18.00 "Криминальный спектр". [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Ап-асыҡ. [12+]
19.30 Автограф. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 Башкорттар. [6+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Пари на любовь". [16+]
1.00 Бәхетнамә. [12+]
1.45 Спектакль "Любовь под вязами". [12+]
4.15 История одного села. [12+]
4.30 Колесо времени. [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).
5.41 Утро России.

**29 ИЮЛЯ**
**ПЯТНИЦА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Х/ф "Легенда №17". [6+]
23.50 Х/ф "Тренер". [12+]
2.20 Х/ф "Дуэлянт". [16+]

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]
11.00 Новости (на рус. яз).
11.15 "Йома". [0+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Республика LIVE #дома. [12+]
12.30 Үткән гүмер. [12+]
13.00 Новости (на баш. яз).
13.30 "Дочь лета". [12+]
14.00 БашГост. [6+]
14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]
15.00 Интервью. [12+]
15.15 "Алтын тирмә". [0+]
16.00 Новости (на рус. яз).
16.15 "Гора новостей". [6+]
16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
17.30 "Аль-Фатиха". [12+]
18.00 Дорожный патруль. [16+]
18.15 Интервью. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 "Башкорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
19.45 Специальный репортаж. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 Интервью. [12+]
20.45 История одного села. [12+]
21.00 "Йома". [0+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 БашГост. [12+]
22.30 Новости (на баш. яз).
23.00 Х/ф "Линкольн для адвоката". [16+]
1.30 Спектакль "Найдите мне папашу". [12+]
3.30 Х/ф "Пари на любовь". [16+]
4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
5.30 "Млечный путь". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**30 ИЮЛЯ**
**СУББОТА**
**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.35 Т/с "Черное море". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Рыжик". [12+]
0.50 Х/ф "Старшая сестра". [12+]
4.00 Х/ф "Ночная фиалка". [16+]

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз).
8.15 "Аль-Фатиха". [0+]
8.45 "Орнамент". [6+]
9.00 "Это моя профессия". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Елкән". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "КультУра". [6+]
11.00 "МузКәрәҙ". [6+]
11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]
11.30 Ныҡ бул. [6+]
12.00 Ҡустәнәс. [12+]
12.30 Бәхетнамә. [12+]
13.00 Автограф. [12+]
13.30 Башкорттар. [6+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Концерт Иделя Нургалина. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз).
19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
19.45 Д/ф "По проселочной дороге к мечети". [12+]
20.15 "Сәңгелдәк". [0+]
20.30 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]
22.30 Новости недели (на баш. яз).
23.15 Х/ф "Лекарь. Ученик Авиценны". [16+]
3.45 Новости недели (на баш. яз).
4.30 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]
6.00 Автограф. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз).

**31 ИЮЛЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**РОССИЯ 1**

5.35, 3.15 Х/ф "Ожерелье". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Утренняя почта с Николаем Басковым.
9.10 Сто к одному.
10.00, 12.00, 17.00, 20.00 Вести.
10.30, 14.15 Т/с "Черное море". [16+]
13.00 Торжественный парад ко Дню Военно-морского флота РФ.
18.00 Песни от всей души. [12+]
22.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Д/ф "Адмирал Кузнецов. Флотоводец Победы". [12+]
1.40 Х/ф "Прощание славянки". [16+]

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Орнамент". [6+]
9.00 "Бай". [12+]
9.30 Тормош. [12+]
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 "Городок АЮЯ". [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.00 М/с "Нурбостан". [0+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
14.45 Үткән гүмер. [12+]
15.15 "Дорога к храму". [0+]
15.45 Историческая среда. [12+]
16.15 "В кругу друзей". [12+]
18.15 Х/ф "Ловец ветра". [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15 Әлләсе... [12+]
21.00 Республика LIVE #дома. [12+]
21.30 Новости недели (на рус.яз).
22.15 Специальный репортаж. [12+]
22.30 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Х/ф "Помни меня". [16+]
1.00 Спектакль "Чужой ребенок". [12+]
3.15 Моя планета Башкортостан. [12+]
3.45 Х/ф "Помни меня". [16+]
5.30 Историческая среда. [12+]
6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]
6.45 Специальный репортаж. [12+]

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1443-1444 һижри йылдар.*

| Июль (Зөлхиҗә - Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (26) дүшәмбе | 3:45 | 5:15 | 13:30 | 18:52 | 21:28 | 22:58 |
| 26 (27) шишәмбе | 3:47 | 5:17 | 13:30 | 18:51 | 21:26 | 22:56 |
| 27 (28) шаршамбы | 3:49 | 5:19 | 13:30 | 18:50 | 21:24 | 22:54 |
| 28 (29) кесе йома | 3:50 | 5:20 | 13:30 | 18:49 | 21:23 | 22:53 |
| 29 (30) йома | 3:52 | 5:22 | 13:30 | 18:48 | 21:21 | 22:51 |
| 30 (1) шәмбе | 3:54 | 5:24 | 13:30 | 18:47 | 21:19 | 22:49 |
| 31 (2) йәкшәмбе | 3:55 | 5:25 | 13:30 | 18:46 | 21:17 | 22:47 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

КЕМ АЛЫҠ?

**Быйылғы йылдың икенсе яртыһында ла "Киске Өфө" гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы, уҡымышлы, вайымлы уҡыусыларыбыҙға рәхмәтлебеҙ. "Аңлы уҡыусы" тип атауыбыҙ юҡҡа түгел, сөнки хәҙер гәзит-журнал-китап уҡыусылар тамам һирәгәйҙе. Күрәһең, аҡ ҡағыҙ битендәге һүҙҙе һанлаусы, уның әһәмиәтен баһалаусы аңлылар сафы һирәгәйә бара. Ә шулай ҙа бындай статустағы уҡыусыларыбыҙҙы юғалтып бөтмәгәнбеҙ әле. Бар әле гәзит һүҙен үҙ итҡәндәр, "Гәзиттә бит шулай яҙылған!" тип, һәр һүҙен гәзит һүҙе менән йөпләүселәр - улар беҙҙә ҡағыҙ баҫмаларҙың киләсәктә лә йәшәйәсәгенә өмөт уята. Ә беҙ был өмөттөң аҡланыуынан дәртләнеп, уҡыусыларыбыҙҙы рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, йөкмәткеле яҙмаларыбыҙ менән танһыҡтарын ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ.**

# ИҢ ШӘП БҮЛӘК - КИТАП!



**Шулай итеп, үткән миҙгелдә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан түбәндәге уҡыусыларыбыҙ ошо матур китаптарға лайыҡ булды:**

Ишембай ҡалаһынан Рафаэль Мөхәмәтов, Баймаҡ районы Мерәҫ ауылынан Рәмил Вәлиев, Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылынан Тәгзимә Латипова, Бүздәк районы Ҡанлы-Төркәй ауылынан Илдар Шәйәхмәтов, Ауырғазы районы Моразым ауылынан Әминә Ҡуҫкарова, Мәләүез ҡалаһынан В. Айыткolова - **Ноғман Мусин "Һайланма әҫәрҙәр";**

Ғафури районы Ҡауарҙы ауылынан Роберт Бәширов, Көйөргәҙе районы Ермолаево ауылынан Л. Ҡәйүпова, Учалы районы Мәҫкәү ауылынан Таңсулпан Ғәбәйҙуллина, Баймаҡ районы Төркмән ауылынан Фәзимә Ниғмәтуллина, Йылайыр районы Япарһаҙ ауылынан Рауил Вахитов, Мәләүез районы Ҡотош ауылынан Самат Шәрипов - **Зәйнәб Биишева "Һайланма әҫәрҙәр";**

Ҡыйғы районы Иҫке Мөхәмәт ауылынан Лида Зарипова, Учалы районы Ыҫтамғол ауылынан Әҙилә Ғәйетколова, Стәрлебаш районы Табылды ауылынан Айҙар Байғузин -**Һәҙиә Дәүләтшина "Ырғыҙ";**

Дәүләкән районы Чапаев ауылынан Фәниә Дәүләтгәрәева, Учалы районы Илсе ауылынан Флүрә Ибраһимова, Әбйәлил районы Әбделгәзе ауылынан Рәсимә Моратова, Баймаҡ районы Алғазы ауылынан Р. Ҡунысбаева, Күгәрсен районы Бикес ауылынан Сәйҙә Хәсәнова - **"Башҡорт халыҡ ижады";**

Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан Шәмсинур Нәҙерголова, Баймаҡ районы Йомаш ауылынан Миңлебикә Янбаева - **Таңһылыу Кусимова "Башҡорт исемдәре";**

Күмертау ҡалаһынан Рәйсә Исҡәндәрова, Өфө районы Нуғай ҡасабаһынан Рәйсә Әсәҙуллина, Мәләүез районы Этҡөсөк ауылынан Минзәлә Сангишева, Көйөргәҙе районы Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Чурин, Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан Рәшит Сәлимов - **"Медицина Пророка";**

Хәйбулла районы Садовый ҡасабаһынан Вәлимә Шаматова, Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылынан Иҙрис Маликов, Сибай ҡалаһынан Ирек Бикмәтов, Әбйәлил районы Ҡужан ауылынан Ғәйфулла Хәйруллин, Бөрйән районы Әтек ауылынан Хәләф Ибраһимов - **Буранбай Исҡужин "Хазина";**

Өфө ҡалаһынан Сажидә Ишмөхәмәтова, Стәрлебаш районы Ҡабыҡҡыуыш ауылынан Солтанбәк Ишембәтов, Баймаҡ районы Төркмән ауылынан Мөхтәр Ғәйепколов, Ғафури районы Байымбәт ауылынан Хәтирә Сәфәрғолова, Салауат районы Көҫәпәй ауылынан К. Иҙрисов, Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Аҫҡар ауылынан Мәрфуға Шәйхетдинова, Дыуан районы Мәсәғүт ауылынан Айһылыу Сирбаева, Ейәнсура районы Иҫәнгол ауылынан З. Әлмөхәмәтова - **Нуриман Мусин "Мөхәббәт сере".**

**Әйткәндәй, был акциябыҙ киләһе миҙгел өсөн дә үҙ көсөндә ҡалыуын белеп ҡуйығыҙ.** Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош телендәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, бик шат булырбыҙ. Шулай уҡ квитанцияларығыҙҙа адрестар тулы, аңлайышлы итеп тултырылһын ине, тигән теләк тә бар.

**Иҫкәрмә.** Бүләкләнеүселәр китаптарҙы үҙҙәренең почтальондары аша алыр. Кемдәргә китаптар барып етмәгән, улар Өфөләге балалары, туғандары, таныштары аша Революцион урамы, 167/1 адресы буйынса урынлашҡан редакциябыҙҙан алдыра ала.

- Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ҮҪМЕР ЭШЛӘП ҮҪҺЕН!



**Йәйге каникулдарҙа өҫтәмә аҡса эшләү мөмкинме? Мөмкин! Малайҙарға һәм ҡыҙҙарға, шулай уҡ уларҙың ата-әсәләренә нимә белергә кәрәк?**

**Үҫмерҙәрҙе эшкә урынлаштырғанда тыуған төп һорауҙар:**

**"Нисә йәштән килешеү төҙөргә мөмкин?"**

- 16 йәштән алып - РФ Хеҙмәт кодексына ярашлы, сикләүҙәрһеҙ, үҙаллы килешеү төҙөй ала.
- 15 йәштән өлкән үҫмерҙәр еңел эште башҡарыуға үҙҙәре килешеү төҙөй ала. Уҡыуҙан буш ваҡытта, шулай уҡ дөйөм мәктәптә белем алғандан һуң эшләргә мөмкин.
- 14 йәшкә тиклем үҫмерҙәр килешеүҙе ата-әсәнең һәм опека органдарының ризалығы менән генә төҙөй ала.

Балағыҙға 14 йәш тулмаһа, ул кинотеатрҙа, театрҙа эшләй, концерттарҙа, цирк тамашаларында йәки спорт ярыштарында ҡатнаша ала. Балиғ булмаған үҫмер өсөн килешеүгә ата-әсә йәки опекун ҡул ҡуя.

Балиғ булмағандар өсөн бер ҡәтғи ҡағиҙә бар - улар зарарлы йәки хәүефле шарттарҙа эшләргә, хеҙмәт уларҙың һаулығына һәм әхлаҡи үҫешенә зыян килтерергә тейеш түгел.

**"Үҫмерҙәрҙе эшкә урынлаштырыу өсөн ниндәй айырым шарттар бар?"**

- Уларға һиңау ваҡытын билдәләргә ярамай.
- Үҫмер эш биреүсе иҫәбенә үткәрелгән мотлаҡ медицина тикшереүенән һуң ғына эшкә ҡабул ителә. Артабан уны йыл һайын 18 йәшкә тиклем үтергә кәрәк.
- Шәхси йәки коллектив матди яуаплылыҡ тураһында яҙма килешеүҙәр төҙөргә ярамай.

**"Балиғ булмағандарға нимә ҡушыу тыйыла?"**

- Рөхсәт ителгән йөктән артыҡ ауырлыҡты ҡул менән күтәреп йөрөргә ҡушылмай.
- Эштән тыш, ял һәм байрам көндәрендә, шулай уҡ төнгө сменала эшләтергә, командировкаға ебәрергә ярамай.
- Һанап ителгән тыйыуҙар художестволы әҫәрҙәр ижад итеүҙә йәки башҡарыуҙа ҡатнашҡан ижади хеҙмәткәрҙәргә, шулай уҡ спортсыларға ҡағылмай.

**"Үҫмерҙәр аҙнаһына нисә сәғәт эшләй ала?"**

- Уҡыуҙы тамамлаған үҫмерҙәргә: 16 йәшкә тиклем - аҙнаһына 24 сәғәттән артмаҫҡа тейеш; 16-18 йәш - аҙнаһына 35 сәғәттән артыҡ түгел.
- Уҡыуҙы эш менән бер юлы алып барған үҫмерҙәргә: 16 йәшкә тиклем - аҙнаһына 12 сәғәттән артмаҫҡа тейеш; 16-18 йәш - аҙнаһына 17,5 сәғәттән артыҡ түгел.

**"Ә көнөнә нисә сәғәт?"**

- Уҡымаған үҫмерҙәр: 14-15 йәшлектәр - көнөнә 4 сәғәт; 15-16 йәшлектәр - көнөнә 5 сәғәт; 16-18 йәшлектәр - көнөнә 7 сәғәт.
- Уҡыуҙы һәм эште бер юлы алып барған үҫмерҙәр: 14-16 йәшлектәр - көнөнә 2,5 сәғәт; 16-18 йәшлектәр - көнөнә 4 сәғәт.

**"Эште ҡайҙа эҙләргә?"**

- "Рәсәйҙә эш" порталында https://trudvsem.ru/
- Эҙләгән саҡта фильтр ҡуйығыҙ - "Трудоустройство социально незащищенных групп населения". Артабан - "Несовершеннолетние работники" һәм "Применить".
- Яңы вакансиялар тураһында тиҙ арала белеү һәм эш биреүселәрҙән тәҡдимдәрен үткәрмәү өсөн үҙегеҙҙең кеҫә телефоныгыҙға "Рәсәйҙә эш" ҡушымтаһын ҡуйығыҙ.
- Мәшғүллек үҙәгенә мөрәжәғәт итергә мөмкин. Бәйләнеш өсөн телефон номерҙарын Башҡортостан Республикаһы халыҡ мәшғүллеге хеҙмәтенең Интерактив порталында ҡарағыҙ - https://rabota.bashkortostan.ru/czn/index .

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!

# КЕМГӘ ЯҢЫ АВТОМОБИЛЬ?

**Апрель һөҙөмтәләре буйынса Рәсәй халҡы 28 мең яңы автомобиль һатып алған. Был мәғлүмәтте, "Электрон паспорт" акционерҙар йәмғиәте мәғлүмәттәренә нигеҙләнеп, "Автостат" агентлығы экспертары килтерә.**

Апрель күрһәткестәре һуңғы 15 йылда иң түбәне. Бығатиклем иң түбән һан пандемия осоронда - 2020 йылдың апрелендә була. Ул ваҡытта рәсәйҙәр бер айҙа 54,5 мең яңы автомобиль һатып ала. Быйылғы апрель күрһәткесе марттыҡынан (78,9 мең) өс тапҡырға әҙерәк һәм былтырғы апрель менән сағыштырғанда (171,4 мең) 6 тапҡырға кәм.

Ғәҙәттә, рәсәйҙәр LADA (6377 дана), Kia (3396 дана), Hyundai (2877 дана), Renault (2166 дана) маркалы яңы автомобилдәр һатып ала, улар өлөшөнә дөйөм күләмдең 53 проценты тура килә.

Мең билдәһен шулай уҡ Skoda (1402 дана), Toyota (1225 дана), Chery (1143 дана), Volkswagen (1064 дана) һәм BMW (1006 дана) үтеп китә. Лидерҙар рәтен Haval (979 дана) яба.

Апрель рейтингында тәүге өс урынды "лада"лар биләй. Улар араһында иң популяры - "Гранта", ул 2180 берәмек һатыла. Икенсе урында - "Веста" (1652), өсөнсөлә - "Нива" (1604, Legend һәм Travel-ды ла ҡушып).

Киләһе өс урында "кореецтар" тора: Kia Rio (1213), Hyundai Solaris (1211) һәм Hyundai Creta (895).

Бынан тыш, ТОП-10-ға Европа маркаһынан тағы дүрт модель инә: Skoda Rapid (876), Renault Duster (766), Volkswagen Polo (760) һәм Renault Logan (706).

# ҠАРҒА АҢРА ТҮГЕЛ

**Ғалимдар ҡарғаларҙың маймылдан аңрараҡ түгеллеген асыҡлаған. Айырыуса йәш ҡарғалар интеллект кимәле буйынса маймылдарҙан һис тә ҡалышмай.**

Ҡарғалар приматтар менән бергә бәләкәй балалар интеллектына ла тиңләшә ала, ләкин шулай ҙа был ҡоштарҙың аҡыл һәләте индексы әлегә асыҡланмай ҡала. Ҡарғаларҙың приматтарҙан ҡалышҡан берҙән-бер үҙенсәлеге арауыҡ фекерләүенә тестар. Был ҡоштарҙың маймылдар менән оҡшашлығын раҫлаусы тағы бер күрһәткес - зыянлы аҙыҡты күп ҡулланыу. Мәҫәлән, кешеләр фастфуд яратһа, ҡарғалар иһә сүп-сар бактарындағы аҙыҡ ҡалдыҡтары менән туклана, тип мәрәкәләй ғалимдар.

ЯЛ ИТЕРГӘ КИЛЕГЕҘ!

# ХӘРӘКӘТТӘ - БӘРӘКӘТ

**Өфөлә ҡайҙарҙа түләүһеҙ спорт менән шөғөлләнергә була? Йәй көндәре өфөләрҙең күпселеге һауыҡтырыу-физик күнегеүҙәр менән фитнес үҙәктәрҙә түгел, ә йәшәгән ерҙәренә яҡындағы парк, сквер һәм йүгерергә, велосипедта йөрөргә, урам тренажерҙарында күнекмә эшләргә мөмкин булған асыҡ һауалағы майҙандарҙа шөғөлләнеүҙе өстөн күрә. Республикабыҙ баш ҡалаһындағы шундай урындар хаҡында "Башинформ"дың түбәндәге күҙәтеүендә танышығыҙ.**







## Тарихи үҙәк

Өфөнөң тарихи үҙәк биләмәһендә йүгереү һәм башҡа спорт төрҙәре менән шөғөлләнеү өсөн иң уңайлы урын - Якутов паркы. Һуңғы ваҡыттағы төҙөкләндереү барышында парк тирәләй велосипед һәм йәйәүлеләр өсөн километр ярым самаһы юл һалынды. Үҙәк аллея янында йомшаҡ ҡатлам түшәлгән һәм вандал боҙоҡлоҡтарға бирешмәүсән универсаль спорт майҙансығы урынлашҡан, унда теләгән бер кеше шөғөлләнә, мускулдарын нығыта ала. Йәйге осорҙа иһә Һалдат күлендә кәмәлә йә катамарандарҙа йөҙөргә була.

Үҙәктәге тағы бер әүҙем спорт урыны Йәштәр һарайы менән "Өфө уттары" ял һәм күңел асыу комплексы араһында урынлашҡан Еңеүҙең 50 йыллығы скверы. Уның тирәләй шулай уҡ эске аллеялар араһынан да йәйәүлеләр өсөн һуҡмаҡ та, велоюлдар ҙа һалынған. Спорт менән шөғөлләнеү өсөн йомшаҡ ҡатлам түшәлгән спорт майҙансығында өлкәндәр ҙә, балалар ҙа шөғөлләнә ала.

Ошо рәттән яңы төҙөлгән Ағиҙел йылғаһы буйын да әйтеп китеү мотлаҡ. Салауат Юлаев һәйкәленән алып Пугачев урамына тиклем велосипедсылар өсөн юл, шулай уҡ йүгереүселәр һәм йәйәүлеләр ҡарамағына йомшаҡ ҡатлам түшәлгән һуҡмаҡ бар, уларҙың дөйөм оҙонлоғо 3 километрҙан да артып китә.

## Йәшел сауҡалыҡ

Был районда йәшәүсе халыҡ өсөн әүҙем ял урыны булып Урмансылар паркы хеҙмәт итә. 116 гектар майҙанды биләгән был йәшел зонала һуңғы йылдарҙа байтаҡ төҙөкләндереү эштәре башҡарылды. Йәйәүлеләр юлына асфальт түшәлде, сүп һауыттары, эскәмйәләр ҡуйып сығылды. Спорт менән шөғөлләнеү өсөн иһә 1 һәм 2,5 километр оҙонлоҡтағы түңәрәк әйләнәнән хасил иткән ике юл төҙөлдө, үҙәк майҙанда футбол яланы, волейбол һәм башҡа күмәк уйын майҙансыҡтары урынлаштырылды.

## Географик үҙәк

Был йәһәттән иң уңайлыһы - Ғафури паркы, әлбиттә. Унда ла һуңғы ваҡытта төҙөкләндереү эштәре тынманы. Йәйәүлеләр өсөн һәм велоюлдарҙан тыш, парк бында Блюхер урамы менән тимер юл һыҙаты араһындағы ҡала урманы иҫәбенә киңәйтелеп, ҡыш саңғыла йөрөү өсөн трасса итеп файҙаланыла. Октябрь проспектының төньяҡ кварталдарында йәшәүселәр "Биатлон" спорт комплексын файҙалана ала.

## Һупайлы

Баш ҡаланың был микрорайонында 150 мендән ашыу кеше йәшәй һәм улар өсөн ике төрлө әүҙем ял урыны бар. Береһе уның Ҡариҙел йылғаһының бетон менән ҡапланған яр буйы һуҡмағы, ул 5 километрға яҡын оҙонлоҡта һәм йәйәүлеләр өсөн дә, велосипедсыларға ла бик уңайлы. Икенсе урын - "Кашҡаҙан" паркы. Бында барған комплексы төҙөкләндереү эштәре быйыл июнь баштарында тамамланды. Билдәле булыуынса, Өфөләге иң ҙур булған Ҡашҡаҙан күленең төбө тулыһынса таҙартылып, һыуы яңыртылды, таҙартыу ҡоролмалары ҡуйылды, тиҙҙән унда кәмәләрҙә йөҙөргә буласаҡ. Күл тирәләй километрҙан ашыу юл һалынды, унда йүгереү, йәйәү һәм велосипедтарҙа йөрөү өсөн бик уңайлы. Парк биләмәһендә волейбол һәм башҡа күмәк спорт уйындары өсөн майҙансыҡтар, тренажерҙар бар

## Черниковка

Бында халыҡ физик әүҙемлеген үҫтереү өсөн электән "Беренсе май" паркын яратып файҙалана. 2020 йылдағы төҙөкләндереү эштәренән һуң бында ла уңайлы йәйәүлеләр һуҡмағы, спорт-уйын майҙансыҡтары, футбол, волейбол, баскетбол, хоккей, теннис, бадминтон менән шөғөлләнеү өсөн күп функциялы спорт майҙаны барлыҡҡа килде.

---

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАШЫҢ ЭШЛӘМӘҺӘ...

## аяғыңа ауырлыҡ төшә

Баҙ ҡаҙыһаң, икене ҡаҙы - береһе үҙеңә булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бөтөн ҡылыҡтарың үҙ йәшеңә ярашлы булырға тейеш.

**(Квинт Флакк).**

Эштән һуң сәләмәт торошта ял итеү - ошонан да ҙурыраҡ ҡәнәғәтлек булыуы мөмкинме!

**(Иммануил Кант).**

Власть - ғорурҙарҙы һәм ярһыуҙарҙы, байлыҡ ҡыйыуһыҙҙарҙы һәм баҫалҡыларҙы ылыҡтыра; бына ни өсөн йәшләк власҡа ынтыла, ә ҡартлыҡ иһә байлыҡ алдында ялағайлана.

**(Сэмюэл Джонсон).**

Иң тәүҙә һүҙ булған, һуңынан иһә ул тапалған.

**(Станислав Лем).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер уҡыусы уҡытыусыһы янына килә һәм шулай тип мөрәжәғәт итә:**

**- Уҡытыусым, ҡайһы саҡта минең холҡом тыйып тотҡоһоҙ булып китә. Асыуҙан нисек дауаланырға була икән?**

**- Улайһа, әйҙә, миңә ул холҡоңдо күрһәт! - ти уҡытыусы.**

**- Хәҙер генә мин һеҙгә уны күрһәтә алмайым, - ти уҡыусы.**

**- Ярай, улайһа, аҙаҡ күрһәтерһең,- тип мут йылмая уҡытыусы. - Ҡасан булдыра алаһың, шунда килтереп күрһәтерһең миңә ул холҡоңдо...**

**- Мин уны һеҙгә килтереп күрһәтә алмайым, - ти уҡыусы аптырап.- Ул бит миңә көтмәгәндә килә. Һеҙгә килтереп еткергәнсе, ул бит юҡҡа сыға...**

**- Улай булғас, асыу һинең айырып алғыһыҙ холоҡ үҙенсәлеген түгел, - ти уҡытыусы. - Әгәр ҙә ул һинең холҡоң икән, уны теләгән ваҡытта миңә күрһәтә алыр инең. Һин тыуғанда ул һиндә булмаған. Тимәк, ул һинеке түгел, ул ситтән килгән холоҡ. Шуның өсөн асыу йөрәгеңә килеп инеү менән таяҡ ал да уны туҡма, һинән ҡасып киткәнсе туҡма уны - минең кәңәшем шул...**

**...Һысынлап та, асыуығыҙ килһә, әйҙән сығығыҙ ҙа уны ете тапҡыр уратып йүгерегеҙ. Шунан ағас төбөндәге эскәмйәгә ултырып, асыуығыҙ ҡайҙа киткәнен күҙәтегеҙ. Һиҙҙегеҙме, асыуҙы кемгәлер күрһәтеүҙең, уны тыйыуҙың йә булмаһа уны баҫтырып ҡуйыуҙың кәрәге юҡ. Асыу өсөн көстө лә, һүҙҙе лә, нервыларҙы ла әрәм итеүҙең кәрәге юҡ икәнен аң менән тойорға ғына кәрәк. Быны аңығыҙ менән тойһағыҙ, асыу һеҙҙән бөтөнләйгә китәсәк..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ"
нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
22 июль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 906